ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

12-18 март (буранай) 2016

№ 11 (689)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Мөмкинлектәр бар ҙа...** улар менән файҙаланыусылар аҙ



3

**Тарихи мираҫ һағында**



5

**Өс балам да бер атанан булһын, тинем...**



8-9

**Ауырыуҙың хәле...** йылы һүҙҙән дә яҡшыра ала



12

**ТВ-программа** 14

***Ахмаҡ һәм наҙан бәндәне ошо биш сифат аша танып була: ул сәбәпһеҙгә асыулана, урынһыҙ ерҙә һүҙ һөйләй, үҙенә ҡағылмаған эшкә ҡыҫыла, әленән-әле фекерен үҙгәртә, уға кем яуыҙлыҡ, кем изгелек теләгәнен дә айыра алмай.***

***(Г. Честертон).***

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Оҙаҡламай билдәләнәсәк Бөтөн донъя шиғриәт көнөн сәбәп итеп, шиғыр уҡыйһығыҙмы, тип мөрәжәғәт итәйек әле һеҙгә?

***Спартак ИЛЬЯСОВ, яҙыусы:*** Уҡыйым, айырыуса күңелгә илһам кәрәк булғанда теге йәки был шағирҙың әҫәрҙәрен эҙләп табып уҡыйым. Зөлфиә Ханнанованың ижады күңелгә бик яҡын. Фекерле, тарихлы әйткән һүҙе. Тап һин уйлап йөрөгәнде тос ҡына итеп әйтә белә. Рәми ағай тәржемәһендә Омар Хайямды йыш ҡулыма алам. Рәми Ғариповтың шиғри йыйынтыҡтары унын үҙе менән аралашып йәшәгән йылдарҙан уҡ өҫтәл китабыма әйләнде. Заманында йәмәғәтселектең "муллаһы" - ҙур совхоздың партком секретары булып эшләгән саҡтарҙа ул беҙгә халыҡ менән осрашыуҙарға йыш килде. Беҙҙең яҡтар, үҙегеҙгә мәғлүм, тарихҡа, ер-һыу атамаларына бай, тәбиғәте иҫ киткес гүзәл. Бер нисә тапҡыр Рафаэль Сафин менән килделәр. Мәктәптәрҙә, клубтарҙа, һауынсылар, механизаторҙар янында сығыш яһайҙар ине. Мин уларҙы ҡырға, тәбиғәт ҡосағына алып сығам, тауға менәбеҙ, изге Әүеш күленә һуғылмай китмәй инек. Рауил Бикбаевтың да беҙгә килеп, уҡыусылар менән осрашыу үткәргәне булды. Мин был шағирҙарыбыҙҙы тәбиғәткә алып сыҡҡанда ер-һыуҙарыбыҙ тарихын, риүәйәттәребеҙҙе һөйләйем, боронғо яу урындарын күрһәтәм.

**Беҙҙең көнсығыш төбәктә бит Күсем хан менән бәйләнеш тығыҙ булған. Учалы ере бер өлөшө - Төньяҡ боҙло океанға, икенсе өлөшө көньяҡ тарафҡа барып ҡойған Уй, Тубыл, Исәт, Ағиҙел, Яйыҡ, Әй, Йөрүҙән йылғаларының башланып киткән, сығанаҡ алған төбәге. Беҙҙең яҡ - торғаны менән үҙе бер шиғриәт, шунан нисек шиғыр яратмаһын халҡыбыҙ!**

Башҡа авторҙарға килгәндә, тағы ла Рәшит Назаровтың шиғриәте күңелемде тетрәндерә. Әхмәр Үтәбайҙы, Тамара Ғәниеваны, Тәнзилә Дәүләтбирҙинаны, Лариса Абдуллинаны, Салауат Әбүзәрҙе, Дамир Шәрәфетдиновты яратып уҡыйым. Шунан, нигеҙҙә тарихи романдар яҙһам да, дәртләнеп китеп робағиҙар ижад итеп ташлайым. Шиғриәтһеҙ бер нисек тә йәшәп булмай. Унһыҙ донъябыҙ - һоро, күңелебеҙ буш булыр ине...

***Фәтих МЫРҘАБУЛАТОВ, хеҙмәт ветераны:*** Шиғырҙар уҡыйым мин, тик һайлап ҡына. Әле һеҙ ошо һорауҙы биргәс, шуны аңланым: мин күберәк шиғриәтте авторҙарына ҡарап уҡыйым икән. Ҡайта-ҡайта уҡыған шағирҙарым тип Аҡмулланы, Бабичты, Рәми Ғариповты, Рәйес Түләкте, Рәмил Ҡолдәүләтовты һәм Салауат Әбүзәрҙе әйтер инем. Исемдәре әллә ни билдәле булмаған авторҙар осрай ҡалһа, әйтәйек, матбуғат биттәрендә, мин улар әҫәрҙәренә өҫтән-мөҫтән генә күҙ йүгерткеләйем. Шунда ла аңларға була бит ул кемдең кемлеген, ниңә уртаса ғына йәки өйрәнсек шиғырҙарға ваҡыт әрәм итергә? Ә бына Таңһылыу Ҡарамышева менән Тамара Ғәниеваның, Хисмәт Юлдашев менән Тамара Искәндәриәнең, Лариса Абдуллина менән Зөлфиә Ханнанованың, Зөһрә Ҡотлогилдина менән Гөлшат Әхмәтҡужинаның шиғри шәлкемдәрен йотлоғоп уҡыйым, көтөп алам уларҙың һәр сығышын. Бөгөнгө башҡорт шиғриәтенә байҡау яһай алмайым, әлбиттә, быныһы әҙипселәрҙең эше. Әйткәндәй, гәзит-журналдарҙа ана шундай байҡау-күҙәтеүҙәр ҙә уҡығы килеп китә. Шуларҙан сығып, уҡыусы үҙе өсөн әле билдәһеҙ булған өмөтлө йәштәрҙе күберәк белер, улар-ҙың шиғырҙарын да табып уҡырға тырышыр ине. Һуңғы ваҡыт нишләптер телерадио программаларҙан да "Шиғриәт минуттары" һымағыраҡ тапшырыуҙар күренмәй башланы. Ә бит халҡыбыҙ араһында шиғриәткә һөйөү тәрбиәләүҙә унын әһәмиәте ҙур була торғайны. Баш ҡалабыҙ сәхнәләрендә, юғары уҡыу йорттарының актовый залдарында, мәктәптәрҙә, ауыл клубтарында шиғриәт кисәләре үткәреүҙе лә тергеҙергә кәрәктер, тип уйлайым. Бынан ике йыл элек бер төркөм талантлы шағирәләр - Ш. Бабич исемендәге йәштәр дәүләт премияһы лауреаттары үткәргән шиғриәт кисәһе гүзәл бер хәтирә булып, бөгөн дә күңелде яҡтырта. Ана шундай матур кисәләрҙе йышыраҡ ойоштороруға кем һуң ҡамасаулай?

**(Дауамы 2-се биттә).**

ФЕНОЛОГ ЯҘМАЛАРЫ

# ЯҘ ЕТТЕМЕ...

## алдаҡ һауа торошон көт!



**Тәбиғәттең бөтә миҙгеле лә матур. Ләкин ошо бер-берећенә бөтөнләй оҡшамаған дүрт миҙгел араһында һәр кешенең иң көтөп алғаны, моғайын, яҙ айҙарылыр. Бөтә тирә-яҡ ҡышҡы йоҡоһонан уянған ваҡыт күңелдәргә күтәренкелек өҫтәй, позитив энергия менән "һуғара", эшмәкәрлекте әүҙемләштерә һәм алға ҡуйылған уй-ниәттәргә еӊ һыҙғанып тотонорға этәргес бирә. Ә һауа торошонон матур, сыуаҡ тороуы, көндәрҙең йылый һәм оҙая барыуы, тирә-яҡтың йәшеллеккә күмелә башлауы тағы ла нығыраҡ илһам өҫтәй. Шуға күрә кешелек һәр дәүерҙә лә һауа торошонон ниндәй булырын алдан күҙалларға һәм шуға ҡарап үҙенең эшмәкәрлеген ҡорорға тырышҡан. Быйылғы яҙ ниндәй булыр? Синоптиктарҙың рәсми прогноздары менән бер рәттән, фенолог фараздарына ла күҙ һалып үтеү яҙыҡ булмаҫ. Шулай итеп, һүҙ - Бөрйән районы Ҡотан ауылында йәшәүсе фенолог Әлмира Хөснөтдиноваға.**

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

✓ *Бөгөн шиғыр, көй яҙыусылар бик күп, ә шағирҙар, композиторҙар һирәк. Хатта бер осор уҡыусыларын уйландырырлыҡ итеп аҡыллы, тос фекерҙәрен ярып һалған шағирҙарыбыҙҙың да әйтер һүҙе, ижад ҡөҙрәте ҡалманы һымаҡ.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Оҙаҡламай билдәләнәсәк бөтөн донъя шиғриәт көнөн сәбәп итеп, шиғыр уҡыйһығыҙмы, тип мөрәжәғәт итәйек әле һеҙгә?

(Башы 1-се биттә).

***Фәүзиә УСМАНОВА, скульптор:*** Шиғриәтте бала саҡтан үҙ иттем. Аҙағыраҡ, мәктәпте тамамлап, Мәскәүгә уҡырға киткәс тә СССР халыҡтары әҙәбиәте буйынса махсуслашҡан китап магазинына эйәләшеп алдым да, гел генә башҡорт яҙыусылары йыйынтыҡтарын һатып алыр булдым. Яҡын аралашҡан курсташ әхирәтем Таня милләте буйынса йәһүд ҡыҙы ине. Бер заман мин унан, ни өсөн төпкөл төбәктән килгән ябай башҡорт ҡыҙы менән дуҫлаштың әле, тип уйынлы-ысынлы һорай ҡуйҙым. "Сөнки һин сумкаңда һәр ваҡыт "косметичка" урынына шиғыр китабы йөрөтәһең", тип яуапланы әхирәтем. Һәм, ысынлап та, ул саҡтарҙа миңә тыуған ягымды һағыныу һағышын баҫырға ана шул шиғриәт ярҙам итте лә инде. Йәнә лә шиғри әҫәрҙәр буласаҡ һөнәремә яҡынайырға, гүзәллекте тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итте, тип уйлайым. Һынлы сәнғәт, скульптура - шул уҡ шиғриәт бит инде ул, тик уны бызҙараҡ саралар аша һүрәтләйһең генә. Архитектура гәүһәрен музыка менән сағыштырған һымаҡ был да. Һайланма шиғри йыйынтыҡтарҙан ғына тупланған бик шәп шәхси китапханам, үкенескә күрә, осҡтаханамды емергәндә юғалып, юҡҡа сыҡты. Йәш тә бара хәҙер, ләкин ул бер ҙә генә шиғриәткә булған һөйөүҙе юҡҡа сығара алмай. Дөрөҫ, бөгөн мин шиғырҙарҙың гәзит-журналдарҙа баҫылған варианттары менән генә танышып бара алам, сөнки йортобоҙға яҡынраҡ радиуста бер генә лә башҡорт китаптары һатылған магазин юҡ. "Китап" фирма магазины мин йәшәгән ергә ярайһы алыҫ булғанлыҡтан, өлкән кешегә ул тарафтарға сығып йөрөүе лә унай түгел. Хәйер, ваҡытлы матбуғатта баҫылып торған әҫәрҙәрҙән һәм уларға рецензияларҙан сығып та бөгөнгө шиғриәт тураһында фекер йөрөтөргә була. Элеккерәкке, минең йәшлек заманындағы шиғриәт традициялары, өлгөләре юҡ инде, әлбиттә. Заман башҡа - заң башҡа, тип әйтергә яратабыҙмы әле... Бөгөн шиғыр, көй яҙыусылар бик күп, ә шағирҙар, композиторҙар һирәк. Хатта бер осор уҡыусыларын уйландырырлыҡ итеп аҡыллы, тос фекерҙәрен ярып һалған шағирҙарыбыҙҙың да әйтер һүҙе, ижад ҡөҙрәте ҡалманы һымаҡ тойолоп китә миңә. Әллә ҡурҡыу хисе ояланымы күңелдәренә? Күрәһең, кемдер бергәү әйтмешләй, "тибешмәй" генә йәшәргә күнектек, ахыры. Бәлки, шулай һәйбәттер ҙә, тик шиғриәтебеҙ генә бынан ота алмай шул, ул һоро-һары төҫкә инеп, ваҡланыуға әйләнә күрмәһен, тип кенә борсолам. Үҙемә килгәндә, бөгөнгө шағирҙарыбыҙҙан Хисмәт Юлдашев менән Тамара Ғәниеваның ижады күңел талабыма ауаздаш. Йәш шағирҙарҙан да ҡайһы бер өмөтлө генәләре бар, исемләп әйтмәһәм дә, үпкәләмәҫтәр, шәйт: сөнки ундайҙар, бәхеткә, байтаҡ. Тик күмәк тауышта юғалып ҡына ҡалмаһындар, китап сыҡмай, тип көтөп ятмаһындар, матбуғатта йышыраҡ баҫылһындар.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ФЕНОЛОГ ЯҘМАЛАРЫ

# ЯҘ ЕТТЕМЕ...

## алдаҡ һауа торошон көт!

(Башы 1-се биттә).

- Яҙ айҙарындағы буласаҡ көн торошон үткән көҙ миҙгеле нисек булыуына ҡарап ҡуҙалларға була. Үткән көҙҙә күбергән һалҡынса һауа торошо торҙо, яуым-төшөм дә етерлек булды. Мәҫәлән, сентябрҙең тәүге көндәре һыуыҡ, ямғырлы булыуы, ә һуңынан бер аҙ йылытып, сыуаҡланып һәм хатта эҫе тороуы менән иҫтә ҡалды. Тимәк, марттың беренсе декадаһында йылы һауа торошоноң ҡапыл ғына һалҡын менән алмашыныуы ихтимал, ваҡыты-ваҡыты менән күпләп ҡар яуыуын көтөргә кәрәктер, тием. Ғөмүмән, март фенологтарҙа "яҙ алды" айы, тип билдәләнә, йәғни март яҙ миҙгеленә ҡараһа ла, уны ауыҙ тултырып, "Яҙ" тип әйтеп булмай. Бер көн бик йылы торһа, икенсе көнөнә уҙаҡҡа үтер һыуыҡ булырға ла мөмкин. Быйылғы мартта ла ошо уҡ хәл-торош буласаҡ. Уҙған сентябрь айының ямғырлы көндәргә бай булыуына ҡарағанда, мартта күпләп ҡар яуыуына килтереүе ихтимал. Ғөмүмән алғанда, ағымдағы йылдың тәүге яҙ айында һалҡынса һауа торошо өҫтөнлөк итәсәк. Көндәрҙең тиҙ генә йылыныуына өмөт итергә кәрәкмәҫ, тигән фекерҙәмен.

2015 йылдың октябре лә "кәрәкте бирҙе" - ямғыр ҙа ҡойҙо, ҡырау ҙа төштө, киҫкен, әсе ел дә иҫте, ҡар ҙа яуҙы. Был бигерәк тә айҙың тәүге яртыһында һиҙелерлек булды. Тимәк, апрель айында ла яуым-төшөм күп буласаҡ. Һауа температураһының 15 һәм унан да юғарыраҡ "үрмәләүе" мөмкин. Көндәрҙең йылыныуы һәм һауаның еүеш, дымлы тороуы һыуыҡ тейҙереп ауырыуҙарҙың киҫкенләшеүенә килтерергә мөмкин. Әйткәндәй, һауа температураһы ҡапыл ғына түгел, ә яйлап ҡына күтәрелер, тип уйлайым.

Шулай уҡ быйылғы апрель йыш ел уйнауы менән айырылып торасаҡ. Дөйөмләштереп әйткәндә, айҙың тәүге яртыһы һалҡынса һәм ямғырлы, ә унан һуң көндәрҙең йылы, ҡояшлы булыуы фаразларға мөмкин.

Ноябрь айында ҡыш үҙенең хоҡуҡтарын белдерә башлағайны, тимәк, майҙа йәйҙең тулы һулышын тойорға мөмкин буласаҡ. Былтырғы йылдың һуңғы көҙ айы һауа температураһының "һикереүе" менән үҙенсәлекле булды, йәғни бер көн -2 градус ҡына булһа, ҡайһылыр бер ваҡытта термометрҙың терегөмөшө минус 20-22 градусҡа тиклем төшә торғайны. Тимәк, майҙа ла ошо уҡ күренеш булыуы, йәғни 5-6 градус йылы ла, 20-25 градусҡа тиклем эҫе лә булыуы ихтимал. Яуым-төшөмдө әллә ни мул булды, тип әйтеп булмай - ноябрҙә ямғыры ла, ҡары ла самалы ғына яуҙы. Шулай ҙа айҙың тәүге яртыһында ҡарҙың көн дә тиерлек яуыуы май баштарында көндәрҙең ямғырлы булыуына ишаралай. Ноябрь һуңында һауа температураһының ни бары 2-5 градус ҡына һыуыҡ булыуынан сығып ҡарағанда, май ахырында көндәрҙең һалҡынайып китеүе лә ихтимал. Ләкин яҙ барыбер үҙенекен итәсәк һәм йәйгә сыуаҡ, аяҙ, йылы көндәр менән баҫырбыҙ, тип өмөтләнәм.

Үҙемдең 30 тиҫтәнән ашыу алып барған күҙәтеүҙәремдән сығып ошондай фараздар ҡылырға йөрьәт итәм. Ләкин һауа торошоноң тоторокһоҙ, мыжыҡ, йыш үҙгәреүсән холоҡло ҡатын-ҡыҙ кеүек икәнен күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк. Шуға күрә, һауа торошона ҡағылышлы аныҡ, дөп-дөрөҫ кенә прогноздар эшләү урынһыҙ һәм яҙылғандарҙың теүәл генә тура килеүен көтөргә ярамай. Тәбиғәттең үҙ законы һәм ул күҙаллауҙарҙың бөтөнләй икенсе ҡиәфәтен күрһәтергә мөмкин. Бигерәк тә яҙҙың һауа торошо йыш үҙгәреүсән, алдаҡ була.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**яҙып алды.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**
**Гәзит уҡыусыларыбыҙ араһында ла һауа торошон, йәнлек-ҡоштарҙың йәшәйешен, үҫемлектәр үҙенсәлеген ҡарап-күҙәтеп барыусылар һәм шулар нигеҙендә төрлө фараздар ҡороусы фенологтар барҙыр. Улар ҙа үҙ күҙәтеүҙәре менән уртаҡлашып, беҙгә яҙып ебәрһә, фәһемле лә, ҡыҙыҡлы ла булыр ине. Хаттар көтөп ҡалабыҙ.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**31 мартҡа тиклем "Киске Өфө" гәзитенә 2016 йылдың икенсе яртыһы өсөн арзан хаҡҡа - 545 һум 76 тингә (индекс - 50665) яҙылыу бара. Почтала абонемент йәшниге булғандар өсөн яҙылыу хаҡы - 517 һум 26 тин. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтары гәзитебеҙгә 488 һум 22 тингә, почтала абонемент йәшниге булғандар 465 һум 42 тингә яҙыла ала.**

● Мартта ла 2016 йылдың икенсе яртыйылыйы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 3 уҡыусыбыҙға **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә аңлатма"** тигән китап бүләк итмәксебеҙ. Йә, кем алыҡ?

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.




● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● Гәзитебеҙгә беренсе ярты йылға яҙылып өлгөрмәгәндәр марттың 20-нә тиклем яҙылһа, уны апрелдән **(3 айға - 272 һум 88 тин)** алдыра башлаясаҡ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов стратегик планлаштырыу мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Унда Башҡортостан Хөкүмәте ағзалары, төбәктең ғилми берләшмә һәм Мәскәү "Сколково" идара итеү мәктәбе вәкилдәре ҡатнашты. Кәңәшмәлә республиканың 2030 йылға тиклемге социаль-иҡтисади үҫеш стратегияһы өҫтөндә эш барышы тикшерелде, ул 2017 йылдың 1 ғинуарына тиклем ҡабул ителергә тейеш.

✓Төбәк ҡаҙнаһының килем өлөшө 2,5 миллиард һумға арта. Сығымдар 2,8 миллиардҡа үҫә. Ошо төҙәтмәләрҙән һуң Башҡортостан бюджетының күләме 128 миллиард һум тәшкил итәсәк. БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың профилле комитетында республиканың финанс министры Рида Собханҡолова "2016 йылға һәм 2017, 2018 йылдарҙың план осорона Башҡортостан Республикаһының бюджеты тураһында"ғы Законға төҙәтмәләр тәҡдим итте. Парламентарийҙар яҡын арала үтәсәк пленар ултырышта төҙәтмәләрҙе ҡабул итергә ниәтләй.

✓Март айында Өфөнөң Эшҡыуарҙар союзы бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ вәкилдәре өсөн бушлай шәхси консультациялар ойоштора. 15 мартта ер бүлеү, проектлау, экспертиза, төҙөлөшкә рөхсәт алыу, 29-да бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ предприятиелары өсөн ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау тураһында законды ғәмәлдә ҡулланыу мәсьәләләре буйынса консультация алырға мөмкин. (347) 241-47-44 телефоны йәки souz@ufamail.ru электрон почтаһы буйынса өҫтәмә мәғлүмәт алырға, сараларҙа ҡатнашыу өсөн теркәлергә була.

✓9 мартта Өфөлә максималь һауа температураһы теркәлгән. Был йыл башынан алып етенсе осраҡ, тип билдәләй Башҡортостандың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторингы идаралығы синоптиктары. "Өфө-Дим" метеостанцияһында термометр бағанаһы +6,9 градусҡаса күтәрелгән, һуңғы тапҡыр был көндө ошондай йылылыҡ 2006 йылда күҙәтелгән, ул саҡта һауа температураһы +6,2 градус тәшкил иткән. "Өфө-Аэропорт" метеостанцияһында максималь температура +6,6, гидрометеорология үҙәгендә (Р. Зорге урамы, 25/2) +8 градусҡа еткән.

УҠЫП СЫҠТЫМ...

**"Киске Өфө"нөң 3-сө һанында "Йәмғиәт фекеренә ҡолаҡ һалыу фән өсөн дә, идара итеүселәр өсөн дә кәрәк" тигән диалогты уҡып сыҡҡас, унда күтәрелгән ҡайһы бер мәсьәләләр буйынса бер нисә фекер әйтмәксе булдым. Ысынлап та, бөгөн йәмғиәт фекеренә ҡолаҡ һалмайынса, халыҡтың тын алышын, уй-ниәттәрен белмәйенсә алға китеп булмай. XIV-XV быуаттарҙа алтын һәм көмөш тәңкәләр, XVI быуат урталарында тауар дәүләт көсөн билдәләһә, бөгөн был ҡараш тамырынан үҙгәргән һәм дәүләт көсөн бары тик уның халҡы күрһәтә, тип һанала. Шуға күрә лә, хатта бәләкәй генә ауыл менән дә идара итеү, дөрөҫ сәйәсәт алып барыу өсөн социологтарға ла, демографтарға ла эш етерлек.**

# МӨМКИНЛЕКТӘР БАР ҘА...

## улар менән файҙаланыусылар аҙ

Әңгәмә барышында тарих фәндәре кандидаты Гөлдәр Хилажева демографик процестарҙы сағыштырып, ҡала менән ауыл араһында ҙур айырма булыуын билдәләй. Эйе, цивилизациябыҙ юғары кимәлгә күтәрелгән, заман технологиялары үҫешкән заманда йәшәһәк тә, ҡала менән ауыл араһындағы ҡайһы бер ыңғай һәм кире айырмалыҡтар бөгөн дә һаҡланып ҡалған һәм улар социаль-иҡтисади мәсьәләләрҙә генә түгел, ә рухи ҡиммәттәрҙә, быуындан-быуынға күсә килгән традицияларҙа асыҡ күренә. Был айырмалыҡтар халыҡтың йәшәгән мөхитенә, матди хәленә, йәмғиәттә тотҡан урынына ла тығыҙ бәйләнгән. Академик Мазһар Иҫәнбаев республиканы ете зонаға бүлеп тикшергән кеүек, беҙ ҙә районҙарҙы һәм шул районға ингән ауылдарҙы айырып ҡараһаҡ, һәр ҡайһыһының үҙенә генә хас булған үҙенсәлектәргә һәм сифаттарға эйә булыуын күрер инек. Мәҫәлән, Белорет районында 19 ауыл хакимиәте биләмәһе бар. Был биләмәләрҙең иҡтисади һәм демографик хәле лә төрлөсә. Ошо ауылдарҙа йәшәгән халыҡтың ниндәй тормош позицияһы алып барыуы ла, мәҡәләлә Гөлдәр Хилажева билдәләгәнсә, шәхсән үҙҙәренән тора. Сағыштырыу өсөн төрлө хакимиәткә ҡараған Нура, Аҙналы һәм Сермән ауылдарын ғына алырға мөмкин.

Нура ауылы бәләкәй генә, халыҡ иҫәбе өс йөҙгә лә тулмай. Оптималләштереүгә бәйле, ауылдағы тулы булмаған урта мәктәп башланғыс итеп ҡалдырылған. Эш урыны булмағанлыҡтан, йәштәр ҙә ситкә китергә тырыша. Йәштәр өсөн төрлө программалар эшләһә лә, барыһы ла уның менән файҙалана белмәй. Кемеһенеңдер мәшәҡәтләнеп йөрөргә түҙемлеге етмәй, икенсеһенең документ юлларға аҡсаһы юҡ. Хакимиәт ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә тырышһа ла, әлегә был әүҙемлек бер яҡлы ғына килеп сыға. Шуға ла, дәүләт ярҙамы менән үҙ мөйөшөн булдырырға теләүселәр ҙә бик һирәк, бер нисә ғаилә генә "Әсәлек капиталы"н файҙаланып, йорт күтәргән. Араларында был аҡсаны ла маҡсатҡа ярашлы тотонмаусылар бар. Көтөүлектәр булмағанлыҡтан, ауылда малсылыҡ менән шөғөлләнеү отошло түгел. Ә бына ҡош-ҡорт үрсетеү, баҡсасылыҡ, туризмды үҫтереү буйынса мөмкинлектәр бар. Тәүәккәлдәр, ныҡыштар бынамын итеп үҙ эшен асып ебәрә ала. Тик әллә дәрте, сәме юҡ, әллә инде битарафлыҡ баҫҡан, халыҡ үҙ мөмкинлеге менән файҙаланырға ашыҡмай. Нәҡ бына ошондай ауылдарҙа кеше потенциалы юғала ла инде, гөрләтеп донъя көтөрҙәй, ауылын үҫтерергә өлөш индерерҙәй кешеләр ситкә китә.

Ә бына районДың Аҙналы ауылында хәлдәр икенсерәк. Был ауыл да әллә ни ҙур түгел, бөтәһе 535 кеше йәшәй, хужалыҡтар һаны 148. Шулай ҙа бында ауыл тормошоноң файҙаһын күрә, шифаһын тоя белгәндәр, рәхәтләнеп мал, ҡош-ҡорт аҫрағандар, баҡса үҫтергәндәр йәшәй. Шәхси хужалыҡтарҙа 349 баш - эре, 230 баш ваҡ мал, 80 баш йылҡы булыуы үҙе генә лә ошоға асыҡ дәлил булып тора. Май сүлмәге тышынан билдәле, тиҙәр. Аҙналыға килеп инеү менән матур йорттар, төҙөк ихаталар күҙгә салына. Урам буйҙары ла таҙа, бөтә урамды йәмһеҙләп ултырған емерек өйҙәр ҙә күренмәй. Мал тотоусылар күп булғанлыҡтан, районда көнүҙәк проблемаға әйләнгән көтөү мәсьәләһе лә уңышлы хәл ителгән. Халыҡ тормош проблемаларына ҡарамай, заманса уңайлыҡтары булған



матур йорттарҙа етеш ғүмер итә. Эш урындарына маҡтанырлыҡ булмаһа ла, аҡса эшләү юлдарын да һәр кем үҙенсә табырға тырыша. Кемдер көн һайын ҡалаға йөрөп эшләһә, икенселәре йыл әйләнәһенә ҡалаға алып барып һөтөн, эремсеген, майын һата.

**Яҙғы эштәр иһә тиреҫ һатыу менән башланып китә. Йәйен - емеш-еләк, көҙгөһөн бәшмәк йыйыу ҙа ҙур ғына килем килтерә. Ауыл ерендә малдың, унан килгән табыштың файҙаһын яҡшы аңлай ауылдаштар. Бөгөн ауылдарҙа күпләп мәктәптәрҙе ябалар, тип зарланғанда, аҙналылар был яҡтан да әүҙемлек күрһәтте һәм ябырға тип хәл ителгән ерҙән мәктәптәрен һаҡлап ҡала алды.**

Сермәндә ике меңгә яҡын кеше йәшәй. Эшләйем тигәндәренә эш урындары ла етерлек: эшҡыуарлыҡ үҫешкән, социаль объекттар күп. Шул арҡала йәштәр ҙә ҡалаға китергә әллә ни атлығып тормай. Социаль-иҡтисади шарттар яҡшы булғас, тыуым кимәле лә юғары. Илебеҙҙең ҡайһы бер төбәктәрендә күпләп ауылдар бөткәндә, Сермән биләмәһендә яңы Иҙел ауылы барлыҡҡа килеүе, республикала ғына түгел, хатта Рәсәй кимәлендә аптыратырлыҡ ваҡиға булды. Бөгөн был ауылға бер нисә йәш ғаилә тәүгеләрҙән булып нигеҙ ҡорған, унда тулыһынса электр уты үткәрелгән. Бында 472 йорт, мәктәп, балалар баҡсаһы, спорт-һауыҡтырыу һәм сауҙа-көнкүреш комплекстары төҙөләсәк, тип планлаштырыла. 2040 йылда яңы ауылда 1500 кеше йәшәйәсәк, мәктәптә 400-ҙән ашыу бала уҡыясаҡ, ә балалар баҡсаһына 150-нән ашыу бала йөрөйәсәк, тип күҙаллана. Ошоларҙы миҫалға килтергәндә, Сермән ауылының хакимиәт башлығы Айытбай Зәбир улы Әйүпов кеүек алдынғы ҡарашлы, юридик һәм иҡтисади яҡтан белемле етәкселәр булғанда, ауылда кеше потенциалын үҫтереүгә йүнәлтелгән шарттар ҡала менән сағыштырғанда күпкә насар, тип, бөтәһен бер ҡалыпҡа һалыу ҙа дөрөҫ булмаҫ ине. Дәүләткә генә ышанып, ҡул ҡаушырып ултырмағанда, ауылда ла мөмкинлектәр етерлек. Бөгөн Белорет ҡалаһынан Сермән ауылына йөрөп эшләүселәр, унда төпләнергә теләүселәр бар икән, урындағы етәксенең был йәһәттән дөрөҫ сәйәсәт алып барыуын, ауыл инфраструктураһын, эшҡыуарлыҡты үҫтереп, эш урындары булдырыуға ҙур өлөш индереүен билдәләмәйсә булмай. Бында, социология фәндәре кандидаты Рим Вәлиәхмәтов әйткәнсә, көнбайыш тәжрибәһенә лә эйәрергә кәрәкмәй, бары тик ауыл мөмкинлеген дөрөҫ файҙаланыу өсөн шарттар булдырыу ғына мөһим. Һүҙ ҙә юҡ, был йәһәттән эштең иң ауыры һәм яуаплыһы, тәү сиратта, хакимиәт башлыҡтарына төшә. Уларҙың урындағы бюджетты һаҡсыл һәм файҙалы итеп тотона белеүе, социаль проблемаларҙы уңышлы хәл итеүе, инфраструктураны үҫтереүе һәм иң мөһиме - халыҡ мәнфәғәтен етди контролдә тотоуы арҡаһында ауыл менән ҡала араһындағы айырмалыҡ та кәмей төшә. Ошонда уҡ Сермән хакимиәтенең үҙҙәре проект төҙөп, ауылды һыулы, утлы итеүҙәрен дә маҡтап телгә алырға була. Миллионлап аҡса талап ителгән күп эштәрҙе сермәндәрҙең үҙҙәре башҡарып сығыуы республикала ла ҡыҙыҡһыныу уятты, яңы тәжрибә системаһы буйынса урамдарҙы яҡтыртыу, халыҡты һыу менән тәьмин итеү буйынса районДарҙан кәңәш һорап килеүселәр ҙә бик күп. Етәксенең алдан күрә белеүсәнлеге, киң фекер йөрөтөүе Рәсәйҙең һәм республиканың төрлө дәүләт программаларына эләгергә лә ярҙам итә. Был иһә, йәмғиәттә тотороҡло урын, иҡтисади-социаль үҫеш тигәнде лә аңлата.

Мәҡәләне йомғаҡлап, шуны әйтергә була: кеше потенциалын үҫтереү етәкселектән, дәүләттән генә тормай, ул халыҡтың әүҙемлегенә, битараф булмауына ла бәйләнгән. Ә инде халыҡ менән бер ҡаҙанда ҡайнап йәшәгән етәкселәр идара иткәндә, кеше потенциалын үҫтереүгә лә, демография мәсьәләләрен нығытыуға ла ныҡлы нигеҙ һалына. Ул ваҡытта халҡыбыҙға ла бер ниндәй ҙә урбанизация хәүефе янамаясаҡ, милләтәштәребеҙ сит ҡалыптарға яраҡлашмайынса, иркенләп үҙ ерендә, үҙ мөхитендә, туған телендә һөйләшеп йәшәй аласаҡ.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**
**Белорет ҡалаһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда 24-се тапҡыр "Һылыуҡай" гүзәллек конкурсы ойоштторола. Һайлап алыу туры 2 апрелдә көндөҙгө сәғәт 11-ҙә "Театро" клубында уҙа. Финалға 12-15 сибәркәй сығасаҡ. Бәйгенең финалы иһә 19 апрелдә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында уҙа. Ғәҙәттәгесә, финалға бер аҙна ҡалғас, "Туған тел" каналында "Һылыуҡай" көндәлеге" эфирға сыға. Ойоштороусылар - Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм "Туған тел" телеканалы.

✓В.М. Комаров исемендәге Өфө ҡала балалар ижады һарайында башҡорт телендә "Шаяниум - 2016" ярымфинал уйыны уҙҙы. Конкурс 14-се тапҡыр ойоштторола һәм Рәсәй киноһы йылына арнала. Быйылғы уйындың темаһы - "Әйткән һүҙ - атҡан уҡ". Район этаптарында 44 команда ҡатнашты. Башҡорт гимназиялары һәм лицейҙары командалары менән бер рәттән уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәп уҡыусылары ла үҙҙәрен лайыҡлы күрһәтте. Һөҙөмтәлә 22 команда ярымфиналға сыҡты. 18 мартта финалсылар шаяндар һәм отҡорҙар исеме өсөн көрәшәсәк.

✓Эске хеҙмәт полковнигы Марат Латипов Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостандағы баш идаралығы начальнигы итеп тәғәйенләнде. 8 мартта Рәсәй Президенты Владимир Путин тейешле указға ҡул ҡуйҙы. Белешмә. Марат Рәис улы Латипов 1966 йылдың 17 сентябрендә Өфөлә тыуған. 1988 йылда Тольяттиҙағы юғары хәрби төҙөлөш команда училищеһын тамамлаған.

✓2016 йылда Башҡортостанда тәүге экологик өмә 9 апрелдә уҙғарыла. Башҡортостан Хөкүмәте төбәктә тораҡ пункттарҙың биләмәһен таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса экологик өмәләр үткәреү тураһында ҡарар ҡабул итте. Экологик кампания 9 апрелдән 14 майға тиклем дауам итә. 6 июндә төбәктең Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы эшкә йомғаҡ яһаясаҡ.

✓Ҡытайҙа Бөтә донъя интеллектуаль уйындары тамамланды. Унда Башҡортостандан биш шашкасы ҡатнашты. Һуңғы көндә суперблицта Тамара Танһыҡҡужина - алтын, Айгөл Иҙрисова бронза миҙалға лайыҡ булды. Башҡортостан спортсылары ике алтын, бер көмөш һәм ике бронза миҙал яуланы. Александр Георгиев менән Тамара Танһыҡҡужина, үҙҙәренең бишенсе Интеллиадаһында миҙалдар яулап, интеллектуаль спорт тарихында билдәле шашкасы исемен алды - уларҙа Бөтә Донъя интеллектуаль уйындарының етешәр миҙалы бар.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЭКОЛОГИК ХӘЛ ЯҠШЫРА

**Өфөлә һуңғы йылдарҙа экологик хәл-торошто яҡшыртыу һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау өлкәһендә мөһим саралар күрелә. Бигерәк тә һыу ресурстары торошон яҡшыртыуға, сәнәғәт һәм көнкүреш ҡалдыҡтарын эшкәртеү системаларын модернизациялауға, шулай уҡ ҡаланы йәшелләндереүгә, халыҡтың экологик мәҙәниәтен күтәреүгә етди иғтибар бирелә.**

Баш ҡаланы ете һыу алыу ҡоролмаһы хеҙмәтләндерә. Ҡала буйлап фатирҙарға торбалар аша килгән һыу барлыҡ күрһәткестәр буйынса ла Рәсәйҙең хәүефһеҙлек һәм сифат нормативтарына яраҡлы. Һыу объекттарының торошон яҡшыртыу маҡсатында һуңғы йылдарҙа Өфөлә канализацияны таҙартыу ҡоралмаларының өсөнсө сираты төҙөлә һәм реконструкциялана. Шулай уҡ яңы төҙөлөш урындарында ҡала хакимиәте төҙөүселәрҙән дренаж, ямғыр һыуы канализацияһы һәм таҙартыу ҡоролмалары ҡуйыуҙы талап итә.

Баш ҡала билдәле һөҙөмтәләргә өлгәшкән икенсе йүнәлеш - сәнәғәт һәм көнкүреш ҡалдыҡтарын эшкәртеү. Тәүлек эсендә ҡала территорияһынан 8 мең кубометрҙан ашыу төрлө ҡалдыҡтар сығарыла. Экология өлкәһендә файҙаланылған терегөмөшлө лапмаларҙы йыйыу мөһим мәсьәлә булып тора. Әлеге ваҡытта күп фатирлы йорттарҙың ихатаһында уларҙы йыйыу өсөн 649 пункт булдырылған. Ай һайын баш ҡалала 5,5 мең лампа йыйыла.

Ҡаланы йәшелләндереү буйынса ла ҙур эш башҡарыла. Һуңғы өс йылда ғына 17 яңы парк, сквер, аллея булдырылһа, әлеккеләрҙән 23-ө тулыһынса ремонтланған. Өфөлә алып барылған эш Рәсәй кимәлендә лә баһалана. Былтыр Өфө Рәсәй Федерацияһының иң имен экологик 94 ҡалаһы араһында 6-сы урын яуланы.

Һауаны нигеҙҙә автотранспорт бысратыуын иҫәпкә алғанда, баш ҡала ағыулылыҡтың экологик төрөнә күсеү мәсьәләһе тормошҡа ашырыла. Мәҫәлән, тәбиғи газ менән йөрөүсе автомобиль атмосфераға бензинға ҡарағанда биш тапҡырға кәмерәк зарарлы матдәләр сығара. Ошоно күҙ уңында тотоп, бөгөн Өфөлә 600 автобус газ яғыулығында йөрөй, шуларҙың 74-е - "НефАЗ" маркалы. Уҙған йылда газ яғыулығында эшләгән 30-ға яҡын автотранспорт берәмеге һәм 61 берәмек махсус техника һатып алынған. Ҙур ҡалаларҙа транспорт саралары һауаны бысратыуҙа 90 процентты алып тора икән, газ-мотор яғыулығы ҡулланыу тирә-яҡ мөхиткә генә түгел, халыҡтың сәләмәтлегенә лә көсөргәнеште кәметәсәк. Транспорт хужалары газ яғыулығын ҡулланыу һөҙөмтәһендә сығымдарҙы ла кәметергә мөмкин икәнлеген дә аңлай.

Республиканың баш ҡалаһында 15 автозаправкалау станцияһы эшләй, шуларҙың икеүһе - метан. Алдан хәбәр ителгәнсә, 2016 йылдың беренсе кварталында автомобиль газ тултырыу компрессор станцияһын файҙаланыуға тапшырыу күҙаллана. Яңы заправка 8 Март урамында барлыҡҡа киләсәк.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# БАЛАЛАР БЕҘГӘ ТАРТЫЛА



**Баш ҡаланың Инорс бистәһендәге был башҡорт гимназияһы 1996 йылда башлап үҙ ишектәрен аса. 2004 йылда ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәбе статусын ала, 2011 йылдан алып Башҡорт халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева исемен йөрөтә башлай.**

ЮНЕСКО төрлө милләттәрҙең рухи байлығын, гөреф-ғәҙәттәрен һаҡларға, үҫтерергә, донъя кимәлендә танытырға ярҙам итеүсе ойошма. Был статус беҙгә лә башҡорт гимназияһы булып һаҡланырға, халыҡ-ара кимәлдәге конкурстарҙа ҡатнашырға мөмкинлек бирә. Заман талаптарына яраҡлашып, инновацион алымдар ҡулланып эшләү, электрон белем биреү йәһәтенән дә үҫешәбеҙ. Һәр класс заманса техника менән йыһазландырылған, дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы итеп үткәреүгә бөтә шарттар тыуҙырылған. Гимназия уҡыусыларына сифатлы белем биреү ниәтендә Башҡорт дәүләт университеты һәм Ҡаҙағстандың Ҡаҡшатау ҡалаһындағы Назарбаев исемендәге Интеллектуаль мәктәп менән хеҙмәттәшлек бәйләнештәре булдырылған.

Башҡорт гимназияһының төп бурысы - балаларыбыҙға рухи тәрбиә биреү, милли үҙаңын уятыу, башҡорт телендә һөйләшергә, уҡырға һәм яҙырға өйрәтеүҙән ғибәрәт. Ҡала шарттарында үҫкән ҡайһы бер башҡорт балаларының туған телендә һөйләшмәй икәне сер түгел. Шуға ла ошондай балаларҙың ата-әсәләре менән дә аңлатыу эштәре алып барырға тура килә беҙҙең коллективҡа. Беренсе класҡа килгәндә русса ғына һөйләшкән бала сирек бөтөүгә туған телендә шиғыр һөйләргә, йырларға өйрәнә. Быға гимназиялағы бөтә сараларҙың башҡортса үткәрелеүе лә булышлыҡ итә. Билдәле шәхестәр, яҙыусы һәм шағирҙар ҡатнашлығында тәрбиәүи, фәһемле осрашыуҙар йыш үтә беҙҙә. Матур йолаға әүерелгән "Һабантуй", "Шәжәрә байрамы", Зәйнәб Биишева ижадына арналған сараларҙы уҡыусылар көтөп ала. Гөмүмән, балаларҙы ата-бабаларының тарихын өйрәнеүгә, әҙәбиәтебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә мөмкин тиклем нығыраҡ ылыҡтырырға тырышабыҙ. Гимназиябыҙ микрорайонға беркетелеүгә ҡарамаҫтан, башҡорт балаларын уҡырға бер һуҙһеҙ ҡабул итәбеҙ. Шөкөр, башҡорт телен өйрәнергә теләйбеҙ, тип килеүселәр күп. Хатта башҡа милләт балалары ла ошондай маҡсат менән килә беҙгә, дәрестәрҙә ихлас шөғөлләнәләр.

Уҡыусының талантын үҫтереүгә ҙур иғтибар бирелә гимназиябыҙҙа. Ҡурай, милли көрәш, баян, акробатика, тхеквондо, ушу, сатраш, шашка, еңел атлетика, брейк-данс, хип-хоп, вокал, хор һәм башҡорт бейеү түңәрәктәре эшләй. Бына шулай белем усағыбыҙҙа ҡала, республика һәм хатта халыҡ-ара кимәлдә танылған талантлы ла, сәмле, дәртле лә уҡыусылар тәрбиәләргә тырышабыҙ. Милләттәштәр балаларын күршеләге рус мәктәбенә уҡырға бирмәй, алыҫ булыуға ҡарамайынса, беҙгә алып килә икән, эшебеҙгә шунан да юғары баһа юҡ.

**Илшат БИКҠОЛОВ,**
**Өфөнөң З. Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһы директоры.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ошо көндәрҙә гимназияла "Зәйнәб Биишеваның ижады һәм тормош юлы" ижади проекттар конкурсы үтте. Өсөнсө тапҡыр уҙғарылған ярышта баш ҡаланың гимназия һәм лицейҙары, республиканың ЮНЕСКО ассоциацияланған мәктәптәренән йөмгеһе 62 уҡыусы ҡатнашты. Улар З. Биишеваның әҫәрҙәре буйынса башҡорт, рус, инглиз телдәрендә ижади проекттарын яҡланы. З. Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһы уҡыусылары алдынғылыҡты бирмәне. Әҙибәнең ижадын тәрәндән өйрәнеү ниәтендә үткәрелгән конкурс һөҙөмтәләре буйынса беренсе дәрәжәле дипломға гимназия уҡыусылары Алһыу Хәкимова, Ҡарлуғас Исмәғилова, Артур Йәсәүиев һәм Азалия Ғирфанова, Әхмәт Ишмурзин лайыҡ булды.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# КИЛӘСӘК МӘҒАРИФЫ



**Баш ҡалала беренсе тапҡыр ошо атама менән 23-25 мартта Конгресс-холда республика форумы үтәсәк. Республика мәғариф системаһының дәғүәселек һәләтен күтәреү моделдәрен асыҡлау маҡсатында ойошторолған сара Башҡортостандың барлыҡ һөнәри һәм юғары белем биреү ойошмаларын бер майҙансыҡҡа туплаясаҡ.**

БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова белдереүенсә, бөгөн Башҡортостанда 9 үҙ аллы дәүләт вузы һәм 104 махсус урта уҡыу йорто иҫәпләнә. Былтыр улар Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы мониторингын уңышлы үтеп, барлыҡ мәғариф учреждениелары һәм уларҙың филиалдары ҡәтғи талаптарға тап килә тип табылды. Был иһә Башҡортостан мәғарифының юғары кимәлдә булыуына бер дәлил һәм мәктәптә тамамлаусыларҙың әлдә ҡайҙа ситтәге белем усаҡтарында түгел, үҙебеҙҙең вуз, ссуздарҙа артабан белем алыуын дауам итә алыуына гарантия. Форум майҙансыҡтарына 8-11-се синыф уҡыусылары, ата-әсәләр, уҡытыусылар, белгестәр саҡырыла. Уларға бынан уҡыу йорттарына инеүҙәге уҙғәрештәр, олимпиада һөҙөмтәләре һәм ГТО нормативтарын тапшырыу сертификаттарының йомғаҡлау балдарына йоғонтоһо хаҡында һөйләйәсәктәр. Бынан тыш, хеҙмәт баҙары, уҡыу йорттарындағы яңы һөнәрҙәр, ғилми һәм тәрбиә эшмәкәрлеге, инновацион инфраструктура, вуз һәм ссуздарҙың сит илдәрҙән белем биреү учреждениелары менән хеҙмәттәшлеге тураһында мәғлүмәт биреләсәк. Шулай уҡ педагогтың һөнәри стндарттарын индереү, һөнәри белем биреү ойошмаларының WorldSkills халыҡ-ара конкурсында ҡатнашыу, һәләтле балаларҙы асыҡлау һәм уларға ярҙам итеү, һөнәр һайлау йүнәлешендә инновацион ҡараштарҙы файҙаланыу, адаптацияланған белем биреү программаларын мәғариф системаһына интеграциялау, республика электрон белем биреү системаһын үҫтереү мәсьәләләре буйынса тематик майҙансыҡтар эшләйәсәк. Балалар һәм үҫмерҙәрҙең "РобоФест" инженер-техник ижады конкурсын һәм "Һөнәрҙәр әлифбаһы" фестивален уҙғарыу ҙа планлаштырыла. Форум ҡунаҡтары күп функциялы гәмәли квалификациялар үҙәге эше менән дә танышасаҡ. Анығ ваҡыт режимында телләгән бер кеше үҙен теге йәки был һөнәрҙә һынап ҡараясаҡ, һөнәр һайлау, эшкә урынлашыу һәм хеҙмәт ҡануниәте буйынса консультация, ярҙам аласаҡ.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Башҡортостан юлдаш телеканалында "Серле Башҡортостан" тигән яңы проект эфирға сыҡты. Тапшырыу авторҙары пирамидаларҙы, таш комплекстарҙы, боронғо кешеләрҙең туҡтаған урынын, мәмерйәләрҙе, тауҙарҙы, изге шишмәләрҙе өйрәнә. Программала ни өсөн ошо объекттарҙың мистик көскә эйә булыуы хаҡында бәйән ителә. "Серле Башҡортостан" проектының ижади төркөмө белгестәр, парапсихологтар, ғалимдар, республика халҡы ҡатнашлығында махсус тикшереү үткәрә.

✓ Быйыл 1 апрелдән Башҡортостанда йәшәү өсөн кәрәкле мөһим дарыуҙарҙың күмәртә һәм ваҡ сауҙа селтәрендәге хаҡына өҫтәмә күләме үҙгәрә. 50 һумға тиклемге дарыуҙар өсөн күмәртә өҫтәмәһе - 17, ә ваҡлап һатыу өҫтәмәһе 35 процент тәшкил итәсәк. 50-нән алып 500 һумлыҡ дарыуҙар өсөн - 13 һәм 30 процент, хаҡы 500 һумдан ашыу дарыуҙарға - 9 һәм 17 процент. Составында наркотик, психотроп матдәләр һәм уларҙың прекурсорҙары булған дарыу препараттарына күмәртә өҫтәмәһе, хаҡына ҡарамайынса, 30 процент, ваҡлап һатыу өҫтәмәһе 50 процент тәшкил итәсәк.

✓ Башҡортостанға 2016 йылда крәҫтиән һәм фермер хужалыҡтарын ойоштороу һәм үҫтереү өсөн грант биреүгә 139 миллион 787 мең һум субсидия бүленгән. 3,9 миллиард һумды Рәсәйҙең 79 субъекты араһында бүлеү тураһында тейешле бойороҡҡа Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев ҡул ҡуйған. Субсидиялар фермер хужалыҡын ойоштороу һәм үҫтереүгә грант биреү, яңы эш башлаған фермерҙарға көнкүреш ҡоралмалары алыу өсөн бер тапҡыр бирелә торған ярҙам буйынса сығым йөкләмәләрен берлектә финанслауға бүленә.

✓ Екатеринбургта "Йәдкәр" башҡорт халыҡ театр коллективына нигеҙ һалыуҙы һәм уның етәксеһе Фәймә Йосопованың 65 йәшлек юбилейы уңайынан байрам концерты ойошторолдо. Концерт барышында Башҡортостандың талантлы артисы һәм хореограф Урал Мортазин башҡорт халыҡ бейеүҙәре буйынса оҫталыҡ дәресе күрһәтте.

✓ Башҡортостанда лаборатор юл менән 405 кешелә, шул иҫәптән 200 балала сусҡа киҙеүе раҫланған. Сирлеләрҙең барыһы ла медицина учреждениеларында тейешле дауаланыу курсы үтә, тип хәбәр итә Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы. Төбәктә киҙеү һәм киҫкен респиратор вирусы инфекцияларын иҫкәртеү буйынса эпидемияға ҡаршы саралар дауам итә. Иң мөһиме, үҙаллы дауаланырға ярамай, сөнки унан һуң пневмония көүек өҙләгеүҙәр булыуы ихтимал.

✓ *Күпселек вуздарҙа мәктәпте алтын һәм көмөш миҙалға бөткәндәргә, шулай уҡ ҡыҙыл диплом эйәләренә өҫтәмә рәүештә 5 балл яҙылһа, Өфө дәүләт нефть техник университеты - 10, ә сәнғәт институты ни бары 3 кенә балл бирәсәк.*



*БАЙРАМ АЙҠАНЛЫ*

**Илебеҙ, республикабыҙ тарихына ҡағылышлы документаль мираҫ архивтарҙа һаҡлана икәнен беләбеҙ. Боронда тупланып килгән дәүләт документтарын, халҡыбыҙ йылъяҙмаһын һаҡлау нисек ойошторолған? Ошо һәм республика архивтарының хәҙерге торошо, уларҙың эшмәкәрлеге, уңыштары һәм проблемалары хаҡында Башҡортостан Республикаһының Архив эштәре буйынса идаралығы начальнигы Илфат Ваис улы ҒӘЛЛӘМОВ һөйләй.**

# ТАРИХИ МИРАҪ ҺАҒЫНДА



- Ысынлап та, архив кәштәләрендә илебеҙҙең һәм республикабыҙҙың ғәйәт бай тарихын сағылдырған тәүсығанаҡтар һаҡлана. Хәҙерге көндә республикала бер дәүләт архивы (Башҡортостан Республикаһының Милли архивы) һәм 63 муниципаль архив иҫәпләнә. Халыҡ архивтарға һуҡмаҡты һыуытмай. Һуңғы йылдарҙа эш күләме күп тапҡырға артты. Мәҫәлән, 1993 йылда архив учреждениеларына 3 мең самаһы кеше мөрәжәғәт иткән булһа, былтыр иһә ойошмаларҙың һәм ябай кешеләрҙең 193698 үтенесе ҡәнәғәтләндерелгән (2014 йылда - 184254, 2013-тә - 168307). Хаттарҙың тематикаһы ла бик киң: иң күбе пенсияға сығырға йыйынған кешеләр хеҙмәт стажы, эш хаҡы, дәүләт наградалары менән бүләкләнеүе тураһында мәғлүмәт алыу мәсьәләләре буйынса мөрәжәғәт итә, ер биләмәһе, милекте хосусилаштырыу буйынса ла белешмә алырға теләүселәр байтаҡ ҡына. Башҡортостан Республикаһының Архив фондында (дәүләт һәм муниципаль архивтарҙы ла индереп) әле 4 миллион 400 меңдән ашыу документтың төп нөсхәһе һаҡлана. Архив мәғлүмәттәрен файҙаланыусылар иҫәбе былтыр 198 мең самаһы булды. Ә инде Архив эштәре буйынса идаралыҡтың сайтына (www.gasrb.ru) инеүселәр 71 мең тәшкил итте. Һандарҙан күренеүенсә, архивтар бөгөнгө йәмғиәттең ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүҙә ғәйәт ҙур роль уйнай.

Һуңғы йылдарҙа күптәр үҙ нәҫел тамырҙары менән ҡыҙыҡһына башланы, шунлыҡтан шәжәрә төҙөп биреү үтенесе менән мөрәжәғәт итеүселәр йылдан-йыл арта бара. Беҙҙең сайтта үҙ нәҫел ағасын эшләргә теләүселәр өсөн "Шәжәрә" исемле махсус бүлек булдырылған. Унда урынлаштырылған методик белешмәләр менән танышып сыҡҡан кеше архив сығанаҡтары буйынса нәҫел-нәсәбен тиҙ үк асыҡлай аласаҡ. Әлбиттә, баш ҡаланан алыҫ йәшәгәндәр Милли архивҡа үтенес хаты ебәрә ала. Һуңғы ваҡытта бындай мөрәжәғәттәр күбәйә бара, беҙгә күрше төбәктәрҙән, айырыуса Татарстандан, Силәбе, Ырымбур өлкәләренән килеүселәр ҙә артты. Шуны ла әйтмәй булмай: шәжәрә эшләү хеҙмәте түләүле. Был мәсьәләгә ҡағылышлы һорауҙар менән 276-55-21, 276-49-07 телефондары буйынса мөрәжәғәт итергә йәки баш ҡаланың К. Маркс урамындағы 4-се йортта урынлашҡан Башҡортостан Республикаһының Милли архивына килергә була. Әйткәндәй, 1834, 1850, 1859 йылдарҙағы иҫәп алыу мәғлүмәттәре ("Ревизские сказки") менән Идаралыҡ сайтында ла танышырға мөмкин.

Документтарҙы имен һаҡлау һәр архив учреждениенан, һәр хеҙмәткәрҙән оло яуаплылыҡ талап иткән мәсьәлә. Мәҫәлән, 1830 йылда төҙөлгән төп архив бинаһы бик иҫкергән, асылда авария хәлендә, шунлыҡтан федераль күҙәтеү ойошмалары беҙгә уны кисекмәҫтән ябып, барлыҡ документтарҙы икенсе урынға күсереү тураһында күрһәтмә бирҙе. Ләкин бәлә шунда: санитар талаптарға яуап биргән махсус биналар Өфөлә юҡ. Хәйер, дәүләт архивы өсөн яңы бина төҙөү мәсьәләһе уҙған быуаттың 80-се йылдарынан уҡ күтәрелеп килә, хатта өс проект эшләнде. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был проблема һаманғаса хәл ителмәй килде. Башҡортостанда тәүге архив барлыҡҡа килеүгә тиҙҙән 100 йыл була. Ошо дәүер эсендә унда республиканың бер етәксеһе лә аяҡ та баҫып ҡарамаған. Шуныһы ҡыуаныслы: былтыр сентябрь айында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Зәки улы Хәмитов төп архив учреждениеһының эше һәм торошо менән ентекле танышып китте. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәне - Башҡортостан Хөкүмәте тиҙ арала Дзержинский исемендәге типографияның буш торған бинаһын беҙгә файҙаланыуға тапшырыу тураһында ҡарар сығарҙы. Әммә ул архив документтарын һаҡлау өсөн тәғәйенләнмәгән, шуға әлегә ремонт талап ителә. Ғөмүмән, һуңғы коллегия ултырышында баш ҡалала яңы Архив йортон төҙөү мәсьәләһе ҡәтғи ҡуйылды. Кисекмәҫтән осһоҙораҡҡа төшкән яңы проект эшләтеп, финанс мәсьәләһен хәл итергә һәм яҡын йылдарҙа төҙөлөш эшенә керешергә ҡарар ителде. Барлыҡ талаптарға яуап биргән заманса бина булғанда ғына беҙ алтынға бәрәбәр документтарҙы тейешле режимда, һәйбәт физик торошта һәм хәүефһеҙ шарттарҙа һаҡлай аласаҡбыҙ.

Башҡортостан Республикаһының Милли архивынан тыш, Идаралыҡҡа муниципаль архивтар ҙа буйһона. Уларҙың күптәре барлыҡ талаптарға яуап биргән биналарҙа урынлашҡан, һаҡ һәм янғын сигнализацияһы эшләй. Архив эштәре буйынса идаралыҡ ҡарамағындағы Йәмәғәт һәм Фән советтары, шулай уҡ эксперт-тикшереү комиссияһы ла ырамлы эшләй. Йыл һайын фәнни-ғәмәли конференциялар уҙғарыу матур йолаға әйләнде. Былтыр, мәҫәлән, Ҡырым Республикаһы, Силәбе, Свердловск, Ырымбур өлкәләре, Ханты-Манси автономиялы округы вәкилдәре ҡатнашлығында "Көньяҡ Урал археографияһы. Граждандарҙы туплауҙа тарихи хәтерҙең әһәмиәте" тип аталған ғилми ҡор айырыуса юғары кимәлдә үтте. Ҡыҫҡаһы, республиканың архив учреждениелары хеҙмәткәрҙәре быуаттар ауазын беҙгә еткергән ҡиммәтле документтар тейешенсә һаҡланһын, улар менән киң халыҡ ҡатламы иркенләп таныша алһын, кәрәкле тарихи мәғлүмәткә эйә булһын өсөн бар көсөн һала.

**Нияз БУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ФИЗИКАНЫ ЛА ЯРАТАЛАР…




**Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтиханында ҡатнашыусыларҙы теркәү йомғаҡтары буйынса, профилле математика, йәмғиәтте өйрәнеү һәм физика фәндәре һайланма предметтар буйынса лидерҙар рәтендә.**

Башҡортостан Мәғариф министрлығының дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы һәм белем сифатын баһалау бүлеге етәксеһе Жанна Минекәева әйтеүенсә, имтихан тапшырыу өсөн яҡынса 20,5 мең самаһы кеше теркәлгән (19 мең самаһы уҡыусы быйыл мәктәп тамамлай). 14,5 меңдән ашыу кеше профилле математиканы һайлаған (71,7 процент; Рәсәйҙә - 71,3). Йәмғиәтте өйрәнеүгә 11 мең самаһы ҡатнашыусы ғариза биргән (52,8 процент; Рәсәйҙә - 59). Физика популярлыҡ буйынса өсөнсө урында - ете меңдән ашыу кеше (35,1 процент; Рәсәйҙә - 28).

Артабан биология (биш меңдән ашыу, 25,4 процент), тарих - (дүрт меңдән ашыу, 20,9 процент), химия (шулай уҡ дүрт меңдән артыҡ) килә. Мотлаҡ предметтарға килгәндә, БДИ-ла ҡатнашыусыларҙың 100 проценты рус телен, 92,1 проценты база кимәлендәге математиканы һайлаған (Рәсәйҙә - 87 процент). Быйыл республикала 100 имтихан ҡабул итеү пункты эшләйәсәк, Берҙәм дәүләт имтиханының төп этабы 27 майҙа география һәм әҙәбиәттән башлана.

Әйткәндәй, белемен артабан юғары уҡыу йорттарында дауам итергә теләүселәр айырым предметтарҙан алған балл-баһалар янына вуз конкурстарында хәл иткес әһәмиәткә эйә булыуы ихтимал өҫтәмә очколар туплау мөмкинлегенә лә эйә. Өҫтәмә балл биреү-бирмәү мәсьәләһе һәр уҡыу йортоноң үҙ ҡарамағында, әлбиттә. Иң беренсе сиратта, тәбиғи, абитуриенттың белем кимәле баһаланасаҡ. Күпселек вуздарҙа мәктәпте алтын һәм көмөш миҙалға бөткәндәргә, шулай уҡ ҡыҙыл диплом эйәләренә өҫтәмә рәүештә 5 балл яҙылһа, Өфө дәүләт нефть техник университеты - 10, ә сәнғәт институты ни бары 3 кенә балл бирәсәк.

Төрлө предметтар буйынса Бөтә Рәсәй кимәлендәге олимпиада еңеүселәре һәм призерҙарын да юғары баһалаясаҡтар: медицина университеты - 3 балл (химия һәм биология буйынса), ә БДУ, БДПУ, аграр һәм авиация техник университеттары - 5-әр, нефть техник университеты иһә был графаға хатта 10 балын да йәлләмәйәсәк! Нефть техник университеты үҙе үткәргән эске вуз олимпиадалары еңеүселәрен дә йомартлығы менән ҡыуандырасаҡ, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ Аҡмулла олимпиадаһы еңеүсеһенә - 5, призерҙарға 3 балл бирәсәк. Бынан алдараҡ ГТО значогына эйә булғандарға вузға инеүҙә ташламалар яһау хаҡында байтаҡ һүҙ булғайны. "Хеҙмәткә һәм оборонаға әҙер" Бөтөн Рәсәй физкультура-спорт комплексы буйынса алтын значок эйәләренә медицина университетына ингәндә бының өсөн ни бары -1, БДПУ - 2, сәнғәт институтында 3 очко бирелһә, әлеге киң күңелле нефть университеты 7 балл өҫтәйәсәк! Шуныһын да белеп ҡуйығыҙ: өҫтәмә балл-очколарҙың дөйөм суммаһы 10-дан артырға тейеш түгел.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Блефарит

❖ Балаларҙың күҙ ҡабағы ситтәренең шешеүе - блефарит менән блефароконъюнктивиттың барлыҡҡа килеү сәбәбе булып талпан тора. Шырпыны ослап, йәшел һыуға (зеленка) тығып, иплəп кенә күҙ ҡабағы ситтәренән йөрөтөргә. Иртәнсәк күҙҙәрҙе йыуып, тағы ла йәшел һыу һөртөргә.

### Йүткереү

❖ Июнь айынан көҙгә тиклем алмағастың япрағын өҙөп киптерергә һәм һаҡларға. Алмағастың сорты мөһим түгел. 1 ҡалаҡ япраҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡасын ябып, 10 минут талғын утта төнәтәбеҙ. Уттан алғас тағы ла 40 минут тотабыҙ. Өлкәндәргә көнөнә ашарҙан 15-20 минут алда яртышар стакан эсергә. Балаларға ярты стакандан әҙерәк күләмдә бирегеҙ. Төнәтмәнең тәме үгәй инә үләненеке кеүек, шунда уҡ һөҙөмтәһен бирә. Йәй көнө ағастан өҙөп алып төнәтмә яһап эсергә була, был осраҡта 6 япраҡҡа 1 стакан һыу ҡояһың.

### Үксә тибенгеһе

❖ Аҡ балсыҡтан 1,5-2 см ҡалынлығында "ҡоймаҡ"тар яһап, үксәгә һалырға. Полиэтилен менән урағас, йылы ойоҡтар кейергә лә, йоҡларға ятырға. Үксәләрҙә ауыртыу бөткәнсе дауаланыуҙы дауам итергә.

### Ангина

❖ Ангинанан прополис ярҙам итә. Бәләкәй генә киҫәк прополисты ашағандан һуң йайлап ҡына сәйнәргә. Һуңынан уны йотһағыҙ ҙа була. Төнгөлөккә прополисты уртығыҙға ҡуйып йоҡлағыҙ. Көнөнә 5 грамм тирәһе прополис ҡулланырға.

### Ҡан тамырҙарына ярҙам

❖ Баш мейеһенең ҡан тамырҙарын таҙартыу өсөн: 1-әр стакан һуған һуты һәм балды ҡушып болғатырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2-шәр балғалаҡ ашарға. Дауаланыу курсы - 3 ай. Был дауа организмды ла нығыта.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Ир зыяраттан ҡото осоп килеп сыға. Аҙаҡ: "Туғандар, был донъя нимә генә ул, теге донъяла бик ҡурҡыныс икән", - тип һөйләп йөрөй. Ҡылған ҡылыҡтары өсөн әҙәм балаһы теге донъяла ла яуап бирә икән шул.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# КҮГӘРСЕН - ХӘБӘРСЕ ҠОШ

**Изге ҡош булараҡ, күгәрсен, тәү сиратта, йортто һәм кешеләрҙең сәләмәтлеген һаҡлаусы. Уның ярҙамында ауырыуҙарҙы дауалағандар һәм тотем ҡоштоң итен ауырыуға ашатҡандар.**

Мәҫәлән, быума йүтәл, ҡоро йүтәл мәлендә күк күгәрсендең ҡанын һөрткәндәр. Ҡайһы бер төбәктәрҙә уны эскәндәр ҙә. Ҡурған башҡорттары йүтәл, эс ауыртыуҙан, күреү һәләте насарайғанда күгәрсен ите ашау килешә, тигәндәр (Ҡурған өлкәһенең Сафакүл районы барын табын, һарт әйле, Әлмән районы ялан ҡатай ырыуҙары). Ошондай уҡ ҡараш Хәйбулла районы үҫәргәндәрендә лә осрай.

Яңауыл районында (урман гәрәй) халыҡ медицинаһы белгестәре бағымсы, имселәр йөрәк ауырыуынан ошондай дауа тәҡдим иткән. Күгәрсенде башы менән бергә ҡамырға төрөп, бешереп ауырыуға ашатҡандар. Әбйәлил тамъяндары ошо уҡ ауырыуҙан мейестә бесәй үләне өҫтәлгән күгәрсендең йөрәге менән ҡанын быҡтырып ашатҡан. Әлшәй районында (илекәй мең) эс ауыртҡанда йылы һыуҙа иҙелгән күгәрсен тиҙәген эскә һалғандар.

Ҡурған өлкәһендә (ялан ҡатай, һарт әйле, барын табын) күгәрсендең бөрләтәүенән алынған таш көскә эйә, тип иҫәпләгәндәр. Уны ашҡаҙан, эсәк үткәрмәүсәнлегенән ҡулланғандар.

Башҡорт халыҡ ижадында изге ҡош булараҡ, күгәрсен геройҙарға ярҙам итә. "Дандан батыр" әкиәтендә дүрт күгәрсен батырҙы һәм батша ҡыҙын балаҫҡа ултыртып осора. "Алпамыша"ның 2010 йылда Хәйбулла районы Вәлит ауылында Г. Юлдыбаеванан яҙып алынған вариантында зинданда ятҡан Алпамыша үҙенең хәлен күгәрсен аша белдертә. Күгәрсен уның ҡатыны Барһынһылыуға хат алып бара. "Ғәҙел батша" хикмәтендә геройҙың ҡатыны бер үҙе утрауҙа ҡалғас, иренең ағаларына күгәрсен аша хат ебәрә. "Аҡбуҙат" эпосында һыу аҫты батшалығына Нәркәсте Һәүбән алып ҡалыуы тураһында хәбәр илтә:

*"Күгәрсендәр киттеләр,*
*Илгә хәбәр иттеләр..."*

Күгәрсен - хәбәрсе ҡош, тиҙәр халыҡта. Халыҡ ижадында боронғо башҡорттарға юл күрһәтеүсе лә булып сығыш яһай күгәрсен. Нух бәйғәмбәр хаҡындағы легенданың Балтас районында яҙып алынған вариантында Нухтың кәмәһенән осоп киткән күгәрсен ҡоро ерҙе күрһәтә.

Күгәрсен - тотемик ҡош булараҡ, ғаиләне ҡурсыусы ла булған. "Пар күгәрсендәй" - үҙ-ара килешеп, мөхәббәттә йәшәүсе йәрҙәргә шулай тиҙәр. Ҡатын-ҡыҙҙы "күгәрсенкәй" тип йөрөтөү ҙә ошонан килә, күрәһең.

Күгәрсен йән төшөнсәһе менән дә бәйле. Күгәрсен - үлгән кешеләрҙең йәне, тиҙәр, ә аҡ күгәрсен - үлгән балаларҙың йәне, имеш.

"Ҡамыр батыр менән убырлы ҡарсыҡ" әкиәтендә дейеүҙең йәне күгәрсендең эсендә була, ә күгәрсен суйын һандыҡта, һандыҡ - алты ҡоласлы бейәнең эсендә. Ҡамыр батыр бейәне урталай ярып, һандыҡты аса һәм күгәрсенде осороп ебәрә. Күгәрсен осоп киткәс, дейеү йоҡлап ятҡан еренән ҡолап төшә. Ҡамыр батыр хәле бөткән дейеүҙе үлтерә. Башҡорттарҙа, күгәрсен үлгән кешенең йәнен теге донъяға оҙатып бара, тигән ышаныу ҙа булған. Шуға ла ҡайһы саҡта күгәрсен осраһа - насарға, тиҙәр.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Аҙағы).**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ТЕГЕ ДОНЪЯЛА ЛА...

## яуап бирәһең бар

**"Ниндәйҙер таныш булмаған кеше оло йәштәге яңғыҙ инәйҙе иҫәңгерәтә һуғып, аҡсаһын, һыуытҡыстағы ризыҡтарын алып киткән", тигән хәбәр йәшен тиҙлегендә таралды ауылға. Әлбиттә, ул әҙәмде тотоп, язаһын да биргәндәрҙер. Ошо хәлдән һуң күп кенә кешеләр ишектәренә йоҙаҡ элеп ҡуйҙы. Ләкин өйөңдә бикләнеп ултырып ҡына ҡотолоп буламы икән был афәттән? Һуңғы йылдарҙа ҡайһы бер әҙәмдәр тарафынан хаҡлы ялдағыларға, яҡлауһыҙ ҡалған кешеләргә "һунарҙар" йышайҙы. Ветерандарыбыҙҙың орден-миҙалдарын урлауҙан башлағайнылар, хәҙер ниндәй генә мутлыҡтарға бармайҙар, хатта фатирҙарын да тартып алыуға тиклем килеп еттеләр бит. Бындай башҡа һыймаҫ алама ғәҙәттәр буш урында ғына барлыҡҡа килмәне шул.**



90-сы йылдарҙа Үҙәк телеканалдарҙан аҙғын тормош, көсләүҙәр, талауҙарға ҡоролған фильмдар күрһәтелә башланы. Көнө-төнө ниндәй генә төр һыралар, ниндәй генә иҫерткес эсемлектәр маҡтап һөйләнмәне, хатта ул эсемлектәрҙең ҡайһылары хөкүмәт башлыҡтарының исемдәре менән аталды. Беҙҙең Учалы ҡалаһының "Юбилейный" магазинына, мәҫәлән, шул замандарҙа уйын-автомат ултыртып ҡуйҙылар. Аҙыҡ-түлеккә сиратҡа торғандағыға ҡарағанда уйын-автомат янында кешеләр күберәк йыйылғандыр әле. Ҡайһы бер кешеләрҙең көнө буйына шунда тапанып торғанын күрергә тура килә торғайны. Хәҙер йәшерен рәүештә ҡуйылған уйын-автоматтарҙы юҡ итеү тураһында һүҙ алып барған булалар ҙа ул. Бер тапҡыр ҙа эшләмәйенсә, ошолай итеп тә аҡсалы булып була, тип күрһәткәстәр, ул уйын-автоматтар тиҙ генә бөтмәҫ шул .

Әлеге ваҡытта бер туҡтауһыҙ ҡыҫҡартыуҙар барғанда, иртәгәһе көндөң нисек булырын күҙ алдына килтерә алмағанда, кеше нимәгә ышанып йәшәргә тейеш һуң? Йәмғиәттә төрлө холоҡло кешеләр йәшәй, көслө рухлылары ла, көсһөҙҙәре лә. Кемдәрҙер яҡлауға мохтаж. Бөтә кеше лә эшҡыуар булып бөтә алмай. Көсһөҙҙәре тиҙ генә күңел төшөнкөлөгөнә бирелә, араҡыға үрелергә лә күп ҡалмай. Араҡыһы булмаһа, самогоны бар бит әле, уныһы булмаһа, осһоҙло ғына фунфуриктары ла ярап тора. Шул фунфуриктарҙы эсеп, күпме кеше һәләк булды, күпме әсәләрҙең, ҡатындарҙың, балаларҙың күҙ йәштәре түгелде. Кемдәрҙер, гонаһ йыйып, кешенең әсе күҙ йәштәрендә аҡса эшләй. Ниңә шул ағыуҙарҙы һатыуҙы тыймайҙар икән? Реклама яһағандай, хатта телевизорҙан самогон аппараттары эшләүсе заводтарҙы ла күрһәтәләр. Ул самогон аппараттарын Өфөнөң ҙур сауҙа үҙәктәрендә һаталар, тип тә ишеткәйнек.

Учалы районына килен булып төшкәс, ирем менән Ҡотой һигеҙ йыллыҡ мәктәбенә эшкә килдек. Йәшлек йылдарыбыҙ ошо ауылда үтте. Уҡытыусы булараҡ ҡанат нығытыу, тормошта сынығыу юлдарын да ошо коллективта алдыҡ. Һәр уҡыусым бөгөнгөләй күҙ алдымда тора. Һуңынан Өргөн, Рысай, ҡаланың 10-сы мәктәбендә, 12-се лицейҙа эшләргә тура килде. Хаҡлы ялға сыҡҡас, йәшлек юлдарыбыҙҙан үтәйек әле, тәүге эшләп киткән Ҡотой, Ҡолош ауылдарын, уҡыусыларыбыҙҙы күреп киләйек, тип, шул тарафтарға юл алдыҡ. Күп кенә уҡыусыларыбыҙҙың донъя ҡороп, матур итеп йәшәгәндәренә ҡыуандыҡ. Ләкин шулар араһында эскенән миктәгәндәре, үҙ ғүмеренә ҡул һалып һәләк булғандары ла етерлек ине.

**"Ҡайҙа һин, муйыл төҫлө сөм-ҡара күҙле моңло гармунсым, ҡайҙа һин дәрестә мут ҡына йылмайып ултырған алһыу йөҙлө шаянҡайым, ҡайҙа һеҙ күҙҙәренән күгәрсен сәскәләре кеүек нурҙар сәсеп торған һылыу-һылыу егеттәрем..." тип, йөрәгем әрнеп, илап ҡайттым мин был ауылдарҙан. Кәләштәре, балаларын алып, үҙ тыуған яҡтарына ҡайтып киткәндәр, өйҙәренең тәҙрәләре өңөрәйеп, моңайышып тора.**

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шул егеттәр араһында кәләш алып өлгөрмәгәндәре лә бар ине. Юҡ, был уҡыусыларымдың береһе лә эскесе ғаиләнән түгелдәр. Улар заманында "Урал" колхозын байытам, тип, көнө-төнө һеперелеп эшләп йөрөгән һәйбәт, эшсән кешеләрҙең балалары.

Элек эсеп үлгәндәрҙе, үҙ ғүмерҙәренә ҡул һалғандарҙы, зыяраттан тышта ерләй торғайнылар. Хәҙер был донъянан тәбиғи китеүселәргә ҡарағанда, ошо рәүешле һәләк булғандар күберәк, шулар иҫәбенә зыяраттар ҙа ҙурайҙы инде. Борон ололар берәйһе үҙ ғүмеренә үҙе ҡул һалһа: "Ах, был кеше ауылға, туған-ырыуына насарлыҡ килтерҙе бит", - тип һуҡранырҙар, уның зат-зәүеренә лә шикләнеберәк ҡарарҙар ине. Бынан бер нисә йыл элек күренекле генә бер врачтан: "Ҡайһы милләт халҡында суицид күберәк?" - тип һорағайным, ул: "Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең башҡортта күберәк шул", - тине әсенеп.

"Атайҙарыбыҙ һуғышта баштарын һалғас, беҙҙе олатайҙар, бабайҙар ысын ир итеп тәрбиәләне", тип һөйләгәйне бер оло ғына ағай. Ауыр ваҡытта был быуын кешеләренә бер ниндәй ҙә психолог кәрәкмәгән, олатайҙар, өләсәйҙәр һүҙе уларға им, дауа булған. Ҡыҙғаныс: хәҙер егеттәребеҙ, олатай йәшенә етеү түгел, атай булып та өлгөрмәй, эскелеккә һалыша, башын элмәккә тыға. Иң ҡурҡынысы: эсеп үлеүҙәр, суицид ғәҙәти хәлгә әйләнеп барған һымаҡ. Ҡотолоу юлҡайҙары бармы икән был афәттәрҙән, тигән уйҙар килә башҡа. Тағы ла иң аптыратҡаны шул: һаманға тиклем иҫерткес эсемлектәр һатылған магазин мәғариф учреждениеларынан нисә метр алыҫлыҡта булырға тейеш, тип баш ваталар. Балаларыбыҙҙың киләсәк яҙмышы ниндәй булыуҙан да мөһимме икән был иҫерткес эсемлектәрҙе һатыу?

Үҙем йәш саҡта эшләп киткән Бөрйән районының Үрге Нөгөш ауылында булған хәлде һөйләйем әле, бәлки, фәһем булыр, кемдәрҙер тәүбәгә ҡайтыр. Октябрь айҙары тирәһе ине. Дәрес бара. Ҡапыл нимәлер дөңк итеп ҡалды. Балалар ҙа, мин дә ырғып киттек. Нимә булды икән, тип, йүгереп тышҡа сыҡтым. Магазинда һатыусы булып эшләгән ағай айыу яһауы менән үҙен-үҙе атҡан тинеләр. Ул көн һайын туп-тура ғына баҫып эшкә китә лә, эсеп, иҫереп, һөйрәлеп саҡ-ҡа ҡайтып тәгәрәй ине. Күп эсә торғас, был яҡты донъяла йәшәүенең мәғәнәһе лә ҡалмағандыр. Береһенән-береһе ваҡ ҡына ете балаһы атайһыҙ тороп ҡалды, иң олоһо 5-се класта уҡый ине. Элек муллалар кешене ерләгәндән һуң ҡәбер янында тороп ҡалырҙар ине. Уларҙың аҙаҡ, кемгәлер һорау ҡаты килде, кемгәлер һорау йомшаҡ килде, тип һөйләгәндәрен хәтерләйем. Был юлы ла ауылдың муллаһы, әүлиә Уйылдан бабайыбыҙ (уның тураһында "Киске Өфө" гәзитендә яҙғайным) бер ирҙе туҡтатып, фәһем бирер өсөндөр инде, үҙенең эргәһендә ҡалырға ҡуша. Ир зыяраттан ҡото осоп килеп сыға. Аҙаҡ: "Туғандар, был донъя нимә генә ул, теге донъяла бик ҡурҡыныс икән", - тип һөйләп йөрөй. Ҡылған ҡылыҡтары өсөн әҙәм балаһы теге донъяла ла яуап бирә икән шул.

"Гүргә кергән кире сыҡмаҫ", тигән ата-бабаларыбыҙ. Шуға ла әҙәм балаларына, Хоҙай Тәғәлә һеҙгә ғүмер бүләк иткән, гүргә керергә ашыҡмай тороғоҙ. Һеҙ исемен фамилия итеп алған олатайҙарығыҙ: "Шәжәрәне дауам итергә, балаларыңа, ейән-ейәнсәрҙәреңә быуындар аҡылын тапшырырға тейеш инең бит. Ниңә бурысыңды үтәмәй, хурлыҡлы рәүештә, ашығып килдең бында, үҙең менән бергә шәжәрәне дауам итер балаларҙы ла һәләк иткәнһең бит", тип рәнйер, тип әйтке килә...

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы.**

✓ *Халыҡ араһында ихтирамы булған белгескә кәңәш һәм ярҙам һорап, ябай кешеләр генә түгел, Өфө ҡалаһы башлығы С. Волков, губернатор Н. Богданович кеүек ҙур түрәләр ҙә мөрәжәғәт итә.*



ЙӘШӘГӘН БИТ ШӘХЕСТӘР!



**Халҡыбыҙҙың исеме быуаттар аша ла ҡалҡып сығып милләт данын күтәргән уландары бар. Шуларҙың береһе - Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев. Беҙ уның мәғрифәтсе, әҙип, ғалим һәм йәмәғәт эшмәкәре булыуы хаҡында мәктәп йылдарынан белеп үҫтек. Ләкин былар барыһы ла айсбергтың өҫкө өлөшө генә. Хатта бөгөнгә көн ғалимдарыбыҙ тарафынан өйрәнелеп, баҫмаға сығарылған мираҫ та М. Өмөтбаев эшмәкәрлеген тулыһынса асып һала алмай әле. Белгестәр әйтеүенсә, архивтарҙа арҙаҡлы шәхесебеҙҙең уҡылмаған йәки тәржемә ителмәгән бихисап ҡулъяҙмалары һаҡлана. Был хаҡта Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге ғалимы, филология фәндәре докторы Миңлегәле Хөсәйен улы НӘҘЕРҒОЛОВ менән һөйләштек.**

# ӨЙРӘНЕЛМӘГӘН ХЕҘМӘТТӘРЕНДӘ ЛӘ...

## әллә күпме сер, мәғлүмәт барҙыр

➔ **Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың кем булыуы хаҡында һөйләп тороу, бер яҡтан, артыҡ та кеүек, икенсе яҡтан, ул әле һаман да өйрәнелеп бөтмәгән шәхес булараҡ та ҡыҙыҡлы. Белеүебеҙсә, ул төрлө ерҙәрҙә, өлкәләрҙә эшләгән һәм һәр ваҡыт ижад менән генә лә шөғөлләнмәгән. Шулай итеп, ғүмеренең ҡайһы осоро уны яҙыусы булараҡ аса?**

- Иң беренсе сиратта беҙ уны Башҡортостандың һәм башҡорт халҡының тарихи, матди һәм рухи мәҙәниәте тураһында һөйләүсе шағир, тарихсы һәм этнограф булараҡ беләбеҙ. Унан иһә, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре итеп таныйбыҙ. Уның ижады, әлбиттә, һуғыштан һуңғы йылдарҙа ғына өйрәнелә башлай. Унда ла совет замаһына яраҡлы булғандары ғына һайлап алына. Зәһит Шәрҡи, Петр Ищериков, Шакир Шакиров, Авзал Ҡудаш кеүек авторҙар иң беренсе булып уның хаҡында мәҡәләләр яҙып сыға. Шулай ҙа уны яҙыусы, ғалим һәм эшмәкәр булараҡ Әхнәф Харисов аса. Был төплө мәҡәлә һуңынан башҡа ғалимдар хеҙмәттәренә лә нигеҙ булып ята. Һуңғараҡ Мөсәлиә Хәйруллина, Тимерғәле Килмөхәмәтов, Салауат Галин, Суфиян Сафуанов, Ғиниәт Ҡунафин кеүек ғалимдар бөгөн уҡыусыға билдәле булған хеҙмәттәрен яҙҙы.

Әҙиптең ижади эшмәкәрлегендә Өфө ҡалаһында йәшәгән осоро, йәғни 1880-1907 йылдар айырым урын тота. Нәҡ ошо йылдарҙа ул үҙенең төп фәнни хеҙмәттәрен, дәреслектәр әҙерләгән, шиғырҙарын, ярымәҙәби, ярымпублицистик характерҙағы сәсмә әҫәрҙәрен ижад иткән, туған халҡын борсоған проблемалы мәҡәләләрен, ғарызнамәләрен яҙған. Был тәбиғи. Халыҡ араһында ихтирамы булған белгескә кәңәш һәм ярҙам һорап, ябай кешеләр генә түгел, Өфө ҡалаһы башлығы С. Волков, губернатор Н. Богданович кеүек ҙур түрәләр ҙә мөрәжәғәт итә. Шул үтенестәргә ҡолаҡ һалып, М. Өмөтбаев үҙенең "Башҡорттар", "Йәмғиәт тәртиптәре" исемле хеҙмәттәрен ижад итә, айырым кешеләр һәм дөйөм халыҡ исеменән үҙәктәргә рәсми ойорандарға ғарызнамәләр, шикәйәтнамәләр яҙа.

➔ **Беҙ хәҙер уның ижадын да, мәғрифәтселек эшмәкәрлеген дә өйрәнәбеҙ, ә бына сәйәсмән, йәмәғәт эшмәкәре булараҡ нимәләр билдәле уның хаҡында?**

- Әҙмә-әҙлекле һөйләгәндә, был бик күп ваҡытты алырға мөмкин, шунлыҡтан бер нисә айырым миҫалды ғына телгә алып китәм. Ҡырымда йәшәп эшләгән сағында шундай хәл була. Ҡырым мосолмандары араһында мәсеткә һалынған мал, йорттар, ерҙәр кеүек оло хәйриәне бүлеү мәсьәләһендә ғауға сыға. Рәсәй Эске эштәр министрлығы айырым комиссия ойоштора, уны генерал-майор Чингисхан етәкләй. Бөтөн Рәсәй буйынса Ҡырым татарҙарының телен тәржемә итеүсе һәм генерал-майорҙың ярҙамсыһы итеп М. Өмөтбаев тәғәйенләнә. Был үҙе үк уның мәртәбәле, абруйлы кеше булыуын һөрәтләй.

1906 йылда Өфөлә иң тәүге төрки-татар телле гәзитте ойоштороуҙа ла күп көс һала ғалим. "Ислам донъяһы" тип аталған был гәзитте әҙерләү, даими баҫтырыу мәсьәләләрен юллау, рубрикалар өҫтөндә эшләү - барыһы ла уның иңенә ята.

Тағы ла бер генә урында туҡталам. Өфө губернаһы губернаторы Богданович башҡорт халҡының ауыр йәшәйешен яҡшыртыу юлдарын асыҡлау маҡсатында шулай уҡ милләттең төп белгесе тип иҫәпләп Өмөтбаевҡа мөрәжәғәт итә. Ә Мөхәммәтсәлим Ишмөхәмәт улы быға яуап итеп "Йәмғиәт тәртиптәре" тигән бик ҙур хеҙмәт яҙа. Был эш ҡулъяҙма килеш тороп ҡала. Яҙмаларҙа әҙип чиновникты халҡыбыҙҙың тарихы, этнографияһы, менталитеты менән таныштыра һәм уның ни өсөн ошондай хәлдә ҡалыу сәбәптәрен аңлата. Бөлгөнлөктөң иң төп сәбәбе итеп ул ер мәсьәләһен күтәрә. Унан белем һәм башҡа сәбәптәргә күсә. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев шул заманда алға ҡуйған сәбәптәр бөгөн дә актуаль.

Тыуған яғына ҡайтҡас, ул кантон идаралығының тәржемәсеһе сифатында башҡорт ғәскәренә хеҙмәткә тәғәйенләнә. Һуңғараҡ Ҡырмыҫҡалы улысы мировой аралашсыһының писары була. 1869 йылда ул ошо уҡ улыстың старшинаһы итеп һайлана һәм был вазифала ун йыл эшләй. Был ваҡыт арауығында милләттең аҙ сәйәси мәсьәләләрен хәл итмәй ул.

➔ **Архивта М. Өмөтбаевҡа ҡағылышлы күп кенә хаттар ҙа һаҡлана, тигәйнегеҙ. Иң ҡыҙығы, моғайын, шуларҙыр...**

- Эйе, бында әҙип исеменә килгән туҡһандан ашыу һәм ул яҙған утыҙ туғыҙ хат бар. Сәләмдәр Өфөнән, Стәрлетамаҡтан, Бөрөнән, Троицкиҙан, Ҡаҙандан, Һарытауҙан, Мәскәүҙән, Санкт-Петербургтан, Ташкенттан, Сәмәрҡәндтән, Истамбулдан һәм башҡа төбәктәрҙән ебәрелгән. Уларҙың эстәлеге иһә үҙе бер китап. Мәҫәлән, Зәйнулла Рәсүлевтың ике хаты һаҡлана. Тәүгеһендә - ул хат 1892 йылдың 12 майында яҙылған - автор Мөхәммәтсәлим Ишмөхәмәт улынан 6 дана яңы сыҡҡан дәреслеген ("Ҡыҫҡа фәнгә инеш тәржемәһе") ебәреүен үтенә, киләһе хатында иһә шул ебәрелгән китаптар өсөн рәхмәт белдерә һәм икенһенә таныш булған ҡайһы бер кешеләрҙең хәл-әхүәлен бәйән итә. Башҡорт шағиры Сафуан Яҡшығоловтың да хаты бар. Ул 1901 йылдың 13 июнендә Өфө өйәҙе Яңы Яппар ауылынан яҙылған. Автор М. Өмөтбаевтың эшмәкәрлегенә сикһеҙ һоҡланыуын шиғри юлдар менән белдерә. Бынан тыш, шиғри хат менән мөрәжәғәт итеүселәргә Бөрө өйәҙе Сиҡәлекүл ауылынан Ғәбделкәбир Ғәбделмәнировты, мәғрифәтсе-педагог Хәсән-Ғата Мөхәмәтов-Ғәбәшиҙе индерергә була. Ырымбур ҡалаһында мөғәллим булып эшләгән Камал Ҡотоевтың да ике хаты һаҡлана. Тәүгеһендә автор үҙенең һаулығы тураһында хәбәр итә һәм Өфөгә килгәндә М. Өмөтбаев менән осраша алмағанына үкенес белдерә. Икенсе хатында К. Ҡотоев М. Өмөтбаевтың "Йәдкәр" китабын ыңғай баһалай һәм уның бер нисә данаһын ебәреүҙе үтенә. Бында шулай уҡ Александр Пустовалов исемле шағирҙың хәтирә итеп бүләк ителгән ике лирик шиғыры ла ята. Хатында автор үҙен әҙиптең яҡын дуҫы һәм коллегаһы тип атай. Хаттар араһында шулай уҡ Ҡаҙанда нәшер-китап баҫыусы булып эшләүсе Ибраһим Тереголовтың да яҙмалары бар. Автор М. Өмөтбаевтың "Диләрәч" исеменең тарихы тураһындағы мәҡәләһен Ҡаҙан гәзиттәренең береһенә, йә Ҡаҙан университеты эргәһендәге Археология, тарих һәм этнография йәмғиәте баҫмаһына тәҡдим итәсәге, ә "Татар нәхүсенең мохтасары" ("Ҡыҫҡа татар теле синтаксисы") дәреслеген китапсы сауҙагәрҙәргә тапшырасағы тураһында хәбәр итә. Хатының аҙағында И. Тереғолов ғалимдың "Йәдкәр" китабы хаҡындағы фекерҙәрен әйтә һәм үҙенең хәл-әхүәлен белдерә.

Әлбиттә, хаттар хаҡында бик күп һөйләргә була, сөнки уларҙа мәғлүмәт тә, яңылыҡтар ҙа етерлек. Был хатлашыусы кешеләр ябай хәбәрләшеү менән генә сикләнмәй, улар төрлө сәйәси хәлдәрҙе, яңы әҫәрҙәрҙе анализлай, үҙҙәренең фекерҙәрен белдерә. Ул бик күп ғалимдар, әҙиптәр, дин эшмәкәрҙәре, сәйәсмәндәр менән тығыҙ бәйләнештә торған. Бында М. Өмөтбаевтың үҙенең шәхесенән тыш, башҡа бик күп билдәле шәхестәрҙең ижады, яҙмышы асыла.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА әңгәмәләште.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

...Йәйге юл менән заводтан 15 саҡрым алыҫлыҡта, Ағиҙел йылғаһы ярын тәшкил итеп, Шүлгән Таш тип исемләнгән бер тауҙа статский советник Рычков әфәнде тарафынан тасуирланған данлы Ағиҙел мәмерйәһе урынлашҡан...

Мәмерйәнең ниндәй булыуын һүрәтләүҙән башҡа, уның нисек барлыҡҡа килеүе тураһында ла әйтеп үтергә кәрәк. Советник Рычков әфәндeнеке, тип иҫкә алынған фараздарға ярашлы, ул был мәмерйәнең бик боронғо замандарҙа кеше ҡулдары тарафынан яһалыуы хаҡында фекер йөрөтһә лә, уның бөтә дәлилдәре лә нығлы түгел: ысынлап та, ошондай мөһабәт нәмәне яһау мөмкин дә түгел, һәм кәрәге лә юҡ. Әгәр ҙә беҙ мәмерйәнең бүлектәренә ентекләберәк ҡараһаҡ, тауҙағы ошо дәү бушлыҡтың һыу тарафынан яһалыуы аңлашылып тора. Тәҙрәләр ауышлығы, тишелгән һәм ишек кеүек күренгән стена аралыҡтары бер бүлектең икенсеһенән һуң яралғанын, һыуҙың бер оянан сығып, икенсеһен йыуыуын раҫлап тора.

Урыны-урыны менән тәртипһеҙ рәүештә өйөлөп ятҡан таштар, һис шикһеҙ, мәмерйә барлыҡҡа килгәндән һуң күп ваҡыт үткәс кенә емерелеп төшкән. Беҙ бында Рычков әфәнде үҙенә тәүгендә булмаған таштарҙы күрҙек; уларҙың ҡайһылары аҫылынып тороп, емерелеп төшөү хәүефе тыуҙыра.

Башҡорт әкиәттәрен ситтә ҡалдырып торам: ошо еңел фекерле һәм хөрәфәттәргә ышаныусы халыҡтың әкиәти һүҙенән әллә ниндәй һығымталар эшләп булмай. Һыуҙың ни рәүешле тауға үрләүе хаҡында ла бар дөрөҫлөгөндә ышаныслы итеп әйтә алмайым: Йылҡысыҡҡан күленәнме (автор "Елкичи Кичан", тип яҙа. - **Ред. иҫк.**), бәлки, башҡа йыраҡтағыраҡ урындамы...

Юлдар үтеп сығарлыҡ булмау сәбәпле, Вознесенский заводынан һуң Ағиҙел йылғаһын ҡалдырып китергә мәжбүр булдыҡ һәм Уралдың үҙенә табан йүнәлдек, сөнки Кананикольский заводына, насар булһа ла, юл һалынған ине.

Вознесенскийҙан ошо заводҡа тиклем 50 саҡрым, ошо арауыҡ тулыһынса урман менән ҡапланған, ә ҡарағас урмандары бигерәк тә күп ине. Ошо урман нисек матур булһа, уның торошо ла шул тиклем йәлләүгә лайыҡ ине. Боҙолмаған ағас бик һирәк күренә. Яҙҙарын башҡорттарҙың далаларҙа һәм урмандарҙа үрт һалыу менән артыҡ мауығыуы бында бигерәк тә асыҡ күренә; ҡарағас, башҡа ағастарға ҡарағанда сайыры күп булғас, бик тиҙ тоҡанып китә. Шуға өҫтәп, башҡорттарҙың ҡыш көнө тейен тотоу менән бәйле сәйер һәм беҙ элек иҫәпкә алмаған ғәҙәте ошо урмандарҙы ҡырыуға аҙ булышлыҡ итмәгәндер. Ҡыуылып йөрөүҙән хәлдән тайған һәм арыған тейен йыуан ботаҡҡа ятып, башҡорт уҡтарынан йәшенә: әммә был сара ла уны ҡотҡара алмай. Башҡорттар, үҙҙәренең көсөнән бигерәк, урманды ла йәлләмәйенсә, биш тинлек табыш алыу өсөн йыш ҡына йыуан-йыуан ағастарҙы ла йығып ташлай...

**(Дауамы бар).**

✓ *Мин Баймаҡ районына барып, юҡ, ҡайтып, ташландыҡ фермала һөт аҙыҡтары етештереү цехы асып ебәрҙем. Тыуған төйәгемә аҙ ғына булһа ла файҙа иткем, эш урындары булдырғым килде.*



**Ғәҙәттә, билдәле кешеләр күҙ алдында ғына түгел, ә тел осонда ғына йәшәй. Ә инде ул ҡатын-ҡыҙ икән - бигерәк тә. Халыҡ араһында бер күренеүе була, уны прическаһынан алып аяҡ кейеменә ҡәҙәр "сәйнәп сәйнәйҙәр". Ә инде әйткән һүҙҙәре, фекерҙәре, аңлап еткән-етмәгәндә лә, йөҙ төрлө сағылышта ҡулланыла, тейешле һәм тейеш булмаған һығымталар яһала, уйҙырмалар сығарыла. Шундай тел осонда йөрөгән ҡыҙ-ҡатындар артистар араһында ла, яҙыусылар рәтендә лә, ғалимдар иҫәбендә лә, сәйәсмәндәр сафында ла бар. Яңы рубрикабыҙҙа беҙ танылған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың яҙмышын үҙҙәре һөйләүе буйынса бәйән итмәксебеҙ. Бар хәбәрҙәр ҙә улар ауыҙынан сығып, уҡыусыбыҙ ҡолағына тура ғына барып инәсәк. Тап тормошта булғанса. Бөгөнгө героинябыҙ - Гөлдәр ИШҠЫУАТОВА. Күп кенә телепроекттар авторы, йырсы, композитор, шағирә, әсәй һәм иҫ киткес һәләтле, гүзәл ханым.**

**▶ Гөлдәр, ғаиләлә үҙаллылыҡ һиңә ҡасандан бирелде? Нисә йәштә үҙеңә ҡағылышлыны үҙаллы хәл итеү хоҡуғы бирелде һиңә?**

- Бик бәләкәйҙән. Дөрөҫөрәк итеп әйткәндә, минең хоҡуғым бер ваҡытта ла сикләнмәне лә. Бәлки, был атай-әсәйемдең бер бөртөк балаларын иркәләтеүҙәренең шундай ҡай саҡ: "Уйлашығыҙ һуң минә, нисек итергә белмәйем бит..." тип үпкәләй ҙә инем. Ошо тәңгәлдә шуны ла әйтеп үткем килә: бер бала, тип, мине бәпләп ултырған да кеше булманы. Мин малай менән ҡыҙ араһындағы бер кеше булдым. Ҡыҙҙар йомошон дә үтәнем, шул уҡ ваҡытта атайым менән баҡсала, балыҡта, атаҙбар араһында ла буталдым.

**▶ Билдәлелекте тиҙ яуланың. Ғәҙәттә, йәштән ҡапыл балҡыған йондоҙҙар ашығып дөрләп-янып, тиҙ генә һүрелеп тә ҡуя. Ә һин инде ике тиҫтә йылдан ашыу сәхнәлә, һаман үҫеү юлындаһың. Был хеҙмәттә ниндәй яғың көслөрәк, тип уйлайһың: һәләтме, тырышлыҡмы, һәр һөнәргә маһирлыҡмы?**

хәҙер ҙә үҙемә йырҙарҙы үҙем туплайым, кәрәк булһа, шиғырын да яҙам, көйөн дә. Был тәңгәлдә башҡорт телен яҡшы белеүем, иркен һөйләшә һәм фекерләй алыуым менән ғорурланам. Мин бер ваҡытта ла "Мин һине ятатам, иртәнсәк таң ата" тигән эстәлектәге йыр башҡармаясаҡмын. Шиғырҙың ниндәй әҙәби жанр икәнен аңлайым һәм һүҙ ҡәҙерен бегәнгә үҙемдең йыйғанды ҡушып, тот та кассета сығарырға Ҡаҙанға сығып кит! Хәҙер аптырайым, үҙем бала ғынамын, аҡса тотоп алғанмын, ул кассета сығарыуҙың әле бер рәтен белмәйем. Тәүге кассетам шулай сыҡты.

**▶ Кейәүгә сығыуың да тормошондағы башҡа ваҡиғалар кеүек ҡапыл һәм тиҙ хәл ителгән ваҡиға булған, тип ишеткәйнем?**

- Эйе. Балаларымдың атаһы, үҙе әйтеүенсә, миңә алдан ғашиҡ булып йөрөгән. Миңә өйләнергә теләүе хаҡында әле беҙ таныш булмаған саҡта уҡ барыһына ла әйтеп сыҡҡан. Телевизорҙан күреп ҡалһа: "Ошо минең ҡатыным булаcаҡ!"- тигән. Һәм бер ваҡыт Өфөгә килеп, мине шундай иғтибарға, ихтирамға күмеп ташланы. Бик матур, күңелемде ҡуҙғатырлыҡ эштәр

# ӨС БАЛАМ ДА БЕР

бер үҙенсәлекле юлы ла булғандыр - белмәйем, әммә улар минең Хоҙай ҡушмаған идеямды ла, башланғысымды ла кире ҡайырманы, тыйманы. Хәтеремдә, түшәк тегеп ҡарау теләге тыуғас, төҫлө тауар эҙләп, әсәйемдең күлдәктәренә килеп төртөлдөм. Шунда әсәйем күҙ ҙә йоммайынса, "Ал!" тине. Уйлап ҡараһаң, түшәк хаҡы ул күлдәктәрҙең бер еңенә лә тормағандыр инде, әммә ул ниндәйҙер яңы эш башҡарып ҡарау теләгемде һүндермәне.

Әлбиттә, атай-әсәйем кәңәш тә итте, "Мин шулай-шулай уйлайым, әммә һин үҙең дөрөҫ тип һанағанса эшлә", тинеләр.

Ауылда ла дуҫтарым малайҙар ине.

Үҙаллылыҡҡа килгәндә, сәнғәт юлын һайлағас та, атай-әсәйемдең фекере икенсерәк булһа ла, һуңғы һүҙҙе миңә ҡалдырҙылар.

- Белем. Мин ниндәй өлкәлә лә белемде иң беренсе урынға ҡуям. Тәбиғәт биргән тауыш менән генә, һеҙ әйтмешләй, артыҡ оҙаҡ балҡып булмаҫ ине. Һәләтем бар икән, мин уны белем менән нығытып ҡуйырға тейеш инем. Элек тә, ләм. Әле туҡһанынсы йылдарҙа, аҙмы-күпме йырҙарым тупланғас, кассета сығарырға кәрәклекте аңланым. Был хаҡта әсәйемә әйттем. Ул һәр ваҡыттаса, янып, "Давай!" тине. Студент саҡта, аҡсаға мохтажлығым булмаһа ла, бер уҡыу йортона йөрөп, иҙән йыуа инем. Шунан өйҙәгеләр бирэшләне, арбаны, әүрәтте, ҡыҫҡаһы, башым "зыр-р" әйләнеп, кейәүгә сығып та киттем. Иҫемә килгәндә, ҡулымда улым бар ине инде. Бөгөн бергә булмаһаҡ та, беҙ насар йәшәмәнек. Ул мине ижадтан, аралашыуҙан, рухи үҫеүҙән сикләмәне. Әлбиттә, артыҡ иғтибар ҙа итмәне, әммә ҡанатымды ла ҡайырманы. Шул саҡта ул: "Һинең урының ошонда", - тип, өйҙә ултырырға ғына ҡушһа ла мин буйһонор инем. Балалар бер-бер артлы ғына тыуҙы. Берәүһенең ике йәше тулыуға, йәғни күкрәктән айырылыуға, буйымда икенсеһен күтәрҙем. Уларға, өйгә, иргә һәм шулар араһында ҡалайтыптыр ижадҡа ла бүленергә тура килде.



**▶ Өс бала атаһы менән арағыҙҙы өҙөү ҙә бик үк еңелдән булмағандыр?**

- Араларҙы беҙ ауырттырып, талашып-тартышып, шартылдатып өҙмәнек. Был хәл яйлап, төрлө хәл-ваҡиғаларҙа иҫбатлана-иҫбатлана башҡарылды. Әйтеп үтеүемсә, бер-бер артлы тыуған сабыйҙарға әүрәһәк тә, икебеҙ ике донъя кешеһе икәнде аңларлыҡ булдыҡ бер мәл. Беҙҙе шул балаларҙан башҡа бер нәмә лә бәйләмәй ине. Ғәҙәттә, шундай хәлдә ғаиләләрҙә бер-береһен аңламауҙа, ихтирам итмәүҙә ғәйепләүҙәр башлана. Ә беҙ ултырҙыҡ та һөйләштек. Мин бәләкәсемә ауырлы саҡта уҡ иремдең минән китерен белдем һәм шуға риза инем. Ул ҡаршы булды. Күптәр миңә: "Китеп барған ирҙән нишләп бала табаһың?" - тине, йәнәһе, уны тоторға тырышам инде. "Өс балам да бер атанан булһын ине", - тинем. Бөгөн, әлбиттә

✓ *"Мин әйткәндә тик кенә тор, үҙем хәл итәм, үҙем эшләйем", - тигән һүҙҙәре бөтөнләй бәлшәйтте. "Был донъяла минең йөрәгемдә лә бушатып алырҙай, ҡатын-ҡыҙ урыныма күрһәтерҙәй ир бармы икән ни? Рәхмәт!" тип һөйөндөм.*



икенсе төрләрәк уйлайым: беҙгә тағы ла бала кәрәк.

**Яңғыҙлыҡ осорон да кисерҙегеҙ, тимәк...**

- Яңғыҙлыҡ - бик киң төшөнсә бит ул. Әлдә күпме халыҡ араһында ла яңғыҙ булырға һәм шул уҡ ваҡытта бер үҙең ҡалып та, яңғыҙ булмаҫҡа мөмкин. Минең осраҡта иһә, өс ваҡ бала менән үҙенде яңғыҙ тойоп ҡара! Унан һуң, минең эргәмдә бит һәр саҡ минең аҡыллы, һөйөклө әсәйем булды. Унһыҙ, әлбиттә, күпкә ауырыраҡ булыр ине.

Шулай ҙа мейемде ҡапыл икенсе юҫыкта эшләтеп алып китерҙәй, намыҫланып, ажарланып ҡуҙғып китерҙәй эҙ мәлдәр булманы түгел. Жуково ауылына әсәйемә барып, сумка-сумка аҙыҡ-түлек теййәп, әлеге өс бала менән тукталышҡа сыҡтыҡ. Бәләкәй белмәһәм, оят бит. Һәм уҡыуҙы тамамлар алдынан ғына миңә шундай фекер килде: халыҡҡа иҡтисад нигеҙен телевидение аша алып барып еткереү. Шул уйҙан "Бай" тапшырыуы барлыҡҡа килде. Беҙҙә халыҡ иҡтисадты һәм уға бәйле эштәр системаһын белмәй, аңламай. Сөнки уға бәләкәйҙән төшөндөрмәгәндәр. Сит илдә бит ғаилә бюджеты, уның килемдәре, сығымдары хаҡында мәктәптән үк уҡытыла, һәр йөш кеше бизнес эшен, аҡса эшләү тәртиптәрен белә. Ә беҙҙекеләр быға яңы өйрәнә, унда ла институтта ғына.

Шулай итеп, мин Баймаҡ районына барып, юҡ, ҡайтып, ташландыҡ фермала һөт аҙыҡтары етештереү цехы асып ебәрҙем. Дуҫтарым: "Нишләп әллә ҡайҙа ер аяғы ер башына киттең, баш ҡалаға яҡын ерул?" - тип ысынлап хайран булып китә. Ә мин уның нимәгә тотонһа ла эшләй алғанына, сөйҙән башлап ҡатмарлы электроникаға тиклем белгәненә аптырайым. Аҡылына, ҡылыҡтарына, һөйләшеүенә һоҡланам. Ҡыҫҡаһы, күнелем сиртә, әммә үткән тәжрибәләрем ауыҙлыҡлай. Шулай "һеҙ, һаумыһығыҙ, һау булығыҙ" тип йөрөп, ун биш көн ваҡыт үтеп китте, эште тамамланыҡ. Матур итеп хушлаштыҡ, ҡул ҡыҫыштыҡ. Ҡапҡа алдында ул үҙ машинаһына, мин үҙемдекенә табан йүнәлдек. "Все, бөттө! Хәҙер мин уны бер ваҡытта ла күрмәсмен, башҡа йомош-фәлән, шылтыратыр сәбәп юҡ", - тип уйлайым. Барып, машинам ишеген асҡайным - әллә нимә булды. Боролоп, "Рөстәм!" тип өндәштем. Ул шунда уҡ әйләнеп ҡараны һәм секунд эсендә ләйем, минең һүҙҙе йыҡма", - тигән һүҙҙәре бөтөнләй бәлшәйтте. "Хоҙайым, был донъяла минең йөрәгемдә лә бушатып алырҙай, ҡатын-ҡыҙ урыныма күрһәтерҙәй ир бармы икән ни? Рәхмәт! Рәхмәт!" тип һөйөндөм.

**Балаларығыҙҙың үҙ аталары менән мөнәсәбәте барҙыр бит?**

- Әлбиттә. Уның атай булыуын әлегә берәү ҙә юйып ташламаған. Килә, балалары менән күрешеп тора, байрамдарҙы, ялдарын бергә үткәрәләр. Башта балаларға: "Атайығыҙҙан аҡса һорамағыҙ, улай итмәгеҙ, былай итмәгеҙ",- тип сығара торғайным. Бер көн Рөстәм: "Балалар менән атайҙарының араһына ҡыҫылма, нимә алып бирергә йәки ни эшләргә ул үҙе белер, уның да хоҡуғы һинеке кеүек үк", - тип

**Һин үҙеңде балаларың, ғаиләңдән тыш, тағы кем алдында яуаплы итеп тояһың?**

- Һис һүҙһеҙ, милләтем алдында яуаплымын. Әйткәндәй, иң беренсе сиратта ҡатын-ҡыҙ яуаплы милләт алдында. Ул - милләт әсәһе! Ул үҙ милләтенә бала табырға, уны матур итеп үҫтерергә, күнелдәренә илһөйәрлек, телһөйәрлек һәм рухи тойғолар һалырға тейеш бит һуң. Юҡһа, кем башҡара ала был бурысты?..

**Бизнес эштәре нисек?**

- Ул әлегә башланғыс ҡына. Шулай ҙа Баймаҡ һөт аҙыҡтарының сифатын һәм түмен Өфө яҡтары самаланы инде, шундуҡ һатып алып бөтәләр. Был ауылдаштарыма үҙе етештергән аҙыҡ-түлеген ҡуллана белергә өйрәнергә бер стимул булһын ине. Өфөнән йөрөп,

# АТАНАН БУЛҺЫН, ТИНЕМ...

булһалар ҙа, уларҙа ла йәшелсәле пакеттар, рюкзактар бар. Автобус үтеп бара, беҙ уның артынан йүгереп барып саҡ өлгөрҙөк. "Ах та ох" килеп, саҡ тырмашып менеп ултырғас (уларға ярҙамлашырға ҡулдарым буш түгел), кинйәкәйем үпкәләп ҡарап: "Шәп йүгерәһең, бәхет һине ҡыуып етә алмай ҡуйһа", - тине. Шул ҡараштан тетрәнгән мин, намыҫланып барып, машина һатып алдым һәм рулгә ултырҙым. Ана шулай, инде күндем тигәндә генә балалар йәки яҙмыш тарафынан ниндәйҙер арҡаға төртөп ебәргәндәй этәргес хәл була ла, мин тағы ла йүгерә-атлай алға китәм...

**Ә бына бизнесҡа тотоноп китеүгә нимә этәргес булды?**

- Әйттем бит әле, ҡай саҡ үҙем дә аңламаған нәмәләр эшләп ҡуям да, ниндәйҙер бер-береһенә бәйле ваҡиғалар сылбырынан барып-барып, саҡ шул эшемдең асылын асып ҡуям, тип. Үәт, был да шундай хәл ул. Бер мәл мин иҡтисад факультетына уҡырға инергә булып киттем. Ниңә икәнлеген үҙем дә белмәйем. Шул ҡаңғырыҡ мәлемдә, ижад һәм балаларҙан тыш, мин тағы ла нимәгәләр әүрәргә тейеш инем, буғай. Ниәтемде әсәйемә әйттем. Ысынында, деккетта ултырам, аҡсаһыҙ саҡ, балаларҙы ҡарарға кәрәк, эшем бөтөнләй икенсе юҫыкта - нимәгә инде миңә иҡтисад, шулай бит? Әсәйем "Бар!" тине. Һәм мин уҡып киттем. Ҡай саҡ үҙемде, нишләп йөрөйһөң һин бында аҡса туҙҙырып, тип әрләп ташлайым. Мин бит инде имтихандарҙы ҡуйҙырып та ала ала инем, юҡ, аҡсамды йәлләп, белем алырға, шул иҡтисадты аңларға тырышам. Балаларымдың ауыҙынан өҙөп түләп тә бер ни ҙәрәк туҡта, беҙ ярҙамлашырбыҙ", - тинеләр. Үҙем дә шулай унайлыраҡ икәнен аңлайым инде. Әммә... тыуған төйәгемә аҙ ғына булһа ла файҙа иткем, эш урындары булдырғым, халыҡты үҙҙәре етештергәнде тотона белергә өйрәткем килде. Һәм мин Баймаҡты һайланым.

**Үҙең шул фермаға барып эшләгәнең булдымы?**

- Башта шунан ҡайтып инә алманым. Килеп күрһәгеҙ, танымаҫ инегеҙ. Спецовкала, яулыкта, сәс унан-бынан ҡойолоп тора, ҡулда кәрәк йә һәнәк. Тиҙәк көрәйем, һыйыр һауам, улай-былай йөк ташыйым, цех ҡоролмаларын көйләйем. Туғандарым: "Кит, исрафлама үҙеңде, һин бында резина итектә йөрөр кеше түгел", - тип әйтеп тә ҡараны. Бер яктан, аңлайым да кеүек, икенсе яктан, мин ярты юлда туҡтай алмайым. Шулай бер саҡ фермаға яғыулыҡ үткәрергә кәрәк булды. Дуҫтарым аша оҫта эҙләйем. Тыуған яҡтарына ялға ҡайтҡан бер кешенең телефон номерын бирҙеләр. Шул яҡшы эшләй, ҡиммәт тә һорамаясаҡ, тинеләр. Шылтыраттым, килде, таныштыҡ, бергә эшләй башланыҡ. Мин "алып бир, алып кит" ролендә йөрөп ятам. Бик әҙәпле, ипле генә. "Һеҙ" кимәленән төшмәйбеҙ. Өсөнсөмөдүртенсеме көнгә мин үҙемде туҡтауһыҙ был кеше хаҡында уйлап йөрөүҙә тота башланым. "Гөлдәр, - мин әйтәм, - һинең проблемаларың аҙмы?"

**Тимәк, был һинең булаcаҡ...**

- Туҡта, үҙем һөйләп бөтәм! Йөрөй-йөрөй ҙә бал миңә: "Һеҙ нисек итеп был эште яңғыҙ алып барырға йыйынаһығыҙ? Һеҙ етди уйлайһығыҙмы барыһы ла хәл ителде - йүгереп барҙым да ҡосаҡланым да ҡуйҙым. Ул мине күтәреп алып әйләндерҙе! Ошо тәңгәлдә ҡатын-ҡыҙҙарға ғорурлыҡтың да кәрәк урында ғына кәрәк икәнлеген сер итеп әйткем килә. Яратҡан кешең янында нимәгә ул ғорурлыҡ?

**Һәм?..**

- Һәм шунан алып беҙ бергә. Башта ярты йыйлдай хистәребеҙҙе һынап ҡараныҡ. Ул йә бал, йә теге эштә ярҙамлашып йөрөп, яйлап әсәйем, балаларым менән таныштпы. Мине яулаған аҡылы, ярҙамсыллығы менән уларҙы ла ҡаратып алды. Бер көндө балаларға: "Рөстәм ағайығыҙ менән бергә йәшәһәк, нисек булыр икән?"- тигәйнем, "Урра" ҡысҡырҙылар...

**Ярҙамсыллығы, аҡыллы булыуынан тыш, тағы ла ниндәй яҡтары ғашиҡ иттерҙе һине?**

- Беләһеңме, мине ундағы ирҙәрсә, хатта артыҡ ирҙәрсә сифаттары әсир итте.

**Мәҫәлән?..**

- Мәҫәлән, иң башта ҡатын-ҡыҙ булараҡ бындай ауыр эште алып бара алыуына шик белдереүе. Быға тиклем бит минең нимәнәлер эшләй алмаҫыма ышанмаған, шикләнгән йәки йәлләгән ир кеше (атайым күптән мәрхүм инде) юҡ ине! Икенсенән, ауырлыкты ҡулымдан алырға, ярҙамлашырға тырышып тороуы. Унан инде: "Мин әйткәндә тик кенә тор, үҙем хәл итәм, үҙем эштыйғас, өндәшмәйем. Ул балаларымдың атаһы хәлен яҡшы аңлай, сөнки үҙе лә миңә тиклемге ғаиләһендәге ҡыҙҙары менән тығыҙ бәйләнештә. Миңә уның үҙ балаларын да контролдә тотоуы, улар өсөн күп мәсьәләләрҙе хәл итеүе, талапсан да, йомшаҡ та була белеүе оҡшай. Әсәй булараҡ, артыҡ сарбаулап китһәм дә, малайҙарым менән айырым, ирҙәрсә һөйләшә. Баҫым яһарға бирмәй. Шуға улар хәҙер мине нисектер урап үтеп, күп һорауҙарын Рөстәм ағалары менән хәл итеп ҡуйыуҙы хуп күрә кеүек.

**Шулай итеп, бөгөн һин бәхетле. Ә шул бәхетте мәңгелек итеү өсөн үҙ өҫтөңдә эшләйһеңме? Үҙгәрергә, элекке хаталарҙы ҡабатламаҫ өсөн икенсерәк булырға кәрәктер, тип иҫәпләмәйһеңме?**

- Үҙгәрҙем, үҙем өсөн, эстән. Мин хәҙер бер нәмәлә лә алға ырғымайым, ҡылыс болғамайым. Урыным өйҙә, аш бүлмәһендә, йоҡо бүлмәһендә икәнлекте төшөндөм. Быға мине инемдәге яуаплылыҡты бүлеп алып, арҡалап, иркәләп өйрәттеләр. Хатта һыйырҙар араһында сәсем-башым туҙып, сабыулап йөрөп ятҡанда ла, ул миңә "Һин иң матуры!" ти. Шунан минең тағы ла матурыраҡ булғым килә. Бөтә ҡатын-ҡыҙ ҙа шулай ул. Проблемаларға күмелгән һайын - һулый, ә һаҡлаған, наҙлаған һайын - сәскә ата.

төпкөл районда ферма тотоу, әлбиттә, артыҡ төшөмлө эш түгел. Быныһын аңлайбыҙ. Ләкин яҡташтарым яйлап был шөғөлдә үҙ ҡулына алыр, тип ышанам. Башҡортостан юлдаш каналындағы "Бай" тапшырыуында ла мин милләтебеҙгә аҡса эшләү юлдарын өйрәнеүгә маҡсат итеп ҡуйҙым. Ни эшләп беҙҙә һаман "бай" төшөнсәһе кире ҡараш тыуҙыра һуң әле? Бай - ул егәрле, әүҙем, аҡыллы, тырыш, инициативалы, көслө рухлы кеше. Шул сифаттарһыҙ кеше бай була алмай, бай булып тыуғанда ла ул байлыҡты үҙенә эшләтеп, һаҡлап тота алмай. Бай булыуҙан оялмаһын ине беҙҙекеләр, бай булырға ынтылһын, тырышһын ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмә аҙағында Гөлдәрҙән: "Ижадҡа урын ҡаламы һуң был эшлекле, мәхәббәтле тормошта?" - тигән һорау бирҙем. "Ижадҡа мин бер ваҡытта ла айырым урын бирмәнем, - тине Гөлдәр. - Тәҙрәгә ҡарап ултырып йырлау минең холоҡта түгел. Ижади пландар хәҙер Баймаҡ-Өфө юлында, фермала, ҡырҙа йәки аш бешергәндә ҡорола. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, элеккегә ҡарағанда күпкә ҡыҙыҡлыраҡ ижад емештәрем..." Ҡыҫҡаһы, тормошоноң һәр өлкәһендә лә уңыштар теләйек Гөлдәргә. Һәм тағы... Йә, кемдәр ауыҙынан үҙ яҙмышы хаҡында ишеткегеҙ килә, тип тә өндәшәбеҙ гәзит уҡыусыларға.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
әңгәмә ҡорҙо.

ӘҘИП ҺҮҘЕ

# БЕҘ ТӨРЛӨБӨҘ...



**Ошо көндәрҙә генә З.Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Таңсулпан Ғариповананың "Бөйрәкәй" роман-пенталогияһының өсөнсө баҫмаһы донъя күрҙе. "Бөйрәкәй"ҙә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының холоҡ-фиғеле ялан сәскәләре гөлләмәһендәге һымаҡ сағыу итеп, дөйөмләштереп һынландырыла, тиһәк, моғайын, хата булмаҫ. Таңсулпан Ғарипова менән ыҡсым ғына әңгәмәбеҙ ҙә ошо юҫыкта бара.**

- Бик боронғо традициялары, ғаилә институты, ҡанбабалар мәктәбе булған халыҡ беҙ, - тип башлап китте һүҙен Таңсулпан Хисбулла ҡыҙы, - ләкин беҙгә яҡын тарихтағы Октябрь революцияһы, унан һуң башланып киткән Граждандар һуғышы, 90-сы йылдағы үҙгәртеп ҡороуҙар шул ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе онотторҙо. XX быуат башындағы ҡанлы ваҡиғаларҙың халҡыбыҙға килтергән зыяны тураһында берәй әҫәр яҙыу теләге күптән күнелдә йөрөй ине инде. 90-сы йылдарҙа үҙгәртеп ҡороуҙар ҡысымында иктисади һәм ижтимағи формациялар үҙгәреш кисерә башлағас, был теләк артты ғына. Ләкин ул заманда ҡулға ҡәләм тотоп, яҙышып ултырыу мөмкин булманы тиерлек - үҙемә лә ижтимағи хәрәкәт уртаһында ҡайнарға тура килде. 90-сы йылдар урталарында илдәге тынысһыҙлыҡтар бер аҙ баҫыла төшһә лә, иктисади көрсөк ғәләмәте бермә-бер көсәйҙе генә. Ошо ысынбарлыҡта күп ҡатын-ҡыҙҙар дилбегәне үҙ ҡулына алды һәм ғаиләһен, балаларын туйындырҙы. Мин быны бары тик ҡурҡыныс янаған саҡта көсәйә торған әсәлек хисенә бәйләйем. Ошо ваҡиғаларҙы күнелем аша үткәреп, ыңғай миҫалдарҙы тиҙерәк халҡыбыҙға еткереү теләгем "Бөйрәкәй" романына тотонорға мәжбүр итте. Ул заманда илдә барған бөтөн үҙгәрештәр беҙҙең өсөн яңы ине, бөгөнгө хәлдәрҙең иртәгә нимәгә килтеререн хатта етәкселәр ҙә тулыһынса күҙаллай алмағандыр. Романды яҙған саҡта күп осраҡта интуицияма мөрәжәғәт иттем, күп кенә күҙаллауҙарым тормошҡа ашты.

"Бөйрәкәй" тисгә йылдан артыҡ ваҡыт һуҙымында заман үҙгәрештәре менән бергә үрелеп яҙылды. Ҡайһы бер геройҙарым минең теләгемә лә ҡарамай хәрәкәт итте, бәгзеләренең яҙмышын уҡыусылар үҙҙәре хәл итте. "Бөйрәкәй" романы буйынса республикала бик күп кәңәшмәләр үтте. Ул кәңәшмәләргә килгән ҡатын-ҡыҙҙар араһында минең геройҙарымдың прототиптары ла осрағыланы. Уларҙы башҡорт ҡатын-ҡыҙы характерҙарының гөлләмәһе тип әйтергә лә була. Барсынбикә, Мәҙинә, Гөлбаныу, Ғәлимә, Рауза, Нәғимә, Сәмәрә - һәр береһе, йәшәү шарттарына ҡарап, ҡатын-ҡыҙ яҙмышының төрлөсә асылыуын сағылдырған характерҙар улар. "Һеҙҙең романдағы Мәҙинә образы - мин бит ул", тип, үҙ яҙмыштарын һөйләп киткән уҡыусыларым менән осрашыу, әңгәмәләшеү миндә ҡабатланмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы, улар әле лә минең күңелемдә йылыта. Әле килеп, китабымды ҡабаттан донъяға сығарыу китапҡа һыуһаған уҡыусыларымдың рухи һыуһынын бер аҙ ҡандырыр, тип ышанам.

Ҡатын-ҡыҙ, тип дөйөмләштереп әйтелһәк тә, тормошта һәр беребеҙ үҙенсә матур, үҙенсә холоҡло. Йәшәй-йәшәй, төрлө шарттарҙа төрлөбөҙ төрлө яҡтан асыла. Шул да уҡыусы өсөн ҡыҙыҡлылыр инде, тип уйлайым.

УЙЛАН...



# КЕМ, НИМӘ ХАҠЫНА ҠОРБАН ИТӘҺЕҢ ҮҘЕҢДЕ?

- Ошонда, ошонда! Минән һуң булаһығыҙ. Мин 852-се, һеҙ - 853-сө.

- Халыҡ шулай күпме ни?

- Ә һеҙ нисек уйлағайнығыҙ? Һеҙ генә шулай аҡыллы икән, типме? Ана, алдағыларҙың бөтәһе лә - шунда.

- Уй, әсәкәйем... Сират ҡасан килеп етер икән?

- Хафаланмағыҙ, бик тиҙ үтә. Һеҙ кем, нимә хаҡына ҡорбан килтермәксе булдығыҙ?

- Мөхәббәт хаҡына. Ә һеҙ?

- Мин балалар хаҡына. Балалар - минең өсөн бөтәһе лә!

- Ә нимәне ҡорбан итәһегеҙ?

- Шәхси тормошомдо. Тик балалар ғына иҫән-һау, бәхетле булһын. Уларға бөтәһен дә бирергә әҙермен. Бер яҡшы кеше кейәүгә саҡырҙы - бармаҡым. Нисек инде мин өйгә үгәй атай килтерәйем? Яратҡан эшемдә лә ташланым - йөрөүе алыҫ. Эргәмдә, ҡараулы, туҡ булһындар, тип, балалар баҡсаһына тәрбиәсе булып урынлаштым. Бөтәһе, бөтәһе лә уларға! Үҙемә бер ни ҙә юҡ.

- Эй, мин һеҙҙе нисек аңлайым! Ә мин мөнәсәбәттәрҙе ҡорбан итергә йыйынам... Беләһегеҙме, ирем менән арабыҙҙа күптән инде бер ниндәй ҙә тойғо ҡалманы. Уның һөйәркәһе бар. Мин дә бер кеше менән таныштым, тик... Тәүҙә ирем китһен ине! Юҡ, китмәй бит һөйәркәһенә. Илай... Һиңә өйрәнгәнмен, ти. Ә минә ул йәл... Илай бит! Шулай йәшәп ятабыҙ инде...

- Ә һеҙ һуң?

- Мин дә илайым... Күптән шулай ғазапланам... Аҡылдан яҙмаһам ярар ине, тип ҡурҡам.

- Эйе, тормош шулай инде. Һәр саҡ нимәнелер юғалтырға, ҡорбан итергә тура килә.

*Шул саҡ ишек асылып китә лә, "Кем 852-се? Инегеҙ!" тигән тауыш яңғырай.*

- Уй, мин киттем. Шул тиклем борсолам! Әгәр ҡорбанымды ҡабул итмәһәләр? Онотмағыҙ: минән һуң - һеҙ!

*853-сө бершәйеп кенә ултыра ла саҡырғандарын көтә башлай. Ваҡыт бик оҙаҡ үтә кеүек тойола. Бына тиҙҙән кабинет ишегендә 852-се күренә. Ул аптыранып ҡалғандай.*

- Шунан, нисек булды? Нимә тинеләр? Алдылармы ҡорбаныңды?

- Юҡ... Уларҙың һынау ваҡыты бар икән. Уйлай бир, тип сығарҙылар.

- Нишләп? Ниңә шундуҡ ҡына ҡабул итмәйҙәр ҡорбаныңды?

- Барып ингәс тә өҫтәлгә ҡорбанды сығарып һалғайным ул. Улар миңә шундай сәйер кино күрһәттеләр! Үҙемдең шәхси тормошомдо. Балалар үҫеп еткән, имеш. Ҡыҙым кейәүгә сығып, ер аяғы ер башында йәшәп ята. Улым да теләр-теләмәҫ кенә айына бер тапҡыр шылтырата. Килен кеше, ғөмүмән, минең менән теш араһынан ғына һөйләшә. Улым минең: "Балам, ни булды? Ниңә минән ситләшәһегеҙ?" - тип һорауыма: "Әсәй, зинһар беҙҙең тормошҡа ҡыҫылма! Нимә, башҡа эшең юҡмы әллә?"- тип яуап ҡайтара, имеш... Ә нимә эшләргә һуң миңә, бөтөн ғүмеремде уларға бағышланым дабаһа. Тимәк, бөтәһе лә юҡҡа? Ана, нисек "баһалай" улар минең ҡорбанды...

*Шул мәлдә кабинеттан "853-сө, инегеҙ!" тип ҡысҡыралар.*

- Үтегеҙ, ултырығыҙ. Ҡорбанға нимә алып килдегеҙ?

- Мөнәсәбәттәрҙе...

- Аңлашыла. Күрһәтегеҙ әле?

- Бына... Матур ғына, иҫке лә түгел, өр-яңылар, танышыуыбыҙға ярты йыл ғына әле...

- Нимә хаҡына ҡорбан итәһегеҙ был мөнәсәбәттәрегеҙҙе?

- Ғаиләне һаҡлау хаҡына...

- Үҙегеҙҙекенме? Ә уны һаҡлау кәрәкме һуң?

- Эйе. Ирем күптән һөйәркәһенә йүгерә, һәр ваҡыт алдаша, хәлем бөттө инде...

- Ә һеҙ?

- Ә мин нимә инде? Кемгә кәрәк минең фекер? Минең тормошта ла икенсе кеше пәйҙә булды, мөнәсәбәттәр башланды.

- Һеҙ шуны ҡорбан итергә йыйынаһығыҙмы ни?

- Эйе, ғаиләне һаҡлар өсөн.

- Кемдекен? Үҙегеҙ әйтеп торағыҙ: ирегеҙҙең һөйәркәһе бар. Һеҙҙең дә үҙ кешегеҙ табылған. Ғаилә ҡайҙа һуң бында?

- Һуң, паспорт буйынса беҙ барыбер ирле-ҡатынлы бит. Ғаилә инде был.

- Тимәк, һеҙ шундай тормош менән килешәһегеҙ?

- Юҡ, юҡ, нисек килешәйем, ти? Мин гел илайым, ҡайғырам!

- Тик яңы мөнәсәбәттәр башларға риза түгелһегеҙ, шулаймы?

- Был мөнәсәбәттәр ваҡыт уҙғарыу ғыналыр, тип уйлайым. Минә улар йәл түгел.

- Улай булғас, ҡайҙа ҡорбаныгыҙ?

- Минә, бында кино күрһәтәләр, тигәйнеләр. Киләсәк хаҡында! Миңә нишләп күрһәтмәйһегеҙ?

- Кинонын бында төрлөһө бар. Кемгә - киләсәк, кемгә - үткәндәр хаҡында. Теләһәгеҙ, һеҙгә бөгөнгөнө күрһәтәйек...

- Әлбиттә, теләйем!

- Башланыҡ, ҡарағыҙ.

- Ой, ой! Был мин дә баһа! Аллаҡайым, ниңә шул тиклем йәмһеҙмен? Ышанмайым! Мин бит үҙемдә ҡарап ҡына йөрөйөм.

- Был һеҙҙең йәнегеҙҙең тышҡы йөҙө шулай күренә.

- Шулай күренә? Яурындарым төшкән, ирендәр ҡыҫылған, күҙ ҡараштарым һүнгән, сәстәрем буталған...

- Йәне илағанда бөтә кеше лә шулай булып күренә.

- Быныһы ниндәй малай тағы? Ниңә ул миңә йәл? Үҙе матурҡай ғына... Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ, ул минең эскә һыйынасы...

- Таныманығыҙмы ни? Был һеҙҙең ирегеҙ бит.

- Ирем? Алдайһығыҙ! Ирем өлкән кеше бит инде...

- Ә йәне менән - бала. Шуға ла әсәһенә һыйынған һымаҡ күренә.

- Ә ул тормошта ла тап шулай! Мине һәр саҡ тыңлай. Миңә таяна. Тартыла!

- Тимәк, һеҙ - уға түгел, ә ул һеҙгә таяна?

- Әллә инде, мин бала саҡтан ҡатын-ҡыҙ көслөрәк, аҡыллыраҡ, тәүәккәлерәк булырға тейеш, тип өйрәнгәнмен. Ғаиләне ул етәкләргә, иргә ул йүнәлеш бирергә тейеш!

- Уныһы шулай инде. Көслө, аҡыллы әсәй үҙенең ир-улығҡайы менән етәкселек итә. Әрләй ҙә, йәлләй ҙә, иркәләй ҙә, кисерә лә... Ә һеҙ нисек уйлағайнығыҙ?

- Бик ҡыҙыҡ бит әле был! Мин бит уға әсәй түгел - ҡатыны! Ә экранда... Ул үҙен шул тиклем гәйепле һиҙә, шул уҡ ваҡытта бына-бына үҙенең "бумала башы"на йүгерергә әҙер, ә мин уны барыбер яратам!

- Шулай буласаҡ та: малай ҡомлоҡта уйнап ала ла өйгә ҡайта. Әсәһе янына. Түшенә ятып илар, гәйебен таныр... Ярай, фильм бөттө. Әйҙәгеҙ, тамамлайыҡ осрашыуҙы. Мөхәббәтегеҙҙе ҡорбан итәһегеҙме? Кире уйламаныгыҙмы?

- Ә киләсәк? Ниңә миңә киләсәгемде күрһәтмәйһегеҙ?

- Ә һеҙҙең киләсәгегеҙ юҡ. Әлеге бөгөнгөгөҙҙә күренеш шундай: "малайығыҙ" үҫеп етеп, икенсе ҡатынға ҡасмаһа ла, берәй сиргә дусар булыуы ихтимал. Йәки билдәһеҙлеккә китер. Һәр хәлдә, әсәһе итәге аҫтынан ҡотолоу юлын табыр. Уның да бит үҫкеһе килә.

- Миңә ни эшләргә һуң? Ни өсөн улай булғас, мин уның хаҡына үҙемде ҡорбан итергә тейеш?

- Уныһын үҙегеҙ беләһегеҙ инде. Һеҙгә бит әсәкәй булыуы бик оҡшай!

- Юҡ, минең һөйөклө, яратылыусы ҡатын булғым килә!

- Улайға китһә, әсәләрҙе лә бик яраталар инде. Шунан, үҙегеҙҙе ҡорбан итергә әҙерме һеҙ? Әлеге хәлегеҙҙе һаҡлап ҡалырға, ирегеҙҙең һаман да малай булып ҡалыуын теләйһегеҙме?

- Юҡ, мин әҙер түгел әле. Миңә уйларға кәрәк.

- Әлбиттә, әлбиттә. Беҙ һәр ваҡыт уйларға ваҡыт бирәбеҙ.

- Ә кәңәштәр бирәһегеҙме?

- Бик теләп, ихласлап.

- Әйтегеҙсе, ирем...ну... үҫһен өсөн ни эшләргә кәрәк?

- Уға әсәй булыуҙан туҡтарға кәрәк. Үҙегеҙгә йөҙ менән боролоп, Ҡатын булырға өйрәнегеҙ. Серле, ылыҡтырырлыҡ ҡатын. Тулҡынланыу, теләк тыуҙыра торған. Ундай ҡатындың түшенә ятып илағы түгел, ә сәскәләр бүләк итеп, серенадалар йырлағы килә лә инде...

- Был ярҙам итер тип уйлайһығыҙмы?

- Ғәҙәттә, ярҙам итә торғайны. Әгәр ысынлап та Ҡатын булырға уйлаһағыҙ инде. Барып ҡарағыҙ - килегеҙ! Мөнәсәбәттәрегеҙҙе алып ҡалырбыҙ, улар, ысынлап та, һәйбәт күренә. Беләһегеҙ ине, ундай мөнәсәбәттәр хаҡында күпме кеше хыял йөрөтә!

- Мин уйлайым әле...

*853-сө мөнәсәбәттәрен күкрәгенә ҡыҫып, ҡаушаған ҡиәфәттә кабинеттан килеп сыға. Сиратын көтөп торған 854-се, тулҡынланыуын еңергә тырышып, кабинетҡа ыңғайлай. Уның "Әсәйем борсолмаһын өсөн үҙемдең бөтөн мәнфәғәттәремдә ҡорбан итергә әҙермен..." тигән һүҙҙәре генә ишетелеп ҡала.*

*Ә коридор буйлап теләктәрен, һәләттәрен, карьераһын, талантын, мөмкинлектәрен, мөхәббәтен ҡорбан итергә әҙер кешеләр ары-бире йөрөп тора. Сират көтәләр...*

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА тәржемәһе.**

✓ *Ошонан башлап ҡыҙ көн дә өләсәһенә килә лә: "Үлмәнеңме әле?" - тип һорай икән. Хәҙер үҙе ҙур урында эшләй, өләсәй ҙә иҫән. Был ваҡиғаны иҫкә алыуҙы тыя ҡыҙ, алтын алҡалар ҙа уның ҡолағына күскән күптән.*



ЗАУЫҠ

# БЕРӘҮ ҺАТА СИРҘЕ, БЕРӘҮ АЛА -

## Ике тормош, ике замана...

*Мәүлит КӘРИМОВ*

*Мәүлит Зиннәт улы Кәримов 1962 йылда Белорет районы Үткәл ауылында тыуған. Әлеге ваҡытта Белорет районы Сосновка ауылында йәшәй. Ике шиғри, бер хикәйәләр китабы авторы. Урал арьяғы ижади көстәренең "Ҡуңыр буға" йәмғиәт ойошмаһының идара рәйесе урынбаҫары. Рәмил Ҡолдәүләт исемендәге әҙәби премия лауреаты.*



### Йәшлегем...

Йәшлек - йәш ат,
Эй сапты ул күндәм,
Күндән ине шыма эйәре.
Шыуып ҡына түгел - зынҡ төшәһең,
Һиҙмәй ҡалһаң алып сөйәрен.

Һиҙмәй ҡалһаң...
Һиҙелгәндер инде -
Бушатылған ҡулда теҙгенде.
Атың көтмәй - саба,
Һин - артынан,
Ауыртҡанын тоймай теҙеңдең.

Йәшлек атым өркәк булманы, юҡ!
Иҫәрләнеп үҙем өркөттөм.
Далаларҙа саптым, күктә остом,
Миндә ине көсө бөркөттөң.

Бураҙнаны боҙмаҫ сағын аттың
Алырмынмы икән мин көтөп?
Нык ултырам әле эйәремдә,
Ҡуймаһамсы тағы өркөтөп...

### Ҡәйнәләргә

Яңылыш фараз итәләр
Беҙҙә элек - электән:
Ҡәйнәләрҙең теле, имеш,
Йыуан була беләктән.
Йылангә ла ҡәйнәләрҙе
Сағыштырып ҡуялар.
Кейәү йәки килен унан
Туйҙан һуң уҡ туялар...
Һәр әсәгә үҙ балаһы,
Билгеле, бик тә яҡын.
Тик ҡәйнәләр генә белә
Кейәү йә килен хаҡын.
Һәр ҡатын-ҡыҙ әсә булһа,
Гәйбәт булыр кәмерәк!
Һәр әсә лә ҡәйнә булһа,
Донъя булыр йәмлерәк!
Яңылыш фараз йөрөтөп,
Кәмһетеүҙәр ишәйҙе.
Ҡәйнәләр ҙә шул уҡ әсәй,
Кәмһетмәйек әсәйҙе!

### Булсы "Ҡарағайлы", Сосновка!

Яратыуым һине кемгә хәжәт,
Яратмаһам да кем илаһын?
Тыуманым мин һиндә, уҡыманым,
Белмәйем дә урын йолаһын.
"Сосновка"лар илдә бик күптәр ул:
Ауыл, ҡасабалар, ҡалалар.
Һәр кемгә лә яҡын үҙ генәһе
Исем, атамаға ҡарамай.
Шул үҙ генәң бит ул берәү генә -
Тыуған ҡалаң, тыуған ауылың.
Шундай бәхет йыраҡ-йыраҡ ерҙән
Үҙ генәңә ҡайта алыуың.
Сосновка, һин, ярай, үпкәләмә!
Үпкә һүҙҙән ни бар көслөрәк?
"Ҡарағайлы" булһаң һин шулай ҙа,
Мин дә булыр инем хислерәк...

* * *

Тәңгә йылы күктән ҡояш
Ергә һипкән нурынан.
Йәнгә йылы ҡатын-ҡыҙҙың
Иргә йылмайыуынан.
Йылылығын ҡатын-ҡыҙҙың
Йылдар аша татыным.
Тәнгә, йәнгә йылы нурын
Һипкән ҡояш - ҡатыным!

### Ҡыраҡа тауҙарында

Их, Хоҙайым, алып килдең
Миҙгелдең татлы мәлен.
Хәтеремдең иң түрендә
Һаҡланған татлы тәмен.
Йыйҙыҡ микән беҙ көртмәле,
Һөйөүҙә яндыҡ әллә,
Ҡыраҡаның тауҙарында
Емештәр бешкән мәлдә?
Яҙмышымдың шул миҙгеле
Ҡабатланмаҫын беләм.
Көртмәленең тәмен бары
Татырға тауға менәм.
Әле генә тойҙом ҡайнар
Һөйөүебеҙҙең йәмен.
Иренемдә ирей татлы
Ирендәреңдең тәме...

### Киң күңелле башҡорт беҙ!

Сикһеҙ яландарындай киң
Күңелең, Башҡортостан!
Түҙемлегең ҡатыраҡтыр
Сыныҡҡан да ҡоростан.
Баҙарҙарҙа һатыусылар -
Кавказ, Азия халҡы.
Ҡасаҡтарға бында ожмах -
Бар ерҙә улар хаҡлы.
Булһындар ҙа, йәшәһендәр,
Киң күңелле башҡорт беҙ!
Ерен ташлап ҡасмай торған
Иң түҙемле халыҡ - беҙ!

### Әл дә булған...

Рәми ағай барып Эстәрлегә,
Йөрәгенә дауа алған бит!
Сихри көскә эйә кешеләре
Эстәрленең әл дә булған бит.
Әл дә булған, әл дә әле барҙар
Эстәрлелә шундай кешеләр.
Йөрәктәргә илһам, дәрт өҫтәүсе,
Йән өрөүсе табип ишеләр.
(Барам әле мин дә Эстәрлегә,
Баралмаһам, йөрәк ни эшләр?..)

### Ике замана

Ниндәй заман килде, ниндәй заман?
Үлем ала йәп-йәш ирҙәрҙе.
Заман сире килде, заман сире,
Яҡынайтып һыуыҡ гүрҙәрҙе.
Бер тиндәшем кисә китеп барҙы,
Арына ла алмай шул сирҙән.
Икенсеһе бөгөн генә китте,
Күптәр ҡалды сирҙә әсирҙә...
Һуғыштарҙан ҡайтҡан атайҙарҙың
Афғандарҙы үтте улдары.
Һуғыш, пуля йыйға алмағанды
Был сир бик тиҙ ҡыйҙы юлдарын.
Ирҙәр генәме ни, ҡатындар ҙа
Эсеп сирләй, эсеп үләләр.
Йоғошло сир заманымды биләй,
Балалар бит үҫеп киләләр.
Тиндәш, ҡәрҙәш, йәштәр китә тора,
Был сир генә һаман тарала.
Эскән ҡыҙҙан, эскән әсәләрҙән
Заман сире - бала ярала!
Ысынбарлыҡ бөгөн ысынмы һуң?
Юҡтыр үлсәү, юҡтыр сама ла.
Берәү һата сирҙе, берәү ала -
Ике тормош, ике замана...

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




### Килкә

Айбикә еңгә ҡалаға барған һайын ашханала туйынып сыға. Был юлы ул кәтлит һорай. Ашнаҡсы ауыҙ эсенән генә: "Сколько?" - тип һорай. Еңгә "килкә" тип ишетеп: "Без килкә, ни нужен ваш килкә", - тип ҡысҡырып ебәрә. Сөнки ул килька балығын яратмай. Ашнаҡсы асыҡлап һорағас, икәүләп көлгән булалар. Ауыҙ эсенән һөйләү күп кенә уңайһыҙ хәлдәр тыуҙыра шул.

### Иң шәп ағай

Өс-дүрт малай йыйылып, үҙҙәренең уҡытыусыһы ағайҙарын маҡтайҙар. Кемгәләр физика, кемгәләр физкультура уҡытыусыһы оҡшай. Малайҙарҙың икеһе туған тел уҡытыусыһын күккә күтәрә, ти. Баҡтиһәң, был уҡытыусы уларҙы уңайы сыҡҡан һайын "шкальник" алырға ебәрә икән. Аҡсаһы булмаһа, малайҙар киноға тигән аҡсаларын ҡушып ебәрәләр, уҡытыусы ла йомарт, быларға ла йәттора, ти. Бер ваҡыт ағаларының ағыңда саҡ баҫып тороуын күреп, малайҙарҙың береһе был гәҙәтенән баш тарта. Әле лә ул матур донъя көтә, олатай булған, эшләп йөрөй. Әммә икенсеһе дауам итә "эш"те. Мәктәптән һуң институт та бөтә, әммә әлеге "шкальник" енен еңә алмай, эштән ҡыуыла. Ҡатыны ла мәрхүмә, ир үҙе лә ауырый. "Шәп" ағайҙың "белеме" бик тә шәп тәьҫир иткән.

Үҫкәндә уйламайһың яҡшы-яманды, аҙағын күҙләмәйһең дә шул: соҡорға тәкмәсеп тә китәһең.

### "Елкәнән ҡолап төштө"

Ауылда йәшәүсе Бибигөл апай ҡалалағы ҡыҙы менән кейәүенә ҡунаҡҡа килгән. Ҡараһа, ни күрһен, ҡыҙының бите күгәргән, ти. Ҡәйнәһе быны сәбәбен кейәүенән һораған икән, тегеһе: - Ҡыҙың, оялмай ҙа, елкәгә менеп ултырам, тигәйне, ҡолап төштө лә китте, - тигән.

Кейәү "шәп", ҡулы менән эшләгәндә теле менән шымаланы ла ҡуйҙы.

### Попути

Баймаҡтан Өфөләге ҡыҙы менән кейәүенә ҡунаҡҡа Гөлйыһан инәй килә. Килеп инеү менән фатирҙа тәртип урынлаштыра башлай. Әйләнгән һайын кейәүенә: "По пути сүпте түк, по пути магазинга инеп сыҡ", - тип кенә тора ти был. Бер көн кейәүе менән ҡыҙы әрләшеп китә, йоҙроҡ та "татыта" кейәү кәләшенә, ҡыҙын яҡлап килеп ҡыҫылған ҡәйнәһенә лә өлөш төшә. Аҙаҡтан: "По пути ғына булды, ҡәйнәм", - тип ҡуйҙы ти кейәү.

### Көҙә ни, ат ни

Заһиҙә инәй менән Хөббөтдин бабай ғүмер буйы кәзә аҫыранылар. Ҡыш көнө бәрәстәр өйҙә тора. Бер көндө 4-5 йәшлек ейәнсәрҙәре килә, "Былар нимә ул?" тип, бәрәстәргә төртөп күрһәтә. Өләсәһе: "Былар ни, олатайыңдың аттары", - тип яуаплай. Урамда осраған бер кешегә ҡыҙ олатаһының аттары тураһында һөйләп ҡайта. Кеше аптырай, инеп күреүселәр ҙә була. Шунан алып кәзә бәрәстәренән, Хөббөтдиндең аттары, тип көләләр.

### "Ҡасан үләһең?"

Миңъямалдың ҡолағында алтын алҡаларҙың ялҡылдап тороуына ейәнсәре бик ҡыҙыға. Етмәһә, өләсәһе: "Мин үлгәс, был алҡалар һиңә булыр", - тип тә ебәрә. Ошонан башлап ҡыҙ көн дә өләсәһенә килә лә: "Үлмәнеңме әле?" - тип һорай икән. Хәҙер үҙе ҙур урында эшләй, өләсәй ҙә иҫән. Был ваҡиғаны иҫкә алыуҙы тыя ҡыҙ, алтын алҡалар ҙа уның ҡолағына күскән күптән.

Бала саҡ, үлем менән йәшәүҙе белмәгән саҡ, нимә генә әйттермәй теләндән.

### "Лампочканы йәлләйем"

Бибикамал еңгә һыҡмырлығы менән дан алған кеше. Бер бөртөк улынан да ризыҡ йәлләй. Уға, ашағаныңды ҡарай ҙа тора, тип, сәй эсергә йәки ҡунаҡҡа барырға ла ҡыйынһына кешеләр. Бер көндө тәҙрәләрендә ут күренмәгәс, күршеләре хәл белергә инә. Ни күрһен, Бибикамал өй эсендә фонарь яҡтыртып, аш бешереп йөрөй. Күршеһенә: "Бынау лампочканы йәлләйем, сәғәттәр буйына яна, ул да һыҙланалыр ул", - тигән ти. Һыҡмырҙың һәр эшкә яуабы әҙер, йөҙө лә ситаймай, теле лә тотлоҡмай.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✔ *Шәкәр ашағандан һуң ике сәғәт эсендә иммунитет яртылаш ҡына эшләй, ә өс сәғәттән һуң ул эшмәкәрлеген бөтөнләй туҡтата. Был ваҡыт эсендә организм хәлһеҙләнә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ШӘКӘР ЗЫЯНЛЫ

■ Ғалимдар билдәләүенсә, үҙ йәшенән күпкә йәшерәк күренгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың ғәҙәттә ҡан баҫымы түбән була, был иһә улар араһында йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән ауырыу хәүефен түбәнәйтә. Шуға ла бындай ҡатын-ҡыҙҙар оҙағыраҡ йәшәй. Табиптар әйтеүенсә, улар беренсе тапҡыр тышҡы ҡиәфәт менән түбән ҡан баҫымы араһындағы бәйләнеште өйрәнә. Эксперименттарҙа 514 кеше ҡатнашҡан, уларҙың уртаса йәше 63 йәш була. Шулай уҡ нәҫеләндә оҙаҡ йәшәүселәр ҙә йәшерәк күренә икән, был яңылыҡ ир-егеттәргә лә ҡағыла.

■ Шәкәр иммунитетты ҡаҡшата. 100 грамм шәкәр ҙә (шул иҫәптән фруктоза менән глюкоза ла) ҡандың аҡ тәнсәләренең зыянлы микроорганизмдар менән көрәшеү һәләтен түбәнәйтә. Шәкәр ашағандан һуң ике сәғәт эсендә иммунитет яртылаш ҡына эшләй, ә өс сәғәттән һуң ул эшмәкәрлеген бөтөнләй туҡтата. Был ваҡыт эсендә организм хәлһеҙләнә. Йоғошло ауырыуҙар менән яфаланыусыларға бөтөнләй татлы ризыҡтар ашарға ярамай. Шулай уҡ һуттар ҙа зарарлы, сөнки уларҙың составында глюкоза бар.

■ Хәҙерге химия ҙур тиҙлектә үҫешә, бөгөн кеше тарафынан синтезланған әйберҙәр уратып алған беҙҙе. Бензол, этилбензол, формальдегид, фенол, ксилол, толуол иң ағыулаусы матдәләр иҫәпләнә һәм улар бөгөн һәр йортта ла бар. Фенол линолеум, буяуҙар составында, ДВП һәм ДСП-нан яһалған осһоҙло йорт йыһаздарында бар. Фенол бауырға ултыра һәм уның эшмәкәрлеген боҙоуы ихтимал. Формальдегид - канцероген, өҫкө тын юлдары ауырыуҙарына, баш ауырыуына, аллергияға килтереүе бар. Ул осһоҙло уйынсыҡтарҙа ла бар. Шуға ла балала астма башланһа, йорттағы әйберҙәргә ҡарап сығырға кәрәк. Винил обойҙары винилхлорид бүлеп сығара, шуға ла иң зарарһыҙы булып ябай ҡағыҙ обойҙар иҫәпләнә. Елем крахмалы ҡулланырға кәңәш ителә. Сағыу, матур тәрилкә, сынаяҡтар ҙа хәүеф төркөмөндә. Һауыт-һаба ныҡ булһын өсөн уларҙың составына меламин тигән пластик ҡушыла. Алюмин кәстрүлдәрҙән дә баш тартыу яҡшыраҡ. Алюмин ярайһы әүҙем металл. Ул организмда туплаһып, Альцгеймер ауырыуына алып килеүе бар. Тефлон таба урынына керамика менән ҡапланғанын, сөгөн ҡулланырға кәрәк. Көнкүреш химияһы ла көслө аллерген. Составында лаурил сульфаты булған шампунь-гелдәр, шулай уҡ һауыт-һаба йыуыу өсөн тәғәйенләнгән саралар зыянлы. Гәрсис порошогы, аш содаһы ла һауыт-һабаны яҡшы таҙарта.

■ Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге буйынса Европа агентлығы ғалимдары асыҡлауынса, телевизорҙан рекламаланған төрлө йогурттарҙың кеше организмы өсөн бөтөнләй файҙаһы юҡ икән. Белгестәр 500 етештереүсенең тауарын тикшергәндән һуң, уларҙың 70 процентының рекламала әйтелгән мәғлүмәткә тап килмәүен билдәләгән. Әммә был яңылыҡ йогурттарҙы бөтөнләй ҡулланырға ярамай, тигәнде аңлатмай. Бары уларҙан ниндәйҙер дауалау эффекты көтмәгеҙ. Британия ғалимдары фекеренсә, көн һайын һөт йәки һөт аҙыҡтары ашаусылар гипертония менән һирәгерәк ауырый. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һөт аҙыҡтарында кальций һәм калий күп, улар ҡан баҫымын көйләү һәләтенә эйә.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**2014 йылда 8-се ҡала клиник дауаханаһы Башҡортостан Республикаһы Башлығының сифат өлкәһендә премияһына лайыҡ булды. Был медицина учреждениеһының башҡа дауаханаларҙан айырмаһы нимәлә булыуы һәм башҡа һорауҙарға яуап табыу маҡсатынан дөйөм терапия бүлеге мөдире Лилиә ФӘЙЗУЛЛИНА менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**



# АУЫРЫУҘЫҢ ХӘЛЕ...

## йылы һүҙҙән дә яҡшыра ала

**➔ Лилиә Әнүәр ҡыҙы, Республика Башлығының премияһын алғандан һуң ниндәйҙер үҙгәрештәр булдымы: яуаплылыҡ арттымы, сирлеләргә ҡарата мөнәсәбәт үҙгәрҙеме?**

- Беҙҙең дауахана баш ҡаланың Орджоникидзе районы халҡына киң профилле медицина ярҙамы күрһәтә. Киң профилле ашығыс ярҙам күрһәткәс, бик йыш үҙебеҙҙең территорияны ғына түгел, ә яҡын тирәләге стационарҙар - Иглин районынан, Шаҡшанан ебәргән пациенттарҙы хеҙмәтләндерергә тура килә. Ғөмүмән, беҙҙә даими рәүештә үҙгәрештәр бара, яңынан-яңы бойороҡтар килә, яңылыҡтар индерелә, яңы ҡорамалдар һатып алына, эш стиле үҙгәрә. Яңы, яҡшы ҡорамалдар булһа, беҙгә лә диагностика үткәреү еңелерәк. Ә ваҡытында ҡуйылған диагноз - ул ҡыҫҡа ваҡытта һәм дөрөҫ дауалау. Һеҙҙәмтәлә халыҡты күберәк ҡабул итеү, һеҙҙәмтәле дауалау алымдары ҡулланыу мөмкинлеге тыуа. Әммә интенсивлыҡ эш һеҙҙәмтәһенә зыян килтерергә тейеш түгел. Учреждение хеҙмәткәрҙәре заман менән бергә атлай, төрлө саралар уҙғара һәм ҡатнаша. Йәш белгестәрҙе һөнәри коллективҡа ҡабул итеү тантанаһында, мәҫәлән, тотош коллектив ҡатнаша. Өлкән табиптар тәжрибә уртаҡлаша, хаталанмаҫ өсөн нимә эшләргә кәрәклеген аңлата. Йәш, урта һәм оло быуындың ныҡлы бәйләнеше булдырылған. Шулай уҡ һәр кем үҙ өлкәһе буйынса һөнәри конкурстарҙа, район тормошонда, спорт ярыштарында, Сәскәләр байрамы һәм башҡа шундай сараларҙа әүҙем ҡатнашабыҙ.

**➔ Бер нисә йыл рәттән илдә диспансерлаштырыу үткәрелә. Уның һеҙҙәмтәләре тойоламы, ниндәйҙер үҙгәрештәр бармы?**

- Бөтөн яҡшы нәмә - ҡасандыр онотолған иҫке нәмә, тигән кеүек, беҙ элек булған системаға кире ҡайтабыҙ. Әлбиттә, скрининг ысулдары туберкулез кеүек социаль сирҙәрҙе асыҡлауҙа ярҙам итә. Әйткәндәй, районыбыҙ туберкулез сире буйынса ҡаланың барлыҡ дауаханалары араһында беренсе урында тора, был яҡында промзона булыуына ла бәйлелер, моғайын. Икенсе яҡтан, халыҡ составы ла төрлө, социаль статус та ҡаланың башҡа райондары менән сағыштырғанда икенсе. Диспансерлаштырыу шулай уҡ бик йыш онкологияны башланғыс стадияһында асыҡларға ярҙам итә. Артабан инде бындай ауырыуҙан күҙ яҙлыҡтырмай, уны тейешле дауалау учреждениеларына йүнәлтергә кәрәк. Юҡһа, ҡайһы бер сирлеләр үҙ һаулыҡтарына ҡул һелтәп, башҡа белгестәргә барып етмәй.

**➔ Полиция хеҙмәте тураһында, хәуефле лә, ауыр, ҙа, тип йырланыла. Кеше ғүмерҙәре һағында торған табиптар тураһында нисек әйтергә мөмкин?**

- Хәүефле тип әйтә алмайым, ләкин һәр хеҙмәттең үҙ ауырлығы бар. Сөнки хәҙер кешенең холҡо бик ауыр, барлыҡ тормош -көнкүреш, ғаилә, ғөмүмән, социаль ауырлыҡтары уның характерына үҙ эҙен һала. Бынан 30 йыл элек булған халыҡ - ул бөтөнләй икенсе категория. Бөгөн кешенең проблемалары күберәк, улар бер-береһенән генә түгел, медицина хеҙмәткәрҙәре ягынан да үҙҙәренә ҡарата йылы мөнәсәбәт көтә. Шуға ҡайһы ваҡыт пациенттың ауырыуын ғына түгел, уның тотош хәл-торошон дауаларға тура килә. Сөнки арабыҙҙа яңғыҙаҡтар, күңел төшөнкөлөгөнә бирелгәндәр күп. Улар менән 10-15 минут һөйләшеү ҙә уның хәл-торошон үҙгәртеүе мөмкин, бары тик кешенең һөйләгәнен тыңлай белергә генә кәрәк. Был үҙе дауалауҙың бер төрө, кешенең хәлен еңеләйтеүҙең бер ысулы. Шул уҡ ваҡытта кешелә агрессивлыҡ көсәйҙе. Быға иҡтисади көрсөк тә үҙ йоғонтоһон яһай, икенсе яҡтан, кешеләр үҙ-ара бик аҙ аралаша. Хәҙер хатта күршеңдә кем йәшәгәнен дә белмәйбеҙ бит. Кеше үҙ-үҙенә бикләнде. Йәштәрҙең аралашыуы компьютер, төрлө гаджеттар аша бара. Китап уҡыу онотолдо. Компьютер аша арлашыу бар, әммә унда хис-тойғолар сыҡмай, организмда тороп ҡала һәм ул ниндәйҙер ағзала туплана бара. Һеҙҙәмтәлә йылдар үткәс теге йәки был ауырыу килеп сыға.

**➔ Миҙгелгә бәйле ниндәй терапевтик ауырыуҙар бар?**

- Ҡурылдай, ҡурылдай астмаһы, сей яра ауырыуҙары, ғөмүмән, миҙгел араһында барлыҡ хроник сирҙәр киҫкенләшә. Әйтеп китеүемсә, киҫкен ауырыуҙар (үпкә шешеүе, ҡурылдай) бик аҙ, күпселек сирҙәр (гастрит, сей яра, холецистит, панкреатит) - хроник. Диета алмашынғанда, һауа атмосфераһы баҫымы үҙгәргән ваҡытта ла улар үҙен һиҙҙертә башлай. Йөрәк-ҡан тамырҙары проблемаһы булғандар, ишемия сирлеләр, гипертониктар - улар барыһы ла ологая бара һиҙгергә әйләнә. Кеше бит йәш өҫтәлеү менән ауырыуҙарынан арынмай, киреһенсә, улар өҫтәлә генә бара. Халыҡ ҡартая, олоғая, матдәләр алмашыныуы, дарыу ҡабул итеү дозаһы, дарыуҙарҙың тап килеүе үҙгәрә. Шуға миҙгел алышынған ваҡыттарҙа күберәгән ололар менән эшләргә тура килә. Бигерәк тә пневмония күп. Уны миҙгел ауырыуы, вирусլы инфекция эҙемтәһе, тиһәләр ҙә, быйыл ҡыш пневмония менән сирләүселәрҙең һаны артыуын миҙгелгә бәйләп булмай. Йәйгенән дә ауырыусылар күп. Был тап иммунитеттың түбән булыуына бәйле лә инде.

**➔ Һуңғы ваҡытта кешеләрҙән, үҙен бигүк шәптән тоймауы, әммә анализдары һәйбәт һәм табиптар аныҡ ҡына диагноз ҡуя алмай, тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә...**

- Анализдарҙың яҡшы булыуы ғына кешенең сәләмәтлеге күрһәткесе була алмай. Бәлки, тап әле әйтеп киткән нервылар системаһына бәйле, психосоматик сәбәптәр булыуы мөмкин. Шул уҡ ваҡытта табиптар лаборатор анализдар буйынса ғына түгел, ә махсус ҡорамалдар ҡулланып тикшереү үткәргәндә, сирҙең сәбәптәрен таба. Мәҫәлән, яман шештең башланғыс этаптарында ауырыу билдәләре дөйөм анализдарҙа асыҡланмауы ла мөмкин. Ғөмүмән, хәҙер шундай ауырыуҙар өсөн шул-шул кәрәк, тигән ҡараш үҙгәрҙе, сөнки кеше стандарт йәки билдәле алгоритм түгел бит, күпме кеше бар, уларҙың организмы шул тиклем үҙенсәлеккә эйә булыуы ихтимал. Кемдәләр шул уҡ сир күҙгә күренеп үтһә, кемдәләр ул бөтөнләй һиҙелмәй. Шуға, комплекслы тикшереү генә аныҡ диагноз ҡуйыуға нигеҙ була ала. Анализдары яҡшы булып та, кеше үҙен насар тоя икән, ул бит барыбер табипҡа килә. Ниҙер борсой икән, тимәк, уйланырға урын бар. Бәлки, уға ысынлап та психологик ярҙам кәрәктер. Әгәр кеше үҙендә уңайһыҙлыҡ тойһа, ул бит йүнләп эшләй алмай, уның эшмәкәрлеге түбәнәйә. Шуның өсөн, организмда саҡ ҡына үҙгәреш тойғанда ла табипҡа мөрәжәғәт итергә, хәл-торошто тотороҡландырырға кәрәк.

**➔ Дөрөҫ туҡланыу һәм дөрөҫ хәрәкәтләнеү - был хаҡта, моғайын, һәр табип көнө-төнө тылҡыйҙыр. Һуңғы ваҡытта халыҡ араһында скандинав атлауы менән мауығыусылар күбәйә...**

- Бөгөн магазин көштәләре тиҙ әҙерләнгән һәм эшкәртергә еңел аҙыҡ-түлек менән тулы. Әммә уларҙы тәбиғи тип әйтеп булмай. Беҙгә барыбер ҙә ата-олатайҙарыбыҙ туҡланған ябай ризыҡты ҡулланырға кәрәк. Картуф икән - картуф, дөгө икән - дөгө генә. Уларҙы ҡыҙҙырырға, ниндәйҙер химик тәмләткестәр ҡушырға ярамай. Ризыҡ ни тиклем ябай, ул шул тиклем сәләмәтлек өсөн файҙалы. Хәрәкәткә килгәндә, ысынлап та, бик аҙ хәрәкәтләнәбеҙ, ә хәрәкәт - ул тормош нигеҙе. Уның махсус системалары белмәйһең икән, белгәненсә хәрәкәтлән. Мәҫәлән, эштән сыҡҡас, шунда уҡ туҡталышҡа барып, транспортҡа ултырып ҡайтырға мөмкин йәки бер-ике туҡталышты йәйәү атлап үтергә була. Шулай уҡ күп ҡатлы йорттарҙа йәшәүселәр лифт көтөп торғансы, бер нисә ҡатты йәйәү менә ала. Күптәрҙең эше компьютерға бәйле һәм улар көнө буйы ултырырға мәжбүр. Ултырған ваҡытта организмда ҡан әйләнеше боҙола. Ә ҡан туктауһыҙ йөрөргә, мускулдар ҙа эшләргә, һәләнеп торорға түгел, ә тығыҙ булырға тейеш. Медицина күҙлегенән ҡарағанда, компьютер алдында көнөнә тәнәфестәр менән 3-4 сәғәт кенә ултырырға кәрәк. Шуға эш араһында тәнәфес яһап алыу мотлаҡ. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тигәнде бит бөгөн генә уйлап сығармағандар, ул быуындар туплаған тәжрибәнән килә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Кешенең сәләмәтлеге һинең медицина ярҙамындан йәки йылы һүҙеңдән яҡшырып киткәнен күреү - иң яҡшы бүләк, хеҙмәтеңдең баһаһы, һөнәреңде дөрөҫ һайлауыңдың күрһәткесе. Был тормошта иң мөһиме - яратҡан кешең, һине аңлаған ғаиләң һәм ҡәнәғәтлек килтергән эшең булыуылыр, моғайын", - ти Лилиә Әнүәр ҡыҙы. Артығын өҫтәп тороу ҙа кәрәкмәйҙер.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ *Кешенең рухи ғүмере лә уның рухи йөрәге эшмәкәрлеге менән бәйле: әгәр ҙә кеше нәфсеһенә баш була алмаһа, унда кире холоҡ барлыҡҡа килә, әгәр ҙә йөрәге нәфсеһенә тулыһынса буйһонһа, уның рухи ғүмере лә өҙөлә.*



ЭТИКЕТ

# ҠЫЛЫҠТАРЫҢА - ТӨҘӘТМӘ,

## йәғни күршеләр менән нисек аралашырға?

**Ауылда йәшәүселәр бер-береһен яҡшы белә һәм ундағы күршеләр үҙ-ара мөнәсәбәттәрен бер яйға һалып, йылдар дауамында шул ҡағиҙәләрҙе үҙгәртмәйенсә көн итә. Шәхси йорттарҙа барған хәл-ваҡиғалар күршеләргә ҡамасау тыуҙырмай һәм уларҙы бимазаламай. Ә ҡаланың күп фатирлы йорттарында күрше йәшәүселәргә иһә был йәһәттән һаҡлыҡ менән эш итергә тура килә, сөнки йоҡа ғына стена күршеләр тынысһыҙлығын боҙорға мөмкин. Шуға күрә ҡайһы бер этикет нормалары тураһында онотмау бер йортта һәм подъезда йәшәүселәр менән матур мөнәсәбәт һаҡларға ярҙам итәсәк.**



• Күршеләр этикеты бер маҡсатты күҙ уңында тота - тирә-яҡтағыларға ҡамасауламаҫҡа. Был шуны аңлата: балалар күршеләрҙең тәрбиәһе алдында шауламаҫҡа, үҙегеҙ булмағанда фатир эсендәге этегеҙ бер туҡтауһыҙ оломаҫҡа, радио, телевизор йәки башҡа музыка ҡоралы артыҡ яңғырамаҫҡа тейеш. Ошо һәм башҡа ошондай тәү ҡарашҡа ваҡ, әммә мөһим ҡағиҙәләрҙе күҙ уңында тотоп йәшәгәндә, күршеләр менән бер ҡасан да низағ булмаясаҡ.

• Әгәр ҙә балағыҙ музыка ҡоралында уйнарға өйрәнә икән, стенағыҙға келәм элеп ҡуйыу тауышты күпкә кәметәсәк. Закон буйынса 23.00 сәғәткә тиклем фатирҙарҙа ремонт эштәре, музыка уйнатыу һәм башҡа төрлө тауыш сығанаҡтары барлыҡҡа килтергән эштәр һәм шөғөлдәр менән булырға рөхсәт ителә. Ләкин шулай булыуға ҡарамаҫтан, күршеләрегеҙҙе буласаҡ ремонт һәм байрам тантанаһы тураһында алдан иҫкәртеүегеҙ үҙ-ара татыулыҡты һаҡлап ҡалырға ярҙам итәсәк.

• Ҡайһы бер күршеләр бигерәк әрһеҙ булыусан. Улар ураған һайын нимәлер һорап килә, төрлө үтенес менән мөрәжәғәт итә. Әлбиттә, ҡайһы бер осраҡта күршенең хәленә инеп, уның ниндәйҙер мөһим үтенесен кире ҡағыу дөрөҫ булмаҫ. Ләкин бындай һорау-үтенестәр көн һайын тиерлек ҡабатлана башлаһа, мөмкин булған сикте үтһә, күрше менән дуҫлыҡты бер аҙ һыуытырға ла була. Бөтә нәмәлә лә, шулай уҡ күршеләр менән мөнәсәбәттә лә, саманы белеү мотлаҡ.

• Күршегеҙгә ниндәйҙер йомош менән инергә тура килһә, ул саҡырмаһа, иң яҡшыһы - ишек төбөнән ары үтмәҫкә. Әгәр ҙә күршегеҙ менән урамда осраҡлы рәүештә осрашһағыҙ, уның сумкаһында нимә ятыуын ҡарарға ынтылырға, ниндәй әйберҙе күпмегә һатып алыуы тураһындағы мәғлүмәтте һорарға тырышмағыҙ - был әҙәпһеҙлек. Әгәр ҙә кәрәк һаһаһа, ул барыһын да үҙе һөйләп бирер. Шулай уҡ теге йәки был күршегеҙҙең күпме эш хаҡы алыуы, балаларының мәктәптәге хәлдәре, уларҙың өйөндәге хәл-ваҡиғаларҙы башҡа күршеләр менән тикшермәгеҙ, ғәйбәт һөйләп йөрөү бер кемдә лә биҙәмәй. Күршеләргә килеүселәрҙе ишекте ҡыҫып ҡарап тороу бөтөнләй мәҙәниәтһеҙлек.

• Әгәр ҙә беренсе ҡаттан өҫтә йәшәйһегеҙ икән, иҙәнгә ныҡ итеп баҫып йөрөү, балаларға иҙәнгә (йәки күршеләр яғындағы стенаға) туп һуғырға рөхсәт итеү, диван йәки башҡа мебелде дөбөр-шатыр шылдырыу һәм башҡалар аҫтағы күршеләрегеҙҙең тормошон "тамуҡ" итәсәк. Ошо хаҡта һәр саҡ иҫегеҙҙә тотоуығыҙ үҙ-ара яҡшы мөнәсәбәттәр һаҡларға булышлыҡ итер.

• Фатирығыҙҙағы бер бүлмәне ҡуртымға алып йәшәүселәр ҙә тыныс тормошҡа хоҡуҡлы. Бүлмә өсөн түләгән осорҙа, бүлмә - уның биләмәһе, шуға күрә уға ишек шаҡымайынса инергә, уның шәхси тормошо менән артыҡ ҡыҙыҡһынырға ярамай.

• Шул уҡ ваҡытта фатирҙа тороусының да бурыстары бар. Мәҫәлән, уның будильнигының тауышы бөтәһен дә уятырлыҡ булмаҫҡа, өй хужалары алдында ярым яланғас йөрөмәҫкә, әйберҙәрен фатир буйлап ташламаҫҡа тейеш. Һорауһыҙ фатир хужаларының әйберенә тейеү, уларҙың аҙыҡ-түлеген ашау, ванналағы әйберҙәр менән ҡулланыу бөтөнләй ярамаған ғалыҡ. Был ҡағиҙәләр тураһында барыһы ла белгән кеүек, ләкин йәшәү барышында төрлө ҡытыршылыҡтар тыуырға мөмкин. Шуға күрә фатирға индергәндә бөтә нескәлектәрҙе лә һөйләшеп-аңлашып эш итеү фарыз.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

### ЙӨРӘК

Нәфсе камиллыҡтың иң юғары баҫҡысына ирешкәс, йөрәк кимәленә күсә. Тынысланған нәфсе шул уҡ йөрәк ул. Фәйләсүфтәр уны "рациональ нәфсе" тип тә атай. Матди донъяның психологик кимәлендә торосыларҙың йөрәге юҡ.

Йөрәк - ул берҙәмлек (рух) һәм төрлөлөк (нәфсе) биләмәләре уртаһындағы ҡала. Рух - изгелек, ә нәфсе яуызлыҡ сығанағы. Мөхәббәт - ул рух ғәскәре, ә дәрт (теләк) - нәфсе ғәскәре. Рух - Хоҙай алдында уңыш ҡаҙаныу, нәфсе - Хоҙай алдында уңышһыҙлыҡҡа юлығыу. Йөрәк ошо ике хаким араһында урынлашҡан һәм уларҙың ҡайһыһы еңһә, йөрәк шуға буйһона.

Йөрәк - ул рухтың барлыҡ еңеүҙәре һәм ҡаҙаныштары өлкәһе.

Суфыйҙар аңлатыуында "Йөрәк - ул рух менән нәфсе уртаһында тороусы, яҡтылыҡ биреүсе матди булмаған төшөнсә, уның ярҙамында әҙәм балаһы ысын кеше була ала". Суфыйҙар йөрәктең бер нисә сифатын билдәләгән:

1. Рухи йөрәк кенә - ысын йөрәк. Суфыйҙар аңлаған йөрәк шул уҡ исемдәге физик тәндән ҡырҡа айырыла. Физик йөрәк - тәндең һул яғында, күкрәк ситлеге аҫтындағы туҡыма. Рухи йөрәк менән физик йөрәк араһында оҡшашлыҡ булғанға күрә лә, ике осраҡта ла "йөрәк" һүҙе ҡулланыла. Физик йөрәк вена һәм артерия ҡан тамырҙары буйлап ҡан ағымын тәшкил итеп, даими үҙгәреү хәлендә була. Рухи йөрәк тә шулай уҡ нескә һәм нәзәкәтле тәьҫирле рух менән тупаҫ хәрәкәтле нәфсе араһында мәңгелек хәрәкәттә.

Һәр кешенең физик ғүмере уның физик йөрәге эшмәкәрлеге менән бәйле. Әгәр ҙә йөрәккә зыян килһә, кеше ауырый, ул тибеүҙән туҡтаһа, кеше үлә. Кешенең рухи ғүмере лә уның рухи йөрәге эшмәкәрлеге менән бәйле: әгәр ҙә кеше нәфсеһенә баш була алмаһа, унда кире холоҡ барлыҡҡа килә, әгәр ҙә йөрәге нәфсеһенә тулыһынса буйһонһа, уның рухи ғүмере лә өҙөлә.

Кеше тәненең ҡап уртаһында торғанға күрә, физик йөрәкте шулай "йөрәк" тип атайҙар. Рухи йөрәкте лә нәфсе менән рух уртаһында урынлашҡанға күрә лә шул уҡ һүҙ менән нарыҡлайҙар. Физик йөрәк кешенең физик тәне, рухи йөрәк психикаһы менән идара итә.

(Дауамы бар).

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Дүртенсе сер: үҙ дәлиленде аңлау

Үҙегеҙ түгел, ғәмәлдәрегеҙ насар булыуы мөмкин икәнен аңларға ваҡыт. Был аңлау башҡаларға ла таралырға тейеш. Моғайын, әлеге ваҡытҡа нимәлер эшләргә тейеш йәки бурыслы икәненә инандырып, кешеләрҙе үҙгәрештәргә мотивациялау мөмкин түгеллеген аңлағанһығыҙҙыр. Улар үҙҙәренең аңлы ҡарары арҡаһында ғына үҙгәрә ала. Һеҙ илһамландырырға, ҡурҡытырға, хатта янарға мөмкинһегеҙ, әммә бындай мотивация оҙаҡҡа бармай һәм уларҙа тиҙерәк һеҙҙән ҡотоларға теләү ихтыяжы тыуасаҡ. Уларға үҙгәрештәр өсөн түләйәсәк хаҡҡа ҡарағанда үҙгәрештәр ниндәй файҙа килтерәсәгенә инанмай тороп, ғәҙәттәрен тамырынан үҙгәртеү мөмкин булмаясаҡ. Өҫтәүенә, Аңдары үҙгәрмәйенсә, үҙҙәре лә үҙгәрмәйәсәктәр.

## Дүртенсе сер: яуаплылыҡты ҡабул итеү

Үҙегеҙ теләгән бөтөн нәмәне эшләү мөмкинлегенә һәм хоҡуғына эйәһегеҙ. Бөрәү ҙә һеҙҙең өсөн нимәнелер хәл итмәйәсәк. Илаһ һеҙгә аҡыл һәм физик мөмкинлектәрегеҙ сиктәрендә теләгән нәмәне эшләү ихтыярын биргән. Тимәк, һеҙҙең хаталанырға, уңышһыҙлыҡ кисерергә, алдашырға, иларға, ҡысҡырырға, ялҡауланырға, асыуланырға, эгоист, тоғро, агрессив булырға, инҡар итергә, үпкәләргә, алкоголь ҡулланырға, күп ашарға, бәйелһеҙ булырға, фекерегеҙҙе үҙгәртергә мөмкинлегегеҙ бар. Аллаһы Тәғәләнең азат ихтыяры һәр саҡ һеҙҙең менән. Был һәр ваҡытта ла дөрөҫ ҡарар ҡабул итергә тейешһегеҙ тигәнде аңлатмай! Ҡарарығыҙ ошо ваҡыттағы Аң кимәлегеҙҙең дөрөҫлөгөнә бәйле. Әммә үҙегеҙ һайлаған ҡарар өсөн яуаплы икәнегеҙҙе онотмағыҙ! Теләһә ниндәй ҡарар Аңығыҙҙың әлеге мәлдәге кимәленә нигеҙләнә. Шуға күрә аныҡ хәл-торошта мөмкин булғандың барыһын да эшләйһегеҙ. Хаталаныу хоҡуғынан мәхрүм ҡалмағыҙ, сөнки хаталар ярҙамында Аңығыҙҙы киңәйтәһегеҙ.

Үҙегеҙгә тоғро булып, тормошоғоҙ һәм хыялдарығыҙҙың тормошҡа ашыуы өсөн яуаплылыҡ тойоорға өйрәнмәй тороп, азат була алмайһығыҙ. Был ваҡытта һеҙ уйҙарығыҙ, һүҙҙәрегеҙ, ҡылыҡтарығыҙ һәм ғәмәлдәрегеҙ, ҡарарҙарығыҙ өсөн яуаплылыҡ тойорға тейешһегеҙ, сөнки һәр нәмә өсөн түләргә кәрәк. Юҡҡа ғына, бейергә теләйһең икән, кәй уйнаусыға түләргә әҙер бул, тимәйҙәр. Тәбиғәтегеҙ һәм ғәмәлдәрегеҙҙең эҙемтәләре һөҙөмтәһендә һабаҡ алаһығыҙ һәм үҫәһегеҙ. Ғәмәлдәрегеҙҙең береһе лә яҡшы ла, насар ҙа, дөрөҫ тә, яңылыш та була алмай икәнлеген онотмағыҙ. Ул йә аҡыллы, йә аҡылһыҙ ғына. Аҡылһыҙ аҙымдан аҡыллы эштәргә күскән ваҡытта был бик асыҡ күренә. Шуға күрә ниндәйҙер ҡарар ҡабул итер алдынан, үҙегеҙгә түбәндәге һорауҙарҙы бирегеҙ:

• Был аҡыллы ғәмәлме?

• Ул минең төп ихтыяжымды ҡәнәғәтләндереүгә ярҙам итәме?

• Ул миңә йәки тағы ла кемгәлер зыян килтерәме?

• Уның өсөн түләгән хаҡ күпме?

• Ул Йыһан ҡанундарына ҡаршы килмәйме?

• Мин уның өсөн тейешле хаҡ түләп, эҙемтәләрен ҡабул итергә әҙерменме?

Ошо һорауҙарға яуап бирер, аңлы рәүештә тормошоғоҙҙо үҙ ҡулығыҙға алаһығыҙ. Улар һеҙгә барлыҡ ғәмәлдәрегеҙ өсөн бары тик үҙегеҙ алдында ғына яуап тотоуығыҙ тураһындағы белемгә нигеҙләнгән яңы Аң барлыҡҡа килтерергә ярҙам итә.

**Роберт ЭНТОНИ.**

(Дауамы бар).



## 14 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Красная королева". Биографический сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
02.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "После школы". Сериал (12+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Гюльчатай". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Ленинград 46". 1-3 серии. Криминальный сериал (16+).
00.05 "Честный детектив" (16+).
01.00 "Фундаментальная разведка. Леонид Квасников", "Иные. Тело. Ничего невозможного". Часть 1-я. Док. фильмы (12+).
02.35 "Срочно в номер-2" Детективный сериал (16+).
03.35 "Таежный сталкер. Волшебный мир Василия Пескова". Дик. фильм (12+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Учу башкирский язык" (0+).**
**10.15 "Городок АЮЯ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**11.00 Новости недели (на русск. яз.).**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 17.45, 01.30 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Книга сказок" (0+).**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**16.45 "Лаура. Необыкновенная жизнь". Сериал (16+).**
**18.00 "Бизнес-обзор" (12+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**23.00 "Игры патриотов". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 Г.Шафиков. "Урал-батыр" (12+).**

## 15 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят". Сериал (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Красная королева". Биографический сериал. 3-я и 4-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Структура момента" (16+).
01.35 "Наедине со всеми" (16).
02.30, 03.05 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.25 "После школы" (12+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Гюльчатай. Ради любви". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Ленинград 46". 4-5-я серии. Сериал (16+).
23.00 "Крым. Путь на Родину". Фильм Андрея Кондрашова (12+).
01.25 "Крым. Между прошлым и будущим", "Приключения тела. Испытание высотой". Док. фильмы (12+).
03.00 "Срочно в номер-2" Детективный сериал (16+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (0+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.30 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Фанташ" (0+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 18.15 "Криминальный спектр" (0+).**
**16.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**16.45 "Лаура. Необыкновенная жизнь". Сериал (16+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр" (0+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Автограф" (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Максимальный экстрим". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 Ш.Камал. "Хаджи Эфенди женится" (12+).**

## 16 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Красная королева". 5-я и 6-я серии. Биографический сериал (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.01 Ночные новости.
00.30 "Политика" (16+).
01.35 "Наедине со всеми" (16+).
02.30 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Время покажет" (16+).
03.30 "После школы". Сериал (12+).
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Гюльчатай. Ради любви". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Ленинград 46". 6-я и 7-я серии (16+).
23.00 "Специальный корреспондент" (16+).
00.40 "Национальная кухня. Помнят ли гены, что мы должны есть?", "Как оно есть. Соль" (12+).
02.50 "Срочно в номер-2". Детективный сериал (16+).
03.45 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас". Сериал (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час". Прямой эфир.**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Үткән гүмер" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.45 "Телелавка" (6+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.45 "Лаура. Необыкновенная жизнь" (16+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Американский оборотень в Лондоне". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Т.Миннуллин. "Любовница" (12+).**

## 17 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 01.30 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.10, 02.25, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Красная королева". 7-я и 8-я серии (12+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "На ночь глядя" (16+).
03.00 Новости.
03.25 "После школы". Сериал (12+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Гюльчатай. Ради любви". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Ленинград 46". 8-я и 9-я серии (16+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.40 "Инженер Шухов. Универсальный гений", "Убить императора. Английский след". Док. фильмы (12+).
02.40 "Срочно в номер-2". Детективный сериал (16+).
03.40 "Комната смеха" (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 15.45 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Дети-герои" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай баҡса" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Шәп арба" (0+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Лаура. Необыкновенная жизнь". Сериал (16+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Точка зрения ЛДПР" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Безумный спецназ". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Ф.Буляков. "Выходили бабки замуж" (12+).**

## 18 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал" (12+).
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.15 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети". Музыкальный конкурс.
23.20 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.15 "Scorpions". Вечность и еще один день".
02.10 "Сумасшедшее сердце". Худ. фильм (16+).
05.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Гюльчатай. Ради любви". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Юморина" (16+).
23.00 "Дождаться любви". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
03.00 "Старший сын Сталина". Док. фильм (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 02.00 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Морские динозавры: путешествие в доисторический мир".**
**12.45, 15.45 "Телелавка" (12+).**
**13.00 "Башҡорт йыры" представляет…" (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**16.45 "Время башкирское". "Без фильтров", "Уфимский городовой", "Уфимский тракт" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.15 "Криминальный спектр" (12+).**
**20.30 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.00 "Бьютифул". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 Х.Иргалин. "Вой волчицы" (12+).**

## 19 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Парфюмерша". Сериал (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Георгий Юматов. Амнистия для героя" (16+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Теория заговора" (16+).
15.00 "Александр Михайлов. Только главные роли" (16+).
16.00 "Мужики!.." Мелодрама (6+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. Телеигра.
19.10 "Серебряный бал". Концерт Александра Малинина.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Подмосковные вечера" (16+).
23.55 "Версаль". Исторический сериал (18+).
02.00 "Отверженные". Худ. фильм (12+).
04.50 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

04.30 "Следствие ведут знатоки". "Полуденный вор". Сериал.
06.15 "Сельское утро".
06.45 "Диалоги о животных".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
08.55 "Тренды" (12+).
09.15 "Правила движения" (12+).
10.10 "Личное. Наталья Селезнева" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Прощание славянки". Худ. фильм (16+).
13.00 "Истина в вине". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Истина в вине". Продолжение сериала (16+).
17.00 "Один в один. Битва сезонов" (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Истина в вине-2". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
00.50 "Шесть соток счастья". Мелодрама (12+).
02.55 "Марш Турецкого". Сериал (12+).
04.45 "Комната смеха".

### БСТ

**07.30, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.50 "Морская бригада" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Автограф" (12+).**
**12.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Вячеславом Черневым (6+).**
**13.30 "Замандаш" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байык-2016" (12+).**
**17.00 М.Буракаева. "Судьба, выбранная мною" (12+).**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Точно в цель. Антон Бабиков - новый герой башкирского биатлона" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "4-й период" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 "Вкус ночи". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 Р.Шарт. "Мою жену зовут Морис"**

## 20 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Парфюмерша". Сериал (12+).
08.10 "Служу Отчизне!"
08.45 "Смешарики". "Пин-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Открытие Китая".
10.50 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым (12+).
11.10 "Пока все дома".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Фазенда".
12.55 "Гости по воскресеньям".
13.50 "Инна Чурикова. Не принцесса! Королевна!!!" Док. фильм(12+).
14.55 "Черно-белое" (16+).
16.00 "Голос. Дети".
18.00 "Без страховки" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
23,00 "Саранча". Остросюжетный сериал (18+).
01.00 "Любовь по-взрослому". Комедия (16+).
03.30 "Модный приговор".
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.20 "Следствие ведут знатоки". "Полуденный вор". Сериал.
07.00 "Мульт утро".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
13.10 "Разорванные нити". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Разорванные нити". Продолжение сериала (12+).
17.30 "Танцы со звездами". Сезон-2016.
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "По горячим следам". Детективный сериал (16+).
02.30 "Мода для народа" (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 Мультфильм (0+).**
**08.15 "Замандаш" (6+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай" (12+).**
**09.30 "4-й период" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Точно в цель. Антон Бабиков - новый герой башкирского биатлона" (12+).**
**17.30 "Любимое дело" (12+).**
**18.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**18.30 "История признания" (12+).**
**18.45 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (12+).**
**19.00 "Полезные новости" (12+).**
**19.15 "Мы и есть диалог". Док. фильм.**
**20.45 "Красная кнопка" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Байык-2016" (12+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.15 "Исчезновение Элис Крид". Худ. фильм (18+).**

*ҺҮҘ АРАҺЫНДА*

# ФАТИРҒА АҠСА ЙЫЯМ...



**Башҡортостанда йәшәүселәргә фатир һатып алыуға аҡса туплау өсөн уртаса 11,9 йыл кәрәк. Әммә уларҙың башҡа, шул иҫәптән туҡланыуға һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә сығымдары булмаҫҡа тейеш.**

"Фатирҙар донъяһы" порталы аналитиктары төрлө төбәктәрҙә күсемһеҙ милек өсөн аҡса йыйыуға күпме ваҡыт талап ителәсәген иҫәпләп сығарған. Иҫәпләүҙәр уртаса хеҙмәт хаҡы нигеҙендә яһалған.

Шулай итеп, республика 25 мең һумлыҡ уртаса эш хаҡы (2015 йылға Росстат мәғлүмәттәре буйынса) һәм 3,6 миллион һумлыҡ уртаса фатир хаҡы менән торлаҡтың ҡиммәтлелеге буйынса бишенсе урында. Мәскәү, Ҡырым, Севастополь һәм Санкт-Петербург Башҡортостандан алдараҡ тора (18-14 йыл).

Чукотка, Ненец автономиялы округы, Сахалин, Ямал-Ненец автономиялы округы, Магаданда йәшәүселәр 2,8-3,9 йылда фатир өсөн аҡса туплай ала. Был төбәктәрҙә хеҙмәт хаҡы - 61-78 мең һум, күсемһеҙ милек үтә ҡиммәт түгел. Шулай ҙа "нефтселәр" һәм "газовиктар" һуңғараҡ төпләнергә теләгән төбәктәрҙә торлаҡ һатып алыуға өҫтөнлөк бирә, тип асыҡлыҡ индерә эксперттар.

# БЕНЗИН АРЗАНЫРАҠ



**Өфө - бензин хаҡының арзаныраҡ булыуы буйынса Волга буйы федераль округында лидерҙар рәтендә. Федераль дәүләт статистикаһы хеҙмәте 2016 йылдың 1 февраленән 7-нә тиклем нефть продукттарын етештереүгә һәм уларҙың хаҡына аҙна һайын эшләнгән мониторинг мәғлүмәттәрен бирҙе.**

Башҡортостандың баш ҡалаһында бензиндың бер литры уртаса 33,94 һум тора, шул иҫәптән А-76 (АИ-80) маркалы - 31,80 һум, АИ-92 - 32,99, АИ-95 һәм унан юғарыраҡ - 36,76, дизель яғыулығы - 35,93 һум.

Ҡаҙанда бензиндың бер литры - 33,27, Һамарҙа 33,66 һум тәшкил иткән. Волга буйы федераль округында иң ҡиммәтле бензин Пермдә (35,03 һум), Түбәнге Новгородта (34,95), Ижевскиҙа (34,85) һатыла.

# ҮҘЕБЕҘҘЕКЕ - ҮҘӘКТӘ



**Өфө халҡы илебеҙҙә етештерелгән автомобилдәргә өҫтөнлөк бирә. "Автостат" аналитика агентлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2015 йыл йомғаҡтары буйынса республиканың баш ҡалаһында яңы еңел автомобилдәр баҙарында Lada бренды лидер булып тора. Өфөләр илебеҙҙә етештерелгән 2,3 мең машина һатып алған. Икенсе урында - Kia (1,7 мең). Өсөнсөлә - Renault (1,5 мең).**

Chevrolet автомобиле һатыу 2014 йыл менән сағыштырғанда кәмегән (-61,4 процент). Datsun ыңғай динамика күрһәткән (+96 процент). Моделдәр хаҡында һөйләгәндә, Kia Rio, Lada Granta, Hyundai Solaris - лидерҙар рәтендә. Kia Rio 2014 йыл менән сағыштырғанда барыһынан да аҙыраҡ юғалтҡан (-13 процент), барыһынан да күберәк юғалтыусы - Renault Duster (-52,9 процент). Ошо күрһәткестәр менән Өфө яңы еңел автомобилдәр баҙары динамикаһы буйынса 10 лидер ҡала исемлегенә инде. Дөйөм алғанда, бер йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында автомобиль баҙарында һатыу күләме 50,1 процентҡа кәмегән. Мәҫәлән, 2015 йылда 14 261 машина һатылған, 2014 йылда иһә - 28 560.

# АҘЛАП БУЛҺА ЛА АРТА...



**1 февралдән Башҡортостанда балалы ғаиләләргә пособиелар, шул иҫәптән бала тыуғанда бер тапҡыр бирелә торған пособие, йәш ярымға тиклем бала тәрбиәләү буйынса айлыҡ пособие һәм йөклөлөк осоронда медицина учреждениеһына иртә иҫәпкә торған өсөн пособие индексацияланды. Быйыл уларҙың күләме ете процентҡа артты, тип аңлаттылар Социаль страховка фондының төбәк бүлексәһендә.**

Хәҙер бала йәш ярымға еткәнгә тиклем беренсе баланы ҡарау буйынса айлыҡ пособиеның минималь күләме 3344,91 һум, икенсе һәм унан һуңғы балаларға 6689,83 һум тәшкил итә. 2016 йылдың ғинуарынан 2016 йылдың февраленә йәш ярымға тиклем бала ҡарау буйынса күсә торған пособиелар өсөн пособиеларҙың минималь күләме яңынан иҫәпләнә. Бала тыуғас та ғаилә бер тапҡыр 17 839,55 һум аласаҡ.

Йөклөлөк осоронда медицина учреждениеһына иртә иҫәпкә торған ҡатын-ҡыҙҙарға пособие 668,99 һумға тиклем арттырыла. 2016 йылдың 1 ғинуарынан һуң тәғәйенләнгән пособиелар өсөн бала тәрбиәләү буйынса айлыҡ пособиеның сикке суммаһы тулы календарь ай өсөн 21 554,82 һум тәшкил итәсәк.

# ҠАТЫН-ҠЫҘ КҮБЕРӘК



**Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө алдынан Башҡортостанстат шундай статистика мәғлүмәттәре килтергәйне.**

Республикала 2,2 миллион ҡатын-ҡыҙ йәшәй, был халыҡтың 53 процентын тәшкил итә. 1000 ир-атҡа уртаса 1133 ҡатын-ҡыҙ тура килә, әүәлгесә 1000 малайға 950 ҡыҙ тыуа. 34 йәштән һуң гүзәл зат күпселекте тәшкил итә башлай, 70 йәшкә уларҙың һаны йәштәш ирҙәргә ҡарағанда ике тапҡырға күберәк. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ғүмер оҙайлығы - 76, ир-егеттәрҙеке - 64 йәш.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың 47 проценты иҡтисад өлкәһендә эшләй һәм республика хеҙмәт ресурстарының яртыһын тиерлек тәшкил итә. Эшләүсе гүзәл заттың уртаса йәше - 40 йәш.

Һаулыҡ һаҡлау, иҡтисад һәм идара итеү, мәғариф, мәҙәниәт һәм сәнғәт белгеслектәре буйынса белем алыусы студенттар араһында ла ҡыҙҙар күп.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 март "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**13 март "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия

**17-18 март ПРЕМЬЕРА "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса)

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 март "Йәләлетдин атай"** (М. Кәрим), уйланыу

**16 март "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 10.00, 12.00

**17 март "Как Колька двойку исправлял"**, поучительная сказка. Начало 10.00, 12.00

**17 март "Ҡарт кейәүҙәр, йәки Шомбай ҡоҙа"** (Ф. Бүләков), фольклор комедия

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**12 март "Күңелле йәшәйбеҙ"** (Н. Ғәйетбаев), комедия

**13 март "Зиму провожаем, весну встречаем"**, оркестр русских народных инструментов. Начало 12.00

**16 март "Тылсымлы моң - илһам илендә..."**, филармония артистары концерты

**18 март "Аҙашҡан ҡунаҡ"** (Н. Птушкина), комедия

*ХОККЕЙ*

САЛАВАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

# ЕҢЕҮ КӨТӘБЕҘ, ЕҢЕҮ!

**Континенталь хоккей лигаһында Гагарин кубогы өсөн көсөргәнешле алыш дауам итә. 5 мартта "Салауат Юлаев" командаһы Ҡаҙандың "Аҡ Барс"ын үҙ боҙонда ҡаршыланы. Дөйөм иҫәп 3:3 булғанлыҡтан, ике яҡ та еңеүгә дәғүә итә, ике команданың да быйылғы миҙгелдә уйнау-уйнамауы ошо майҙанда хәл ителергә тейеш ине.**

Уйынға старт бирелеү менән тиерлек, ҡунаҡтар юлаевсылар ҡапҡаһына беренсе шайба сәпәп тә өлгөрҙө. Архиповтың һөжүмен һаҡсылар ҙа, хатта ҡапҡа һаҡсыһы Сведберг та тотҡарлай, туҡтата алмай ҡалды. Ләкин юлаевсылар яуапты оҙаҡҡа һуҙманы - 17 секунд үтеүгә, юлаевсыларҙың һөжүмсеһе Лисин "Аҡ Барс" ҡапҡаһын "асыҡ тип иғлан итте". Ун биш минуттан Гончаров ҡунаҡтар ҡапҡаһына тағы бер шайба осороп, командаһын алға сығарҙы. Икенсе осорҙа майҙан хужалары бер-нисә тапҡыр ҡунаҡтарҙың ныҡлы һөжүмен кире ҡаҡты. Сведберг ҡапҡаны ныҡ һаҡланы. Ҡунаҡтар өсөнсө осорҙа ғына юлаевсылар ҡапҡаһына бер шайба оҙата алды. Шулай итеп, Игорь Захаркин тәрбиәләнеүселәре Гагарин кубогы өсөн ярыштың йәнә бер баҫҡысында көс һынашыу хоҡуғы алды.

Хәҙер инде юлаевсылар сирек финал уйындарын йомғаҡлап, Омскиҙың "Авангард"ы менән көс һынаша. Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөндә Өфө командаһы көйәрмән ҡыҙҙарға бүләк эшләне - ситтә уҙғарған осрашыуҙа 3:2 иҫәбе менән еңеп сыҡты. Ләкин 10 мартта көсөргәнешле алышта майҙан хужалары - авангардтар - 5:4 иҫәбе менән еңеүгә өлгәште. Өсөнсө осрашыу "Өфө-Арена"ла үтә. Юлаевсылар ниндәй тактика ҡулланыр? Уныһын ваҡыт күрһәтер...

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Март (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (5) дүшәмбе | 6:05 | 7:35 | 13:30 | 17:46 | 19:16 | 20:46 |
| 15 (6) шишәмбе | 6:02 | 7:32 | 13:30 | 17:48 | 19:18 | 20:48 |
| 16 (7) шаршамбы | 6:00 | 7:30 | 13:30 | 17:50 | 19:20 | 20:50 |
| 17 (8) кесе йома | 5:57 | 7:27 | 13:30 | 17:52 | 19:22 | 20:52 |
| 18 (9) йома | 5:55 | 7:25 | 13:30 | 17:54 | 19:24 | 20:54 |
| 19 (10) шәмбе | 5:52 | 7:22 | 13:30 | 17:56 | 19:26 | 20:56 |
| 20 (11) йәкшәмбе | 5:50 | 7:20 | 13:30 | 17:58 | 19:28 | 20:58 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# АРТЫҠ БОРСОЛОУ ҺӘМ АРТЫҠ ҠУРҠАҠЛЫҠ

Берәй эште, алдын-артын уйламайса, тиҙгенә башҡарып, эшләп ташлау өсөн атлығып, хәүефлеккә төшөү ҙә рух хасталығылыр. Әйтергә кәрәк, донъялағы бөтөн ҡәбәхәтлектәр һәм дә енәйәттәр бына ошо сәбәптән яһала. Асыу һәм ғазап үҙенә күрә бер төрлө тилелек. Асыу сыҡҡан, асыу ҡабарған саҡта, шулай уҡ ғазапланған ваҡытта иҫ-аҡыл эшләмәй, улар аңдан сыға. Кеше үҙенең нимә эшләгәнен дә белмәй ҡала.

Быны нәҡ киреһе булған артыҡ ҡурҡаҡлыҡ та яман нәмә. Был хаҡта Бәйғәмбәребеҙҙең: "Аллаһым! Ҡурҡаҡлыҡтан һиңә һыйынамын", - тигән доғаһы ҡурҡаҡлыҡтың насар сифат булыуын аңлата.

АФАРИН!

# ҠЫҘҘАРЫБЫҘ...

## Мәскәүҙә лә һынатмай

**Илебеҙҙең баш ҡалаһында өсөнсө тапҡыр "Мәскәү һылыуҡайы" гүзәллек бәйгеһе уҙҙы. Конкурста баш ҡаланың төрлө юғары уҡыу йорттарында белем алған ун башҡорт ҡыҙы ҡатнашты.**

"Мәскәү һылыуҡайы" - баш ҡалабыҙҙа йәшәгән милләттәштәребеҙҙең иң көтөп алған байрамына әйләнде. Был юлы ла Мәскәү химик технологиялар университетының конкурс барасаҡ тамаша залына дүрт йөҙҙән ашыу кеше йыйылды.

Йылдан-йыл был конкурста ҡатнашыусылар һаны ла арта, бәйге этаптары ла ҡатмарлаштырыла, ҡыҙыҡлыраҡ була бара. Быйылғы бәйгенең темаһы башҡорт ҡатын-ҡыҙының боронғоһона һәм бөгөнгөһөнә арналды. Ҡыҙҙар үткән заманда йәшәгән рухи остазына хат яҙҙы. Хаттар бөйөк шәхестәр араһында Рәми Ғарипов, Зәйнәб Биишева, Рабиға Ҡушаева, граф Перовский, Зәки Вәлиди һәм башҡаларға адресланғайны. Тағы бер конкурс этабы - башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының түшелдереген эшләү - тамашасы күңеленә бигерәк хуш килде. Һәр ҡыҙ үҙенең түшелдерегендә ырыуының символын йә районының гербын, йә ниндәйҙер башҡа йөкмәткене һүрәтләне. Интеллектуаль конкурс ваҡытында ҡыҙҙар тормоштарындағы ниндәй уңыш өсөн Оскар алыр һәм бының өсөн кемгә рәхмәтле булырҙар ине, тигән һорауға яуап биреп, тапҡырлыҡҡа һынау үтте. Яуаптары ниндәй булдымы? Ҡыҙҙарҙың күбеһе иң ҙур уңыш итеп Мәскәүгә уҡырға инеүҙәрен, гүзәллек бәйгеһендә ҡатнашырға батырсылыҡ итеүҙәрен атаны һәм иң төп рәхмәттәрен ата-әсәләренә белдерҙе. Артабан бәйгесе ҡыҙҙар шаян "Тыпырҙаҡ"ты башҡарып, бейеү оҫталығын да күрһәтте.

- Һәр хәлдә, бәйге төрҙәре аша баһалама ағзалары конкурста ҡатнашыусы ҡыҙҙарҙың эске донъяһын да, характерын да, матурлыҡ һыҙаттарын да, талантын да, ҡул оҫталығын да күрә-тоя алды, - тине конкурстың режиссеры Фатима Янбаева.

"Мәскәү һылыуҡайы"ның баһалама ағзалары ла бик абруйлыларҙан ине. Бына улар: Башҡортостан Республикаһының Рәсәй Президенты эргәһендәге тулы хоҡуҡлы вәкиле урынбаҫары Олег Матыцин, "Финэкспертиза" халыҡ-ара финанс компанияһы генераль директоры урынбаҫары Илгиз Байморатов, режиссер, Мәскәүҙәге Шиғри театр етәксеһе Вадим Матюнин, "Злата" ювелир йорто етәксеһе Марта Ананян, "Рәсәй гүзәле" конкурсы шеф-редакторы Алина Каракулина, дизайнер һәм продюсер Елена Мардаева, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларындағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары төбәк-ара Ассоциацияһы етәксеһе Азат Бадранов, йырсы Рэдик Ефремов, Азия халыҡтары союзы етәксеһе Владимир Эрдниев, Бөтә Рәсәй халыҡ-ара йәштәр берлеге етәксеһе Кантемир Хуртаев, Татарстандың Мәскәүҙәге тулы хоҡуҡлы вәкиллегенең Йәштәр советы рәйесе Эмиль Файзуллин һәм Мәскәү тамашасыһының иң көтөлгән һәм яратҡан ҡунаҡтары - Башҡортостандан "Юлдаш" радиоһы дикторҙары Әхәт Мортазин һәм Филүс Ҡасимов.

Шулай итеп, конкурс йомғаҡтары буйынса Гран-при һәм Swarovski ҡиммәтле таштары һәм кристалдары менән биҙәлгән таж, "Һомай" студияһынан ҡиммәтле тун 1-се Мәскәү дәүләт медицина университеты студенты, Ейәнсура ҡыҙы Илнара Ниәҙғоловаға эләкте. Илнара үҙен республикабыҙҙа үтәсәк "Һылыуҡай" конкурсында ла һынап ҡарамаҡсы. Шулай уҡ "Мисс Азия. Мәскәү" гүзәллек бәйгеһе продюсеры Елена Мардаева башҡорт һылыуын конкурс финалына саҡырҙы.

Беренсе урынға - Ямал-Ненец автономиялы округының Ноябрьск ҡалаһында тыуып-үҫкән башҡорт ҡыҙы Айгөл Аллағолова, икенсе урынды иһә Йылайыр ҡыҙы Гөлзифа Тутманова менән Учалынан Юлиә Әбүбәкирова бүлеште. Юлиә шулай уҡ "Мисс Интернет" номинацияһында еңеп, "Азия халыҡтары союзы" ойошмаһынан iPod Touch менән бүләкләнде. Өсөнсө урында - Йылайырҙан Аҡйондоҙ Сараева, Хәйбулланан Фәйрүзә Әбсәләмова, Баймаҡтан Гүзәлиә Байегетова. Гүзәлиә матур телмәре менән "Юлдаш" радиоһы дикторҙарын да әсир итте һәм уларҙың махсус бүләгенә - 30 мең һумлыҡ сертификатҡа эйә булды, радионың Мәскәүҙәге штаттан тыш хәбәрсеһе итеп эшкә саҡырылды.

"Мисс Артислыҡ" номинацияһында Баймаҡ һылыуы Миләүшә Таһирова еңде. "Злата" ювелир йортоноң махсус бүләге - диадема менән Әлфирә Торсонбаева бүләкләнде. Ә "Башстатус" тип исемләнгән башҡорт интернет селтәрендәге иң ҙур төркөмдөң махсус призы Әбйәлил ҡыҙы "Мисс шарм" Регина Раяноваға тапшырылды.

Был сараға әҙерлек барышында ойоштороусылар тағы бер ҡыҙыҡлы проектты тормошҡа ашырҙы: конкурста ҡатнашыусы ҡыҙҙарҙы милли кейемдәрҙә Мәскәүҙең тарихи архитектура ҡоролмалары янында фотоға төшөрөп, матур календарь баҫтырып сығарҙы.

**Фаягөл ЮНЫСОВА.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАСЫП КИТҺӘҢ ДӘ...

## сәсеп кит

Алйотҡа өгөт әйтһәң, "алдай" тиер, аҡыллыға әйтһәң, "балдай" тиер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Алдаҡтың аяғы ҡыҫҡа ла, ҡулы оҙон шул.

**(Лех Навроцкий).**

Алдаҡтың аяғы ҡыҫҡа ла, йөҙө бик мөләйем бит әле.

**(М. Путинковский).**

Әгәр ҙә ир-егет ҡатын-ҡыҙҙы бер ваҡытта ла алдамай икән, тимәк, ул ҡатын-ҡыҙҙың тойғоларына төкөрөп ҡарай.

**(Олин Миллер).**

Һөйгәнеңә "Алдайһың бит!" тип әйтмә, юҡһа, унын дөрөҫтө һөйләй башлауы бар.

**(Иоанна Вилиньская).**

Алдаҡсыға яҡшы хәтер кәрәк.

**(Квинтилиан).**

Кем дә кем бәләкәй генә алдаҡты оҙаҡ ваҡыт йәшәтә ала, шул иң яҡшы алдаҡсы була.

**(Сэмюэл Батлер).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер Ҡытай хакимы һарайындағы хеҙмәтселәре менән һунарға сыға. Күл буйына килеп етеү менән хаким унда йөҙөп йөрөүсе аҡҡошто күрә һәм уғын уға төбәп атып ебәрә. Ләкин сәпкә теймәй. Аҡҡош тиҙ генә ҡамышлыҡтар араһына инеп юғала. Шул саҡ хакимдың хеҙмәтселәре ҡысҡырыша башлай:**

**- Ҡалай уңышлы төбәп аттығыҙ, әфәнде!**

**- Беҙҙең хакимыбыҙ Ҡытайҙың иң шәп уҡ атыусыһы!**

**- Беҙҙең хакимдың уғы һәр саҡ сәпкә генә тейә лә ҡуя ул!**

**Атҡан уғының аҡҡошто хатта яралап та ҡарамағанын, хеҙмәтселәренең икейөҙләләнгәнен белһә лә, хаким өндәшмәй. Тик һарайына ҡайтҡас, аҡыл эйәһенән һорай ҡуя:**

**- Әйт әле, ни өсөн минең хеҙмәтселәрем алдаша? Улар берәй ваҡыт дөрөҫтө һөйләрме миңә?**

**Аҡыл эйәһе хакимға шулай тип яуап ҡайтара:**

**- Әгәр ҙә хаким шиғыр ярата икән - хеҙмәтселәре уға шиғыр уҡый. Әгәр ҙә хаким музыка менән мауыға икән - хеҙмәтселәре музыка ҡоралын ҡул осонда ғына тота. Әгәр хаким ялағайлыҡты һәм ялғанды ярата икән - ул саҡта хеҙмәтселәре лә ялағайлана һәм алдаша. Хеҙмәтселәр хакимға оҡшаған, уның күңелен төшөрмәгән эште генә башҡара. Шулай булғас, әфәндем, уйлап ҡарағыҙ инде - һеҙгә ялғанларға мәжбүр булған хеҙмәтселәр ғәйепләме бында?.."**

1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 11 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 423/03